ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 август (урағай) 2025

№30 (1174)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һомай нисек аҡҡошҡа әйләнгән?**

Ошондай мәлдәрҙе һүрәткә төшөргө килә.



8-9

**Ҡурай Торатауға саҡыра!**



11

**Ҡырҡ йылдан һуң...**

әрме дуҫым менән осраштым





12

**Бала табыуға бәйле им-том**



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Башҡорттар Ҡаҙанға яһаҡ ташыуҙы уңайһыҙ тип тапҡан һәм батшанан уларҙың ерендә ҡала төҙөүҙе, баҫҡынсыларҙан һаҡланыу өсөн ғәскәр ебәреүҙе һораған... Стрелецтар тау башында төҙөгән ҡаласыҡ башта шул тау исеме менән Торатау тип атала, ә ул имән бүрәнәләрҙән стена менән уратып алынғас, урындағы халыҡ һәм ҡаҙаҡтар уны Имәнҡала тип йөрөтә башлай. Бер үк ваҡытта ҡаласыҡ Өфө тип тә йөрөтөлә.*

*Р.Г. Игнатьев.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Баҡса тукландырып ҡына ҡалмай, хеҙмәт мәктәбе лә, күңелгә ял, ҡәнәғәтлек тә бирә, тиһегеҙме?

***Миңлеғәлим БОХАРБАЕВ, һаулыҡ һаҡлау хеҙмәте ветераны, Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау отличнигы, Хәйбулла районы, Аҡъяр ауылы:*** Донъя көткәс, барыһы ла кәрәк, бигерәк тә йорт янындағы ярҙамсы хужалыҡ - баҡса. Шуға күрә төп һөнәреңдән тыш, ниндәйҙер физик хеҙмәт менән булыу, ә беҙҙең осраҡта картуф, йәшелсә-емеш үҫтереү тик файҙаға ғына, әлбиттә. Иң беренсе - һаулыҡ өсөн файҙа: үҙ ереңдә, экологик таҙа шарттарҙа, хәләл көсөң, үҙ ҡулдарың менән үҫтерелгән ризыҡтың сәләмәтлек өсөн иң яҡшыһы икәнен һөйләп тороу ҙа кәрәкмәйҙер. Сөнки беҙ еребеҙҙе тәбиғи ашлама менән генә байытабыҙ, химия ҡулланмайбыҙ, хатта колорадо ҡуңыҙына ла ағыу һиптермәйенсә, һәр төрлө халыҡ ысулдары ҡулланабыҙ. Икенсенән, асыҡ һауалағы физик эш, сәскән ваҡ ҡына орлоҡтарҙан үҫтереп, йыйып алынған мул уңыш күңелгә, ысынлап та, ҡәнәғәтлек килтерә. Ни тиһәң дә, ауылда тыуып-үҫкәнлектән, бала саҡтан таныш, күңелгә лә, ғәҙәткә лә һеңгән хеҙмәт тәрбиәһе, күҙ күреп, ҡул өйрәнгән физик шөғөлдөң артабан үҙаллы йәшәй башлағас бик тә кәрәге тейеүе, килеп тыуған ҡайһы бер тормош мәсьәләләрен үҙаллы хәл итеүгә, юғалып ҡалмаҫҡа, төрлө юлдар, саралар эҙләп табырға өйрәтеүе бәхәсһеҙ һәм беҙҙең быуын вәкилдәренең донъя көтөү өлгөһөндә раҫлана.

Мин ана шундай эш һөйөүсән, ҙур йәшелсә-емеш баҡсаһы тотоп, уны ғаилә аҫрау сараһы булараҡ ҡына түгел, ә балаларға физик эш күнекмәләре биреү мәктәбе лә тип ҡаралған ғаиләлә үҫтем. Атайым да, әсәйем дә уңған, ауылда бер тигән баҡсасылар ине. Әсәйемдең, ғөмүмән, ҡулдары ҡотло булды, тупраҡҡа ниндәй генә орлоҡ төртһә лә, шытып сығыр, гөрләп үҫеп китер ине. Ҡыяр, кишер, һуған емерелеп уңа торғайны, әсәйем уларҙы туғандарға, күрше-күләнгә таратып сығыр булды. Ә атайым күп итеп картуф ултырта ла, Таналыҡтан ыҙан аралрына һыу үткәреп, картуфлыҡты һуғара ине, аҙаҡ бергәләшеп утайбыҙ, күмәбеҙ. Бынан тыш, йылға аръяғындағы йәшелсә баҡсабыҙҙа ла ҡыяр тиһеңме, ҡабаҡмы, башҡаһы, хатта ҡарбуҙына тиклем үҫтерә инек тә уңышын көйәнтәләп ташый торғайныҡ.

Аҙаҡ, табиб һөнәренә уҡып, ҡатыным - Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы менән ауылда үҙ донъябыҙҙа ҡорғас, эште әлегесә баҡсанан башланыҡ. Һөнәребеҙ буйынса эшләп йөрөгәндә лә ваҡыт таптыҡ, Хәйбулла ерен әллә ни иркәләмәгән тәбиғәт шарттары - ҡоролоҡҡа ла бирешеп торманыҡ, бөтәһен дә сәстек, үҫтерҙек. Әле икебеҙ ҙә хаҡлы ялға сыҡҡас, баҡса шөғөлөнә иғтибар бермә-бер артты. Атайым менән әсәйем кеүек, үҙебеҙгә лә еткерәбеҙ, пенсияға ғына һалынып ултырыу юҡ. Хәләл ризыҡҡа етә буламы! Шул уҡ ваҡытта балаларыбыҙ ғаиләһен дә туғандарҙы ла һыйлайбыҙ.

Эйе, бынан тыш, һорауығыҙҙа үҙегеҙ әйтмешләй, күңел өсөн дә ул баҡса. Ул - үҙенә күрә бер хозурлыҡ, йәнгә ял бирерлек, көсөргәнеште, борсоулы уйҙарҙы таратып ебәреүсе тәбиғәт мөйөшө. Йәй етһә, балалар ҡайта: баҡсабыҙ тағы ла йәмләнеп, йәшәреп китә, ә инде кистәрен ошонда ултырып, самауырлап сәй эсеү сәғәттәре онотолмаҫлыҡ ләззәт бит ул!

## БОРСОУЛЫ ХӘЛ

# ҠАҘЫЛМА БАЙЛЫҠ СЫҒАРАҺЫҢМЫ?

## Артыңдан йыйыштырып кит!



**Башҡортостан - файҙалы ҡаҙылмаларға бай төбәк. Алтыны ла, төрлө төҫтәге тәбиғи таштары ла күп бында, ә Ағиҙел йылғаһы бассейны - иң юғары сифатлы ҡом-таш ҡатнашмаһы ятҡылығына бай. Дәүләт тарафынан тейешле иғтибар етмәү арҡаһында тиҫтәләгән йылдар буйы республика биләмәһендә ҡаҙылма байлыҡтар сығарыу өлкәһендә тәртип боҙоуҙар йыйылды, халыҡтың ризаһыҙлығы артты, яҙаһыҙлыҡ саманан тыш нәфсе ҡотороуына килтерҙе.**

Ҡырағайҙарса ҡаҙылма байлыҡ сығарыу аяныслы һөҙөмтәләргә килтерҙе. Айырыуса Урал аръяғында урмандар ҡырҡылды, соҡолған карьерҙар күбәйҙе, уңдырышлы тупраҡ юҡҡа сыҡты, һыу ятҡылыҡтары бысранды. Тәбиғи байлыҡтарҙы сығарған компаниялар ерҙе тергеҙеү менән шөғөлләнмәне. Был хәл йылдан-йыл халыҡтың йәшәү сифатына кире йоғонто яһаны.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

***✓ Перинаталь хәлдәр, тыумыштан килгән аномалиялар һәм тын алыу ағзалары ауырыуҙары сабыйҙар үлеменең төп сәбәптәре булып тора. Балалар араһындағы үлем осраҡтарына төрлө йәрәхәттәр, онкология сәбәпсе.***



ҠЫҪҠАСА

# ЭШЛӘП ЙӨРӨҮСЕЛӘРГӘ...

**Социаль фонд 2025 йылдың 1 августынан эшләп йөрөгән пенсионерҙарҙың страховка пенсияһын ҡайтанан иҫәпләй, бының өсөн ғариза яҙыу талап ителмәй.** Был хаҡта Рәсәй Социаль фондының телеграм-каналы хәбәр итә. 2024 йылда ла рәсми рәүештә эшләүен дауам иткән пенсионерҙарҙың пенсияһына өҫтәмә аҡса түләнә. Күләме индивидуаль пенсия коэффициенты (ИПК) дәүмәленән һәм уның хаҡынан сығып билдәләнә. Иң күбе өс пенсия коэффициентын алырға мөмкин. 2025 йылдың июлендә 80 йәше тултырғандар өҫтәмә алырға хоҡуҡлы (страховка пенсияһына 17 815,4 һум). Быйыл июлдә I төркөм инвалидлыҡ алған пенсионерҙарға ла өҫтәмә ҡаралған (уларҙың аныҡ билдәләнгән түләү күләме 8 907,7 һумға арта). Шулай уҡ ошо ике категорияға ҡарау өсөн өҫтәмә: страховка пенсияһына - 1314 һум, дәүләт пенсияһына иһә 1377 һум. "Пенсияға өҫтәмә бирәүһенә генә нигеҙләнеп түләнә", - тип билдәләнә хәбәрҙә. Социаль фондҡа мөрәжәғәт итергә кәрәкмәй. Аҡса августа ғәҙәти график буйынса күсереләсәк. Бының өсөн ғариза яҙыу талап ителмәй.

✓ **Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығы башлығы Зөһрә Гордиенко Туризмды үҫтереү үҙәге етәкселеген ҡулға алыуға бәйле хәл-ваҡиғаларға үҙ фекерен белдерҙе.** "Ошо хәлдәр, һис шикһеҙ, республика имиджына һәм туризм тармағына йоғонто яһай. Әле тәфтиш саралары бара һәм ғәйепләүҙәрҙең дөрөҫмө-юҡмы икәне тураһында һөйләү иртәрәк, барыһын да суд хәл итә тип иҫәпләйем", - тине Зөһрә Гордиенко. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, үткән аҙнала көс структуралары хеҙмәткәрҙәре Туризмды үҫтереү үҙәге директоры урынбаҫары Артур Иҙелбаевты, шулай уҡ үҙәк етәксеһе Руслан Юнисовты һәм "Проект офисы" ойошмаһы етәксеһе Илнур Ҡыуатовты ҡулға алды. Киң мәғлүмәт саралары хәбәр итеүенсә, улар ҙы айырыуса ҙур күләмдә мутлашыуҙа һәм "Туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ" милли проектын ғәмәлгә ашырыу барышында Башҡортостанда туризмды үҫтереүгә бүленгән миллионлаған һум аҡса туҙҙырыуҙа ғәйепләйҙәр.

✓ **Июлдән Өфөлә коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү уртаса 13 процентҡа артты. Ресурстар менән тәьмин итеүсе һәм хеҙмәтләндереүсе ойошмаларға ярҙам итеү маҡсатында бындай ҡарарҙы федераль власть 2023 йылда уҡ ҡабул итте.** Һәр төбәк өсөн үҫенең максималь ҡиммәтләнеү кимәле билдәләнгән, Башҡортостан өсөн ул 16,7 процент тәшкил итә. Башҡортостан өсөн һыу менән тәьмин итеү - 13,7 процентҡа, һыуҙы ағыҙыу - 14,1 процентҡа, йылылыҡ менән тәьмин итеү - 16,1 процентҡа, электр менән тәьмин итеү - 12,6 процентҡа, газ - 10,3 процентҡа, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар сығарыу 11,8 процентҡа артты. Социаль льготаларға хоҡуҡлы граждандар торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә сығымдарҙың бер өлөшөн компенсациялай ала. Улар - күп балалы ғаиләләр, хәрби хәрәкәттәр ветерандары, инвалидтар һәм инвалид балалары булған ғаиләләр, шулай уҡ радиация йәки техноген һәләкәттәрҙән зыян күреүселәр. Бындай компенсация ғаиләләге килемдең 13-20 проценты торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн киткән осраҡта рәсмиләштерелергә мөмкин.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ҠАЙҘА УҠЫРҒА БАРАЛАР?



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика колледждарында ҡабул итеү кампанияһы барышы хаҡында һөйләне.**

Уның һүҙҙәренсә, бөгөнгә 52 меңдән ашыу ғариза тапшырылған. Ошо күрһәткес буйынса Башҡортостан илдә Мәскәү, Санкт-Петербург, Краснодар крайы, Мәскәү өлкәһе һәм башҡа төбәктәр менән бер рәттән лидерҙар иҫәбенә инде. Был һан артыр тип көтөлә, сөнки документтар ҡабул итеү 15 августҡа тиклем бара. "Республикала колледждар менән ҡыҙыҡһыныусылар күбәйә, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Был иһә талап ителгән һөнәр алыу, яҡшы эш табыу мөмкинлеге. Йәштәрҙең теләге урта һөнәри белем биреү системаһының мөмкинлектәренә тап килһен өсөн күп көс һалабыҙ. Быйыл бюджет урындарын 2 меңгә арттырҙыҡ. Хәҙер 24299 урын иҫәпләнә, күпселеге - көндөҙгө бүлектә".

Радий Хәбиров шулай уҡ "Йәштәр һәм балалар" милли проектының "Профессионалитет" федераль проекты хаҡында телгә алды, уның сиктәрендә 2026 йылда республикала 27 урта һөнәри белем биреү кластеры булдырыла. Уларҙың һаны буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә беренсе урынды биләй.

"Колледждарҙы үҙ көсөбөҙ менән дә яңыртабыҙ. Уҡыу корпустарын һәм ятаҡтарҙы ремонтлау өсөн йыл һайын бюджетҡа 500 миллион һум аҡса һалабыҙ. Тағы бер тапҡыр ҡабатлайым: эшсе һөнәрҙәр һайлаған, производствола, ауыл хужалығында эшләргә теләге булған йәштәр заманса шарттарҙа йәшәргә һәм уҡырға тейеш", - тип яҙа ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, хәҙер мәктәп тамамлаусылар документтарын Дәүләт хеҙмәттәре порталында "Юғары уҡыу йортона онлайн уҡырға инеү" сервисы ярҙамында тапшырырға мөмкин.

Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.

# ЙӨРӘКТЕ ҺАҠЛАҒЫҘ!

**Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереү буйынса совет ултырышында "Кардиологик ярҙамды үҫтереү - беҙҙең өҫтөнлөк" тип белдерҙе.**

Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын диагностикалау һәм дауалау көн тәртибенең төп мәсьәләләре булды. Республика етәксеһе патологияларҙан үлем осраҡтарының кәмеү динамикаһын билдәләне: "Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары үлемдең төп сәбәбе булып ҡала, әммә һуңғы 10 йылда беҙ уны 22 процентҡа кәметә алдыҡ. Шуға күрә кардиологик һәм кардиохирургик ярҙамды үҫтереү төп өҫтөнлөк булып тора, - тине Радий Хәбиров. - Биш йыл эсендә "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектының "Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән көрәш" федераль проекты сиктәрендә кардиология хеҙмәтенең матди-техник базаһын нығыттыҡ. Заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған 18 ҡан тамырҙары үҙәге селтәрен булдырҙыҡ, барлыҡ райондарҙа һәм ҡалаларҙа юғары технологиялы ярҙам күрһәтеүҙе тәьмин иттек. Бынан тыш, төбәктә 2 меңдән ашыу ФАП-ты йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртеү һәм дауалау системаһына берләштерҙек. Хәҙер фельдшерҙар пациенттарҙың кардиограммаларын дистанцион рәүештә Йөрәк-ҡан тамырҙары хәүефенә идара итеү үҙәгенә тапшыра һәм телемедицина консультациялары аша тиҙ арала халыҡҡа тейешле ярҙам күрһәтә ала".

Башҡортостан Башлығы шулай уҡ "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" яңы милли проект сиктәрендә төп бурыстарҙы билдәләне, уның төп маҡсаты - 2030 йылға ғүмер оҙайлығын 78 йәшкә тиклем арттырыу. "Беҙ ҡан тамырҙары үҙәктәрен һәм кардиология бүлексәләрен яңыртыуҙы, һаулыҡ һаҡлауҙың кадрҙар составын нығытыуҙы дауам итербеҙ, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Республика кардиология үҙәгенең яңы хирургия корпусы асылғандан алып ике ай самаһы ваҡыт үтте, ул тулы ҡеүәткә эшләй. Элек алдынғы федераль үҙәктәрҙә генә башҡарылған операцияларҙың алты төрө индерелгән. Йөрәккә һәм ҡан тамырҙарына - 3,5 меңдән ашыу, асыҡ йөрәккә 450-нән күберәк операция яһалған. Йыл аҙағына тиклем 7 мең пациент юғары технологиялы ярҙам алырға тейеш. Көнүҙәк бурыстар иҫәбендә - хирургик дауалауҙы үҫтереү, шул иҫәптән яңы операциялар эшләү юлы менән тармаҡты цифрлаштырыу һәм медицина кадрҙарын әҙерләү системаһын камиллаштырыу".

# САБЫЙҘАР ҮЛЕМЕ КӘМЕЙ

**Ағымдағы йылдың тәүге 6 айында төбәктә балалар һаулығын һаҡлау өлкәһендә өмөтлө һөҙөмтәләр теркәлгән: сабыйҙар үлеме - 14,5 процентҡа, балалар үлеме 16,5 процентҡа кәмегән. Республикала ваҡытынан алда тыуған сабыйҙар араһында иҫән ҡалыу күрһәткесе әлеге ваҡытта 95 процент тәшкил итә.**

Бындай һөҙөмтәләргә нисек өлгәшелгән: ваҡытынан алда тыуған балаларҙы мониторинглау системаһы индерелгән - әлеге ваҡытта тән ауырлыҡ түбән йәки ауыр патологиялы 1645 сабый иҫәптә тора; Республика балалар клиник дауаханаһында 3 меңдән ашыу сабый тикшерелгән, 50-һе дауаханаға оҙатылған, 114-е "Салют" үҙәгендә реабилитация үткән; Телемедицина үҙәге аша дистанцион консультациялар әүҙем үҫешә.

Перинаталь хәлдәр, тыумыштан килгән аномалиялар һәм тын алыу ағзалары ауырыуҙары сабыйҙар үлеменең төп сәбәптәре булып тора. Балалар араһындағы үлем осраҡтарына төрлө йәрәхәттәр, тышҡы тәьҫирҙәр, нервылар системаһы ауырыуҙары һәм онкология сәбәпсе. Тышҡы сәбәптәрҙән үлемдәрҙең иң ҙур өлөшө 15-17 йәшкә тура килә.

Республика Хөкүмәте ҡушыуы буйынса Һаулыҡ һаҡлау министрлығы һәм Хеҙмәт министрлығы юғары социаль хәүефле ғаиләләр менән эште әүҙемләштерә. Планлаштырылған эштәргә адреслы медицина-социаль патронажы, йәрәхәтләнеүҙе, ағыуланыуҙы, ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү, юғары хәүефле йөклөләрҙе перинаталь үҙәктәргә оҙатыу, неонатологтарҙың, акушер-гинекологтарҙың һәм анестезиолог-реаниматологтарҙың квалификацияһын күтәреү индерелгән.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостан дәүләт аграр университетының Еләк яланындағы Уҡыу-фәнни үҙәгендә үткән республика "Баҫыу көнө-2025" ғилми-ғәмәли семинарында ҡатнашты. Төбәк етәксеһе уңыш йыйыу кампанияһына старт бирҙе һәм аграр сәнәғәт комплексы хеҙмәтсәндәренә Башҡортостандың дәүләт наградаларын тапшырҙы. "Республика хөрмәтле аграрийҙарыбыҙға терәк булды, буласаҡ та, шул иҫәптән ауыл хужалығын индустриалләштереү йәһәтенән дә. Был көндәрҙә 4190 комбайн баҫыуға сыға, үткән йыл менән сағыштырғанда, 80-гә күберәк. Университет ректоры Илдар Исмәғил улы Ғәбитовҡа рәхмәт. Быйыл вуз "Приоритет- 2030" стратегик академик лидерлыҡ программаһына инде. Был - артабанғы үҫеш өсөн яҡшы стимул", - тине Радий Хәбиров.

✓Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында республика Башлығы Радий Хәбиров "Башҡортостан Геройҙары" төбәк программаһының Остаздар көнө эшендә ҡатнашты. Остаздар араһында - республика Хөкүмәте ағзалары, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары, муниципалитет башлыҡтары, предприятиелар директорҙары. Осрашыуҙа ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт итеп, Радий Хәбиров, төбәк етәкселегенең бурысы - "Башҡортостан Геройҙары" программаһы сиктәрендә уҡытыуҙы мөмкин тиклем һөҙөмтәле итеү, тип билдәләне.

✓Башҡортостандың Конституция советы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев Ҡырым референдумында күҙәтеүсе булғайны. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында Ҡырымдың Рәсәйгә ҡушылыуына 10 йыл тулыу уңайынан Хәйҙәр Вәлиевты Ҡырым Республикаһының юбилей миҙалы менән бүләкләне. Бүләкләү тантанаһы Ҡырым Республикаһы дәүләт советы рәйесе ҡушыуы буйынса уҙҙы. "Ошо награданы алыуыма бик шатмын. Ысынлап та, 10 йыл элек Рәсәй Федерацияһынан күҙәтеүселәр составында референдумда ҡатнаштым. Ул саҡта Радий Фәрит улы менән Симферополдә булдыҡ, коллегаларыбыҙға ярҙам иттек", - тине Хәйҙәр Вәлиев.

✓Башҡортостан уҡсылары Екатеринбургта "Халыҡтар дуҫлығы кубогы" халыҡ-ара турнирында миҙалдар яуланы. Был хаҡта республиканың Һыбай килеш һәм традицион уҡтан атыу федерацияһы хәбәр итә. Ярышта туғыҙ илдән йыйылған 25 уҡсы ҡатнашты. Рәсәй, Беларусь, Пакистан, Үзбәкстан, Көньяҡ Африка, Төркиә, Гвинея, Иордания һәм Йемен һыбайлылары шәхси беренселек өсөн көс һынашты. Өфөнән Рушан Хәсәнов "Рейд 2-3-3" маршрутында еңеүсе булды, Әбйәлил районынан Нуриман Хәйруллин "Рейд 2-3-4" маршрутында икенсе урынды алды. Шулай уҡ Рушан Хәсәнов ике маршрут йомғаҡтары буйынса абсолют зачетта пъедесталдың икенсе баҫҡысына күтәрелде.

БОРСОУЛЫ ХӘЛ

# ҠАҘЫЛМА БАЙЛЫҠ СЫҒАРАҺЫҢМЫ?

## Артыңдан йыйыштырып кит!



(Башы 1-се биттә).

Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм "Роснедр" етәксеһе Олег Казанов ҡатнашлығында ведомство-ара комиссияның сираттағы ултырышы уҙғарылды. Сарала "Роснедр" вәкилдәре, хоҡуҡ һаҡлау органдары, министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәре, Урал арьяғы райондары башлыҡтары, шулай уҡ ҡаҙылма сығарыусы компаниялар директорҙары ҡатнашты.

- Минераль-сеймал ресурстар табыу - беҙҙең иҡтисадтың мөһим йүнәлеше. Бөгөн беҙҙә 642 федераль лицензия эшләй. Файҙалы ҡаҙылмалар төрлөлөгө буйынса республика Волга буйы федераль округында беренсе урында. Был тиклем ҙур күләмдәге лицензиялар контроль талап итә. Шуға ла ведомство-ара комиссия төҙөү ҡарары ҡабул ителде: башҡарма һәм муниципаль власть органдары, күҙәтеү органдары, хоҡуҡ һаҡлау органдары, ғалимдар, йәмәғәтселәр берләште. Бергәләп иң ҡатмарлы райондарҙа тәртип урынлаштыра алдыҡ. Лицензия шарттары менән экология ҡануниәтен ҡаты күҙәтеү аҫтында тотабыҙ. Шул уҡ ваҡытта беҙ сикләүҙәр һәм тыйыуҙар юлы менән генә барырға теләмәйбеҙ. Ер аҫты байлыҡтарын эшкәртергә кәрәк, әммә беҙ иҡтисади маҡсат һәм экология араһында балансты тәьмин итергә бурыслыбыҙ. Бизнес һәм урындағы халыҡ мәнфәғәттәрен ҡапма-ҡаршы ҡуймаҫ өсөн, потенциаль хәүефте иҫәпкә алып, лицензия участкаларын алдан яраштырыу процедураһын әҙерләргә кәрәк, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров.

Тағы ла бер мөһим мәсьәлә - эшкәртелгән участкаларҙы рекультивациялау. Төбәк етәксеһе был йәһәттән компанияларҙың йөкләмәләрен нығытыу кәрәклеген билдәләне.

- Рекультивация үткәрергә йыйынмаған ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусылар лицензия ваҡыты тамамланғансы аңлы рәүештә банкротлыҡҡа төшә, мөлкәтен ҡайтанан рәсмиләштерә һәм, асылда, юҡҡа сыға. Ә соҡолған ерҙәр рекультивация буйынса ҡиммәтле эштәр башҡарыуға аҡсалары булмаған халыҡҡа һәм муниципалитеттарға ҡала, - тип аңлатты Радий Хәбиров.

Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов һәм Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу өлкәһендәге ҡануниәтте камиллаштырыу йәһәтенән тәҡдимдәр индерҙе. Һүҙ, атап әйткәндә, тармаҡ компанияларын тикшереүгә ғәмәлдәге мораторийҙы бөтөрөү, хоҡуҡ боҙоуҙар өсөн штраф санкцияларын арттырыу һәм ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусыларҙың енәйәт яуаплылығын киңәйтеү хаҡында бара. Бынан тыш, инициативалар иҫәбендә ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусылар үҙ йөкләмәләрен үтәмәгән осраҡта аҡсаһын файҙаланырға мөмкин булған Рекультивация фонды булдырыу тураһындағы тәҡдим дә яңғыраны.

Олег Казанов ведомство кимәлендә анализланасаҡ тәҡдимдәрҙең көнүҙәк булыуын билдәләне. Шул уҡ ваҡытта "Роснедр" етәксеһе файҙалы ҡаҙылмалар сығарыуға лицензиялар биреү процедураһында республиканың әүҙем ҡатнашыуы кәрәклеген билдәләне.

- Беҙгә мөрәжәғәт иткәндә күпселек осраҡта төбәктең позицияһы - айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләре, мәҙәни объекттар булдырыу буйынса пландарҙың булыуы, шулай уҡ халыҡтың һаулығына хәүеф янауы иҫәпкә алына. Был осраҡта лицензия бирелмәй йәки ҡаты сикләүҙәр менән бирелә. Әйҙәгеҙ, ошо механизмдарҙы киңерәк ҡулланайыҡ, - тине Олег Казанов һәм ҡағиҙә боҙоуҙар асыҡланһа, ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса федераль агентлыҡ лицензияны туҡтатыу процедураһын башлай ала, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды. Муниципалитеттар ҙа үҙ сиратында был процесты башлай ала икәне билдәләнде.

Әйткәндәй, "Роснедр" етәксеһе Учалы районында Муртыҡты алтын мәғдәне яҡтылығын эшкәртеүсе предприятиела булды, унда производствоны ойоштороу һәм уның экологик яҡтан таҙа булыуын баһаланы. Бынан тыш, Олег Казанов һәм ведомство-ара комиссия ағзалары "Альтинвест" һәм "Иремәлбашресурс" компаниялары участкаларында була, унда улар алтын сығарыу буйынса эштәр тәртип боҙоуҙар менән алып барыла икәнен үҙ күҙҙәре менән күрәләр. "Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу рациональ булһын өсөн республика күп эшләй, халыҡ фекеренә иғтибар бүлә. Республика етәкселегенең квалификациялы эше башҡарма власть, контроль-күҙәтеү органдары мөмкинлектәрен берләштерә һәм был үҙ һөҙөмтәһен бирә. 5-6 йыл элек булған хәлдәр яҡшыра. Ведомство-ара комиссия - төрлө власть органдарының көсөн берләштерергә мөмкинлек биргән һөҙөмтәле инструмент", - тип иҫәпләй Олег Казанов һәм ул ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу мәсьәләләренә системалы ҡарашы өсөн Башҡортостан етәкселегенә рәхмәт әйтте. "Беҙҙә контроль-күҙәтеү функциялары юҡ, әммә ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу хоҡуғын ваҡытынан алда туҡтатыу йәки лицензия бирмәү мөмкинлеге бар", - тине "Роснедр" етәксеһе.

Журналистар менән әңгәмәлә Башҡортостан Башлығы, алтын сығарыу республика халҡын борсоған мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды.

- Тап ошо тема кешеләрҙә, бигерәк тә Башҡортостандың көньяҡ районларында, иң ҡаты ҡаршылыҡ тыуҙыра, сөнки контролдән тыш табыш алыу миҫалдары күп булды. Ведомство-ара комиссия эшмәкәрлеге арҡаһында беҙ был өлкәлә тәртип урынлаштырабыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Ултырыш йомғаҡтары буйынса беҙ Олег Владимировичҡа тикшерелгән бөтә мәсьәләләр буйынса дөйөмләштерелгән ҡараш тәҡдим итәсәкбеҙ. Артабан да бергә эшләйәсәкбеҙ.

Рәсәй Президенты 2021 йылдағы Мөрәжәғәтнамәһендә тирә-яҡ мөхитте һаҡлау өлкәһендә ҡаты саралар күрергә саҡырған ошондай һүҙҙәр әйтте: "Тәбиғәт иҫәбенә табыш алғанһың икән - үҙеңдең артыңдан йыйыштырып кит". Был саҡырыуҙы ҡаҙылма байлыҡтар менән эш итеүселәр һәр саҡ иҫтә тоторға тейеш тә инде.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛИН.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

## "БАШҠОРТ БАЛЫ" - ТИК БАШҠОРТОСТАНДА



**Намыҫһыҙ етештереүселәрҙең киң билдәле бренд исемен урлап, аҡса эшләүе йыш осраған күренеш хәҙер.**

Мәскәү, Санкт-Петербург йә Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында ғына түгел, хатта үҙебеҙҙең республика төбәктәрендә лә, Өфөләге йәрминкәләрҙә лә, "Башҡорт балы" ярлығы ҡуйып, бөтөнләй икенсе сифатлы, икенсе төбәк балы менән һатыу итеүселәр бихисап. 28 июлдән үҙ көсөнә ингән законға ярашлы, бынан ары "тауарҙың килеп сығыу урыны атамаһы", "географик күрһәтмә", шулай уҡ оҡшаш исемдәрҙе ҡулланған өсөн яуаплылыҡ индерелә. Шулай итеп, етештереүселәр билдәле төбәкҡә бәйле атамаларҙы ҡулланыу хоҡуғын иҫбатларға бурыслы буласаҡ. Мәҫәлән, Ленинград өлкәһендә "Башҡорт балы" , Силәбелә "Вологда майы" исеме аҫтында продукция етештереү тыйыла. Яңы закон намыҫлы етештереүселәрҙе яҡларға һәм ялған продукцияны бөтөрөүгә булышлыҡ итергә тейеш.

## БЕЛЕП ҠУЛЛАНҺЫНДАР!

**Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһында тауарҙар һәм хеҙмәттәр атамаларында башҡорт телендәге һүҙҙәрҙе ҡулланыуға арналған эшлекле осрашыу үтте.**

"Тауарҙар һәм хеҙмәттәр атамаларында башҡорт һүҙҙәрен ҡулланыу уларҙы киң танытырға, мәҙәни мирасты һаҡларға булышлыҡ итә. Әммә аңлашылмаусылыҡтар булмаһын өсөн лексиканы дөрөҫ ҡулланыу мөһим", - тип белдерҙе Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы рәйесе Данияр Абдрахманов. "Тауарҙар һәм хеҙмәттәр атамаларында башҡорт лексикаһын ҡулланыуға ихтирам һәм иғтибар менән ҡарау мөһим", - тип билдәләне Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма директоры Гөлназ Йосопова. Кәңәшмәлә Башҡортостан Йәмәғәт палатаһы республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға "Башҡортостан Республикаһының милли мирасы дәүләт реестры тураһында"ғы законға аңлатма биреүҙе һорап мөрәжәғәт итә, ул аңлатмалар артабан власть органдарына һәм эре етештереүселәргә йүнәлтелә, БР Йәмәғәт палатаһының мәғлүмәт ресурстарында урынлаштырыла, тип хәл ителде.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда 754 меңдән ашыу кеше льготалы дарыуҙар менән тәьмин ителә. Дарыуҙар менән тәьмин итеү мәсьәләһе республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллиндың шәхси контролендә тотола. Уның һүҙҙәренсә, быйыл июлдең һуңғы аҙнаһында дарыуханалар 52,5 меңдән ашыу рецепты хеҙмәтләндергән, дөйөм суммаһы 278,4 миллион һумлыҡ 106,9 мең дарыу бирелгән.

✓Башҡортостандан танылған слаломсы Алһыу Минәзева Мәскәүҙә Көслөләр кубогында алтын миҙал яуланы. Был хаҡта республиканың Спорт министрлығынан хәбәр иттеләр. Мәскәү өлкәһендә 24 йәшкә тиклем ишкәкле слалом буйынса Рәсәй беренселеге бара. Алһыу Минәзева С-1Ж класында беренсе урынды алды. Бынан алдараҡ Башҡортостан спортсыһы Алһыу Минәзеваның бишенсе тапҡыр Рәсәй чемпионы исеменә лайыҡ булыуы тураһында ла хәбәр ителгәйне.

✓Мутлашыусылар Иглин, Ҡырмыҫҡалы һәм Саҡмағош райондары хакимиәттәре башлыҡтары исеменән ялған аккаунттар булдырған һәм ватсапҡа ялған хәбәрҙәр ебәрә башлаған. Был хаҡта муниципалитет етәкселәре социаль селтәрҙәрҙә хәбәр итә. "Бишенсе көн инде миңә кешеләр мутлашыусылар менән яҙышҡандан һуң ошондай скриншоттар ебәрә. Уяу булығыҙ! Мутлашыусылар менән аралашмағыҙ", - тип билдәләй Иглин районы хакимиәте етәксеһе Гүзәл Насирова. Саҡмағош районы башлығы Реканс Ямалеев, Ҡырмыҫҡалы районы башлығы Әлфир Сабиров та сит номерҙарҙан шылтыратыуҙарға һәм хәбәрҙәргә ышанмаҫҡа, шәхси һәм йәшерен мәғлүмәт менән бүлешмәҫкә саҡыра.

✓Августан "Башҡортостан Республикаһы" нәшриәт йортон Зөлфиә Рәхмәтуллина етәкләй. Зөлфиә Рәхмәтуллина - БСТ телеканалы журналисы, Башҡортостан Башлығы Хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте һәм эске сәйәсәт идаралығы хеҙмәткәре. Агентлыҡҡа билдәле булыуынса, дәүләт киң мәғлүмәт сараларын берләштергән нәшриәт йортоноң элекке генераль директоры Рәсүл Сәфәрғәлиев директор урынбаҫары вазифаһында ҡала.

✓Башҡортостанда атайҙарҙы VI "Атай ҡаһарманлығы" республика конкурсында ҡатнашырға саҡыралар. Башҡортостан Йәмәғәт палатаһы Советы ултырышында конкурсҡа ғаризалар ҡабул итеү ваҡытын 2025 йылдың 20 августына тиклем оҙайтыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Әлегә ваҡытта конкурс комиссияһына 170 ғариза килгән. Бүләкләү тантанаһы ағымдағы йылдың октябрендә була. Конкурс тураһында положениела конкурс ғаризаларын баһалауҙың 3 критерийы билдәләнгән: конкурста ҡатнашыусының балалар тәрбиәләүгә; йәмәғәт, ирекмәнлек эшмәкәрлегенә; ғаилә ҡиммәттәрен үҫтереүгә индергән өлөшө.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## БИКТИМЕРОВ СӘЛМӘН ҒӘЛИӘХМӘТ УЛЫ

С.Ғ. Биктимеров - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир, өлкән сержант. 112-се Башҡорт кавалерия (16-сы гвардия Чернигов) дивизияһының 60-сы гвардия кавалерия полкы ҡылыссылар эскадроны отделениеһы командиры. Советтар Союзы Геройы.

Ул 1913 йылдың 14 августа Ырымбур губернаһы 2-се Кинйәабыҙ ауылында тыуған. Милләте - башҡорт. Ҡыҙыл Армияға Көйөргәҙе районы хәрби комиссариаты тарафынан 1941 йылдың декабрендә саҡырыла. 1942 йылда 112-се Башҡорт кавдивизияһы составында фронтҡа китә. Ул Таһир Күсимов полкында Брянск фронтында, Сталинград янында, Донбаста дошман тылы буйлап рейдта, Днепр өсөн алыштарҙа ҡатнаша. 1943 йылдың 18 сентябрендә гвардия өлкән сержанты Биктимеров, дошмандың көслө пулемёт һәм артиллерия утына ҡарамаҫтан, Березна һәм Бегач ауылдарына (Украина, Чернигов өлкәһе) беренсе булып бәреп инә.

1943 йылдың 28 сентябрендә Чернигов өлкәһенең Неданчичи ауылы янында Башҡорт атлы дивизияһының отделение командиры Сәлмән Биктимеров дошмандың ут өйөрмәһе аҫтында яугирҙары менән беренсе булып Днепрҙы кисә. Немецтар, йылға аша сығыусы яугирҙарҙы күреп, ут аса. Совет яугирҙары үҙҙәре әҙерләгән һалда йылғаның уң ярына яҡынлаша. Күп тә үтмәй, беҙҙең яугирҙар уң ярҙағы дошман позицияһына һөжүм итә. Һуғышсылар, бер туҡтауһыҙ атыша барып, бер ауылға яҡынлаша. Отделение командиры биш ҡыҙылармеецы менән немец блиндажына бәреп инә. Ундағы немец һалдаттары, траншеялағы дошман пулемётсыһы юҡ ителә. Ауылға машинала килеп ингән ике немец полковнигы әсиргә алына. Немецтар ике танк менән контрһөжүмгә күсә, әммә ҡыйыу башҡорт яугиры Биктимеров уларҙы яндырғыс шыйыҡсалы шешә менән яндыра. Контратака тонсоға. Днепрҙы аша сығып, плацдарм яулап алыу өсөн барған ҡаты алышта Сәлмән Биктимеров үҙенең төркөмө менән 121 немецты юҡ итә, ике танкыны һәм 10 пулемётты юҡҡа сығара.

СССР Юғары Советы Президиумының 1944 йылдың 15 ғинуарындағы Указына ярашлы, гвардия өлкән сержанты Сәлмән Биктимеров Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була һәм уға Ленин ордены һәм "Алтын Йондоҙ" миҙалы тапшырыла. Ул 1944 йылдың апрелендә ауыр яралана, тыуған ауылына ҡайта, колхозда эшләй. 1971 йылдың 24 февралендә вафат була, тыуған ауылында ерләнә.

Көйөргәҙе районы үҙәге Ермолаево ауылындағы Батырҙар скверында батырға һәйкәл ҡуйылған. Батырҙың исеме алтын хәрефтәр менән Башҡортостан Республикаһының Милли музейы бинаһында, шулай уҡ 112-се кавалерия дивизияһы музейы бинаһына ҡуйылған таҡтаташҡа уйылып яҙылған.

БЫЛ АЙҘА...

# ЙӘЙҘЕҢ ҺУҢҒЫ БАЛҠЫШЫ

**Йәйҙең - һуңғы, йылдың һигеҙенсе айы тупһаға баҫты. Ике миҙгел араһын тоташтырып тороусы осор булараҡ, ул йәйҙең дә, көҙҙөң дә сифаттарын үҙендә туплаған бер мәл. Шуның өсөн дә был ай хаҡында фенологтар уның төрлө һүрәттәрҙә булыуын, ҡояшлы, эҫе көндәре менән дә, һалҡынса болотло торошо, ямғырҙары менән дә һәр кем күңеленә хуш килеүен билдәләй.**



Быйылғы түшәлеп ятҡан еләклектәр бушап ҡалһа ла, урағайҙың үҙенең һый-ниғмәттәре етерлек: алланып-балланып алмалары бешә, груша, слива һәм башҡа емештәр тамам өлгөрөп етә, йәшелсә уңышы ҡыуандыра. Болон үләне лә йәй башындағыса һөтлөкәс түгел инде: бесән дә бешә, тығыҙланып, сырмалып ята - үткер генә салғы менән ҡырып сапҡы килә. Баҫыу диңгеҙендә тулҡынланып, иген өлгөрә. ***Әйткәндәй, 25 июлдә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө районында үткән "Баҫыу көнө - 2025" республика семинарында ҡатнашты һәм уңыш йыйыу кампанияһына старт бирҙе.*** "Ошо көндәрҙә,- тине ул,- баҫыуҙарға 4 190, йәғни былтырғыға ҡарағанда 80 берәмеккә күберәк комбайн сығасаҡ. Былтыр өс миллион тоннаға яҡын иген йыйып алған булһаҡ, быйыл да, әгәр һауа торошо ҡамасауламаһа, яҡшы уңышҡа өмөт итәбеҙ". Шулай булһын, хәйерле сәғәттә, игенселәр!

***Ә һауа торошо тигәндән, Гисметео фаразлауынса, урағайҙың тәүге яртыһы йылы һәм аяҙ торасаҡ, тик һирәкләп кенә ҡыҫҡа ваҡытлы ямғырҙар яуыуы ихтимал.*** Һауа температураһы 23-28 градус йылы, ә төндә +15-тән +18-гә тиклем булыр, тип күҙаллана. Уның ҡарауы, айҙың икенсе өлөшө көндәр бер аҙ һалҡынайта төшә (+20,+22, төндә +14,+15), һирәкләп ямғыр һибәләр, ти синоптиктар. Икенсе бер метеосығанаҡтар быйылғы урағай 150 йыл эсендәге иң сәйере һәм ғәҙәттәгенән эҫе булыр, көслө тропик ямғырҙар маҙалар, тип тә ҡурҡыта. Ләкин беҙ күптән инде синоптиктар фекеренә ирония менән ҡарарға өйрәндек һәм үҙебеҙҙекен эшләй бирәбеҙ: юлдағылар - юлда, ялдағылар - ялда булһын, ә эш менән мәшғүлдәргә шулай уҡ уңайлы һауа шарттары теләйек: ғәмәлдәрегеҙ - йүн, юлдарығыҙ уң булһын!

***Ай календарына күҙ һалғанда, иң тәүҙә бөгөн бөтәбеҙ өсөн дә ҡәҙерле, кәрәкле тыныслыҡ өсөн хәрәкәт беренсе планға сығыуын күрәбеҙ: 6 август "Донъя табиптары тыныслыҡ өсөн" көнө билдәләнәсәк.*** Был дата Хиросима көнөнә бағышланып, 1980 йыл совет һәм америка ғалимдары башланғысы менән үткәрелә башлай. Эйе, тыныслыҡ табиптар өсөн айырым мәғәнәгә эйә, сөнки улар кеше тормошо һағында тороусылар булараҡ, был йәһәттән иңдәренә икеләтә яуаплылыҡ йөкмәгән. Һуғыш аяуһыҙ рәүештә кеше ғүмерҙәрен өҙөүсе булһа, табип әҙәм балаларына ғүмер бүләк итеүсе, дауалап аяҡҡа баҫтырыусы, яҡты донъяға ҡайтарыусы. Бөгөн бик күп хәрби табиптар Махсус хәрби операцияла ҡатнашып, яугирҙарыбыҙ ғүмерҙәрен ҡурсалай.

Уларҙың легендар хеҙмәт фиҙаҡәрлеген раҫлаусы бынан теүәл ике йыл элек булған хәл иҫкә төшә. Луганск республикаһы госпиталенә яралы яугирҙы килтерәләр. Операция өҫтәленә уны бронежилетҡа төрөп һалалар, ә өҫтәл тирәләй шулай уҡ аҡ халатлы түгел, бронежилет һәм каска кейгән хирургтар яралыға ҡатмарлы һәм хәүефле операция башларға әҙерләнә. Госпиталдең операция барасаҡ ҡатында урынлашҡан ауырыуҙар һәм медицина хеҙмәткәрҙәре хәүефһеҙ урынға күсерелә. Яралы егеттең янбашына 2А42 пушкаһының 30 мм-лы снаряды эләгеп, бына-бына шартлауы ихтимал шарттарҙа үҙ ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, хәрби врачтар сәғәттән ашыу ҙур һаҡлыҡ менән шартлатҡысты яранан алып, саперҙарға тапшыра. Бына шундай хәлдәр ҙә осрап тора хәрби табиптарҙың һуғыш яланы шарттарындағы көндәлек ҡаһарман хеҙмәттәрендә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓25 июлдә Рәсәй Банкының Директорҙар советы ҡарары менән төп ставка 18 процентҡа тиклем кәметелде. Аналитиктар фаразлағанса, ул бер юлы 2 процент пунктына түбәнәйҙе. Ҡайһы бер финанс аналитиктары фекеренсә, иҫәп ставкаһы һиҙелерлек кәмегән осраҡта халыҡтың вкладтарға ҡыҙыҡһыныуы һүрелеүе, улар фонд баҙарына иғтибарын йүнәлтеүе мөмкин. Ә 12-13 проценттан юғарыраҡ ставкалар һаҡланһа, вкладтар популяр булып ҡала, тип иҫәпләй башҡалар.

✓Башҡортостан спортсылары Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә үткән Тхэквондо буйынса донъя чемпионаты һәм беренселегендә 12 миҙалға лайыҡ булды, йәғни Башҡортостан спортсылары 10 алтын, бер көмөш һәм бер бронза миҙал яуланы. Рәсәй йыйылма командаһы дөйөм команда зачетында еңеүсе булды. Рената Мөхәмәҙиева һәм Айнур Фәхретдинов икешәр алтын миҙал алды. Әнүәр Фәхретдинов ике алтын һәм бер көмөш миҙал яуланы. Ксения Антышева илебеҙҙең йыйылма командаһына дүрт алтын һәм бер бронза миҙал килтерҙе.

✓Мәләүез ҡалаһының Дан бульварын төҙөкләндерәләр. Эштәр "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль проекты сиктәрендә алып барыла. Әлеге ваҡытта бульварҙа 400 метр оҙонлоҡтағы плитәләр яңыртып түшәлгән, яҡтылыҡ үткәрелгән, эскәмйәләр, урналар ҡуйылған, тирә-яҡ йәшелләндерелгән, ял итеү урындары барлыҡҡа килгән. Артабан ял зонаһында "Дан бульвары" тигән арт-обьект урынлаштырыу, күп йыллыҡ сәскәләр, декоратив ҡыуаҡтар ултыртыу күҙаллана. Билдәләнгән эштәр августа тамамланырға тейеш. Объектҡа федераль, республика, урындағы бюджеттан 20 миллион һум аҡса бүленгән.

✓Башҡортостанда "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы дауам итә. Республика Хөкүмәтендә үткән оператив кәңәшмәлә һаулыҡ һаҡлау министрының беренсе урынбаҫары Роберт Иштуҡов белдереүенсә, "Сәләмәтлек поездары" 21 апрелдән 214 ауылда булған, табиптар 117 меңдән ашыу кешене ҡараған, 26 меңгә яҡын рентген тикшереүе үткәрелгән. Белгестәр онкология, диабет, туберкулез һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары буйынса шик тыуҙырған 2900 ауырыуҙы асыҡлаған. Уларға өҫтәмә тикшерелеүгә йүнәлтмә бирелгән.

✓Белорет районының Бриштамаҡ ауылында бер төркөм үҫмерҙәр дары яндырып ҡараған. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итеүенсә, малайҙарҙың кейемдәренә ут ҡапҡан. Уларҙың биттәре, береһенең күҙҙәре бешкән. Әле үҫмерҙәр Республика тән бешеү үҙәгендә дауалана. Табиптар уларҙың хәлен уртаса ауырлыҡта тип баһалай.

✓ ***БМО-ның Генераль Ассамблеяһы тарафынан ҡабул ителгән Декларацияла әйтелеүенсә, төп халыҡтар башҡа халыҡтар менән тигеҙ һәм улар үҙ хоҡуҡтарын бойомға ашырыуҙа ниндәй ҙә булһа дискриминациянан азат булырға тейеш.***

***Ай ахырында ошо изге һөнәр эйәләренә бағышланған тағы бер дата - Хәрби табиптар көнө (28) айҡанлы беҙҙән дә бер рәхмәт һүҙе барып етһен ине батыр йөрәкле врачтарыбыҙға.*** Шулар иҫәбендә Башҡортостан табиптары ла фиҙаҡәр хеҙмәттәре менән айырылып тора Махсус хәрби операция госпиталдәрендә. 2023 йылғы бер сығанаҡта МХО-ла ҡатнашып, ил алдындағы изге бурыстарын үтәп ҡайтҡан 300-ҙән ашыу медицина хеҙмәткәре хаҡында мәғлүмәт бар, унда Өфөнән Арыҫлан Мырҙағолов, Тимур Шәрипов, Сергей Рындин, Руслан Гәрәев, Зөлфиә Әхмәрова, Артур Мөғәллимов, ирле-ҡатынлы Ирина менән Владимир Новгородцевтар хаҡында телгә алына. Ләкин бөгөн хәрби шарттарҙа яугирҙар ғүмерҙәрен ҡотҡарыуҙы дауам итеүсе табиптарҙың аныҡ ҡына һанын әйтеүе лә ҡыйын, тиҙәр, сөнки килешеү нигеҙендә эшләүселәр менән бергә бик күп ирекмәндәр ҙә шунда киткән.

***Был айҙағы икенсе бер мөһим иҫтәлекле дата - Халыҡ-ара төп халыҡтар көнө (9).*** Бөгөнгө көндә Ер йөҙөндә 90 илдә 370-тән алып, 500 миллионға тиклем төп халыҡтар вәкилдәре йәшәй, был планета халҡының 5-6 процентын тәшкил итә. Улар ата-бабаларынан күсә килгән уникаль мәҙәниәт һәм йолалар хазинаһын һаҡлай. Рәсәйҙә аҙ һанлы төп халыҡтарҙың Берҙәм исемлеге бар, унда Төньяҡта, Себерҙә, Алыҫ Көнсығышта йәшәүсе 47 төр этнос инә. Бынан тыш, ***Рәсәйҙең төп халыҡтары иҫәбендә кеше һаны 1 миллиондан күберәк булған рустар, украиндар, башҡорттар, татарҙар, сыуаштар, чечендар һәм башҡа халыҡтар йәшәй.*** Төп халыҡтарҙың хоҡуҡтары Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль Ассамблеяһы тарафынан 2007 йылдың 13 сентябрендә ҡабул ителгән Декларацияһы нигеҙендә нығытылған. Унда әйтелеүенсә, төп халыҡтар башҡа халыҡтар менән тигеҙ һәм улар үҙ хоҡуҡтарын бойомға ашырыуҙа ниндәй ҙә булһа дискриминациянан азат булырға тейеш. Заманында төп халыҡтарҙы колонизациялау сәйәсәте арҡаһында уларҙың ерҙәрен, биләмәләрен, ресурстарын тартып алыу кеүек тарихи ғәҙелһеҙлеккә дусар ителеүен, уларҙың тәрбиәгә, уҡыуға, белем алыуға хоҡуҡтарын танып, төп халыҡтар үҙҙәренең тарихын, телен, ауыҙ-тел ижадын, философияһын, яҙмаһын һәм әҙәбиәтен тергеҙергә, файҙаланырға, үҫтерергә һәм киләсәк быуындарға тапшыра килергә хоҡуҡлы, шул уҡ ваҡытта улар общиналарына, биләмәләренә һәм кешеләргә үҙҙәре атама һәм исемдәр бирергә һәм һаҡларға хоҡуҡлы булыуы танылa. Декларацияның 14-се, 16-сы статьяларында әйтелеүенсә, төп халыҡтар үҙ туған телдәрендә белем алыуҙы тәьмин итеүсе мәғариф һәм уҡыу йорттары системаһын булдырырға һәм контролдә тоторға, үҙ телдәрендә матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары булдырырға хоҡуҡлы.

***Был айҙа тағы ла ошондай иҫтәлекле көндәр билдәләнә:*** 1914-1918 йылғы Беренсе донъя һуғышында һәләк булған яугирҙарҙы иҫкә алыу; РФ Ҡораллы көстәренең тыл көндәре **(1)**, Десантсылар **(2)**, Тимер юлсылар **(3)** көндәре; Халыҡ-ара светофор көнө **(5)**; Хиросима көнө. Бөтөн донъя ядро ҡоралын тыйыу өсөн ғәмәлдәр, "Донъя табиптары - тыныслыҡ өсөн" халыҡ-ара көндәр **(6)**; Рәсәй федераль һаҡ хеҙмәтенең махсус элемтә һәм мәғлүмәт **(7)**; Альпинистар, Бесәйҙәр **(8)** көндәре; Физкультурниктар, Донъяның төп халыҡтары Халыҡ-ара көндәре **(9)**; БР Умартасылары, Төҙөүсе көндәре **(10)**; Башҡортостан Архив хеҙмәте булдырылған **(11)**, Халыҡ-ара йәштәр, РФ Хәрби-Һауа көстәре **(12)** көндәре; Һулаҡайҙар **(13)**, Археологтар **(15)**, Бөтөн донъя берәҙәк хайуандар **(16)** көндәре; РФ Һауа Флоты (Авиация) көнө **(17)**; Географ **(18)**, Бөтөн донъя гуманитар ярҙам **(19)**, РФ Дәүләт флагы **(22)** көндәре; Рәсәй киноһы **(27)**, Хәрби табиптар **(28)**, Ветеринарҙар, Шахтерҙар **(31)** көндәре.

***Урағайҙа тыуғандар:***

**15 -** совет хәрби начальнигы, генерал-майор, легендар 112-се (16-сы гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, Рәсәй Федерацияһы Геройы **Миңлеғәли Шайморатовтың тыуған көнө** (15 (27) август, 1899-1943).

**19 -** тарих фәндәре кандидаты, 1990-2013 йылдарҙа БР Фәндәр академияһының "Ғилем" ғилми нәшриәте директоры, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт һәм Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре **Фаил Тикеевҡа - 75 йәш** (1950).

**20 -** көрәш буйынса РСФСР-ҙың спорт мастеры, Башҡортостандың атҡаҙанған физик культура хеҙмәткәре, милли көрәш буйынса Башҡортостандың - ете тапҡыр һәм Рәсәйҙең өс тапҡыр чемпионы **Вәкил Ильясовҡа - 65 йәш** (1960).

**31 -** журналист, "Өфө" нәшриәт йортоноң "Вечерняя Уфа" гәзите баш мөхәррире урынбаҫары, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре **Илүзә Капкаеваға - 70 йәш** (1955).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ЗЕЛЕНСКИЙ РЕЖИМЫ ӨСӨН...

## украиндар үлергә теләмәй

**Үткән аҙна ахырында Рәсәй тарафтарына яуҙырылыусы украин дрондарының 36-һы Брянск, 21-е Смоленск, 10-ауһы Калуга, 9-ары Волгоград менән Ростов, 2-шәре Воронеж менән Курск өлкәләрендә, 4-һе Ҡырым Республикаһында - барлығы 99 аппарат бәреп төшөрөлдө, тип хәбәр иткәйне 27 июлдә РФ Оборона министрлығы.**

Рәсәй армияһы ла яуапһыҙ тороп ҡалғаны юҡ, ти Украиналағы Рәсәй яҡлы подполье координаторы Сергей Лебедев. Уның әйтеүенсә, шул уҡ көндәрҙә (26-27 июль) Украинала утыҙҙан ашыу сәпкә алынған объект юҡ ителгән. Сумы, Чернигов, Харьков өлкәләре ҡалаларында, Харьковта ВСУ-ның (Украина ҡоралл көстәре) төп терәк базалары, тәьминәт объекттары, ҡорал складтары шартлатылған, Одесса портын тағы ла ут ялмаған. Рәсәй армияһы эҙмә-эҙлекле рәүештә дошман көстәрен хәлһеҙләндереү стратегияһын дауам итә. Өҫтәүенә, "Известия" гәзите сайты хәбәрсеһе яҙыуынса, бөгөн киң таралған дезертирлыҡ күренештәре арҡаһында Украина армияһына былай ҙа тарҡалыу янай, ябай украиндар Зеленский режимы өсөн үлергә теләмәй. Дөрөҫөн генә әйткәндә, украин армияһының 70-75 проценты ирекһеҙләп, мобилизацияға мәжбүри рәүештә йәлеп ителгән кешеләрҙән тора. 2025 йылдың июленә ҡарата бында фронттан ҡасыусылар һаны 231 мең кеше иҫәпләнә, ләкин Верховный рада депутаты Артем Дмитрук әйтеүенсә, рәсми булмаған мәғлүмәттәр ике тапҡырға күберәктер ҙә әле. Социаль селтәрҙәр йәш кенә үсмерҙәрҙе урамдан тотоп алып, машинаға тейәп алып китеүҙәрен күҙәткән видеоконтенттар менән тулы. Күптәр сит илдәргә ҡаса, Рәсәйгә сығырға теләүселәр ҙә бар, ләкин был осраҡта пленға бирелергә кәрәк. Ә был хәүефле: арттан үҙенекеләр атып үлтерергә мөмкин.

***Ғөмүмән, Украинала бөгөн тыныс граждандар араһында ла тыныслыҡ юҡ, Зеленский режимы менән ризаһыҙлыҡ тауыштары көсәйә генә бара.*** Иң тәүҙә уның илдә коррупцияға ҡаршы структураларҙың бойондороҡһоҙлоғон юҡҡа сығарыусы законды халыҡ араһында көслө ҡаршылыҡтар килтереп тыуҙырғайны. Киевта башланған ошондай протест акцияһына хатта баш ҡала мэры Виталий Кличко ла ҡушылды. Шул арҡала хәҙер урындағы властар уға ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатып, ҡулға алырға йыйына. Раданың элекке депутаты Владимир Олейник әйтеүенсә, был Зеленскийҙың күптәнге хыялы ине, тик быны эшләргә властарға Кличконың Германия ҡурсалауында булыуы ҡамасаулап килде: күрәһең, ағалы-энеле Кличколарҙың бөтөн төп активтары ошо илдә булыуы сәбәпселер. Унан һуң, Кличконың Германия гражданлығы булыуы ла бик ихтимал, ти Олейник. Ошо йылдың октябрь айына билдәләнгән президент һәм парламент һайлауҙарын иҫтә тотоп, Киев мэры Кличконың президентлыҡҡа дәғүә итеү ихтималлығы ла Зеленскийҙы сығырынан сығара, күрәһең.

Был араларҙа Зеленскийҙы ауыр хәлгә ҡуйыусы тағы бер хәбәр килеп етте: уның коррупцияға ҡағылышлы популяр булмаған закондарынан хәүефләнгән Евросоюз Киевҡа ярҙамға тип инселәнгән сумманан 1,5 млрд евроны бирмәй тотоп ҡалырға уйланы. Һөҙөмтәлә Владимир Зеленский әлеге коррупцияға ҡаршы ведомстволарҙың бойондороҡһоҙлоғон кире ҡайтарыу тураһында парламентҡа ашығыс рәүештә яңы закон проекты индерергә мәжбүр булды. Бының менән ул Киевтағы урам протестарын баҫа алһа ла, Евросоюз үҙ ҡарарында ҡалды, тип яҙа мәғлүмәт сығанаҡтары. Бынан тыш, Киев режимын тәнҡитләүсе украин активистары Зеленский хөкүмәтенең ғәмәлдәге хәрби хәлдәр шарттарына һылтанып, үҙ вәкәләттәрен киңәйтә барыуы менән дә ризаһыҙлыҡ белдерә килә.

***Үткән аҙнаның тағы бер һабағы - 24 июлдә Starlink спутник селтәре эшендә булып алған элемтә тотҡарлығы.*** SpaceX компанияһының глобаль яһалма спутниктар системаһы элемтә насар ҡабул ителгән урындарҙа юғары тиҙлектәге киң һыҙатлы спутник интернетына тоташыу мөмкинлеге бирә. Спутник элемтә терминалдарының һүнеүе америка терминалдарын әүҙем файҙаланыусы Украина армияһы өсөн фалиж һуғыуға тиң булды, тип яҙҙы мәғлүмәт саралары. Сөнки ВСУ күп йәһәттән хәрби операциялар башҡарыуҙа һәм айырыуса дрондар менән файҙаланғанда тиҫтәләрсә меңәрләгән Starlink терминалдарына бәйле. Элемтәнең ике сәғәт ярым буйы тотҡарланып тороуы ВСУ подразделениеларын ҡайһы бер операцияларҙы кисектереп торорға мәжбүр итте, ә һалдаттарға хәрби бурыстарын видеотрансляцияһыҙ башҡарырға тура килде. Был Украина ғәскәрҙәренең интернет элемтәһенә башкөлләй бәйле булыуын һәм уның ярҙамыһыҙ сүп тә ҡыбырҙата алмауҙарын күрһәтте. Дөрөҫ, беҙҙең яугирҙар ҙа ҡайһы бер осраҡтарҙа, шулай уҡ айырым подразделениелар Starlink терминалдары менән файҙаланһа ла, күренеүенсә, уға баш-аяҡ бәйле түгел, сөнки, беренсенән, был "дошман ҡоралы" һәм ул беҙҙә киң таралмаған; өҫтәүенә, уны үҙәкләштереү һәм әүҙем файҙаланыу билдәле бер хәүеф менән бәйле (терминалдар аша мәғлүмәттәрҙең ҡайҙа китеүе сер түгел). Тимәк, Рәсәйҙең үҙенә автономлы үҙ интернетын булдырыу кәрәк. Бәхеткә күрә, бындай проект бар, ул - "Бюро 1440" компанияһының "Рассвет" системаһы. Шуныһы ҡыуаныслы: уны файҙаланыуға әҙерләү эштәре быйыл уҡ башланасаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Өфөлә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балаларына "Минең әсәйем Герой!" тигән иҫтәлекле значоктар тапшырыла. Был хаҡта баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев ҡала хакимиәтенең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе. Тиҙҙән әсәләре алғы һыҙыҡта хеҙмәт иткән балалар значоктар менән бүләкләнә, тип билдәләне ул. "МХО биләмәһендә яугирҙар менән "Минең атайым Герой!" тигән иҫтәлекле билдәләр тураһында фекер алыштыҡ. Был награданы тапшырыуҙы дауам итәбеҙ. Әсәләре фронтта хәрби бурысын үтәгән балаларға ла значоктар кәрәк тигән тәҡдим булды. Ике аҙнанан ошо награданы әҙерләй башларға тейешбеҙ. 1 сентябрҙә тантаналы шарттарҙа тапшырабыҙ", - тип билдәләне Ратмир Мәүлиев.

✓ Өфөлә "Ҡашҡаҙан" паркында "Рәхәттә" халыҡ-ара һаулыҡ һәм туризм фестивале булып үтте. Унда мунса мәҙәниәтен яратыусылар эшлекле, фәнни, спорт, мәҙәни, күңел асыу программаларында теләп ҡатнашты. Сара сиктәрендә коллектив сабыныу буйынса Рәсәй чемпионаты финалы ойошторолдо. Бының өсөн "Ҡашҡаҙан" күле буйында 40 кешегә иҫәпләнгән һауа тултырылған мунса төҙөлдө. Өфөнән Фәрхәтша Ғүмәров "Рәхәттә" фестивале ҡунаҡтары иғтибарына кейеҙҙән яһалған ғәҙәти булмаған башҡорт мунсаһын тәҡдим итте.

✓ Өфөнән күп балалы әсә "Әсәлек даны" миҙалына лайыҡ булды. Тейешле указға Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған. Наталия Викторовна Шельдяева - Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры, сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяевтың хәләл ефете. Улар биш бала тәрбиәләй. Ғаиләлә үҙ-ара ихтирам, татыулыҡ хөкөм һөрә. "Беҙҙең өсөн ғаилә - бер-беребеҙҙе яратыу, балаларыбыҙ һәм үҙ-ара аңлашып йәшәү", - тине Шельдяевтар бүләкләүҙән һуң.

✓ 1 авгусҡа ҡарай төндә Өфөнөң Шаҡша күперендә хәрәкәт ябыла. Өфөләрҙән һәм баш ҡала ҡунаҡтарынан сәфәрҙәрен алдан планлаштырыуҙарын һорайҙар. Сикләү 31 июлдә төнгө сәғәт 11-ҙән 1 авгусҡа төнгө 3-кә тиклем ғәмәлдә ҡала. Баш ҡала мэрияһы белдереүенсә, был ваҡытта күперҙә ҡорос терәк өлөштәрҙе монтажлау эштәре башҡарыла.

✓ Өфөгә бер нисә поездың тотҡарланыуы тураһында билдәле булды. Волга буйы тимер юлы бер нисә маршрут буйынса тотҡарлыҡтар тураһында хәбәр итә. Ростов өлкәһенең Сальск станцияһында булған хәлгә бәйле Федераль пассажирҙар компанияһының туғыҙ поезы, шул иҫәптән 358-се Имеретин Курорты - Өфө һәм 254-се Новороссийск - Өфө поездары тотҡарлана. Поезд бригадалары хеҙмәткәрҙәре пассажирҙарға һәр яҡлап ярҙам күрһәтә. Алыҫ араға йөрөгән поездар юлда 4 сәғәттән ашыу тотҡарланған осраҡта пассажирҙарҙы ашатыу ҡаралған, тип билдәләнеләр Волга буйы тимер юлында.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Сәскәләрҙе лә һайлап ҡына үҫтерәм. Күп йыллыҡтарға өҫтөнлөк бирәм. Ҡыр сәскәләрен дә яратып үҫтерәм. Яҙҙан тыуған яғымдан алып ҡайтып ултыртҡан миләүшәләр, һары умырзая, хатта бүрекбаштар күңелгә һөйөнөс бүләк итә.*



БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Тәбиғәтте боҙоуға табу

Бер төр табу тәбиғәт, йыһан аһәңдәшлеген боҙмауға, тирә-яҡ мөхиткә зыян ҡылмауға ҡағыла. Самодий мифологияһында Ер-әсә, тәбиғәт ауыртыуҙы тойған тере йән һымаҡ тасуирлана, мәҫәлән, ергә һөңгө, бысаҡ менән сәнсеү, ҡаҙаҡ ҡағыу тыйыла.

Кет мифологияһы буйынса, беренсе бөйөк шаман Дох үҙ арҡадаштары менән күккә сәфәр ҡылғанда, уның ҡатыны тыйыуға буйһонмай, бысраҡ кейем ала һәм һөҙөмтәлә алты йөшендең инәһе уның ғаиләһен уты менән көйҙөрә.

Боронғо Иран ҡомартҡыһы "Авеста"ла "бысраҡ әйберҙе һыуға тыҡҡансы, һыуҙың таҙалығын уйла", тиелә. Урта бронза быуатында хасил Арҡайым торағында һыуҙы бысратыу тыйылған, керле әйбер яҡшылап таҙартҡандан һуң ғына һыуға һалып йыуылған. Арҡайым һәм "Калалар иле" ҡәүеме йәшәгән ерҙәрендә ғаләмдең өлгөһөндә түңәрәктәр, дүрткелдәр яһап, донъя ҡороп, аһәңле йәшәйешкә ынтылған, Ер менән Йыһан бәйләнешен, ярашлығын, килешлеген, тәбиғәт гармонияһын боҙмаған. Затнәҫелдәр, яңы быуындар ҡанбабалар йолаһын, ҡарашын изге һанаған, ҡәҙерләгән һәм үҙҙәренең йәмғиәт королошонда ҡулланған.

Кеше менән тирә-яҡ мөхит донъяһы изге мөнәсәбәткә ҡоролған. Әҙәм балалары тәбиғәт менән килешеп йәшәгән, уның ҡанундарын һаҡлаған. Төҙөү, яһау, булдырыу, ижад итеү тәбиғәтте боҙмаған. Боронғо ышаныу-инаныуҙар, тыйыуҙар шуға инандырған. Арҡайымда тирә-яҡ мөхит менән мөнәсәбәт яҡын туғандарса булған. Меңәр йылдар үткәс тә был ер - тәү асылында. Үҙенә генә хас туғайҙары, ҡалҡыулыҡтары, тупрағы, һыуы, үҫемлектәре, тереклек донъяһы булған ерҙәрҙә арҙар ипле эш итеп кенә, һаҡлыҡ менән генә балсыҡ һәм ағастан үҙҙәренең торағын, "Калалар иле"н төҙөгән. Бының өсөн, әлбиттә, соҡорҙар ҡаҙырға тура килгән. Ҡаҙылған ер, балсыҡ ғәмәлдә төҙәлөшкә киткән тупраҡ миҡдарына тиң булған. Был шуны аңлата: кешеләр күсеп киткән, тораҡ бөткән осраҡта был ер тәбиғи хәленә ҡайтҡан. Тикшерелгән культура ҡатламы хәҙер ҙә таҙалығы менән айырылып тора. Бында бөтә нәмә илаһи йолаға, ғәләм ҡоролошона ярашлы булған. Арҙар үҙҙәренең йолаларын, рухи ҡиммәттәрен изге күреп һаҡлаған һәм бик ентекләп ғәмәлләштергән. Был хәҙерге быуындар өсөн ғәйәт оло аҡыл һәм һабаҡ алырлыҡ илаһи үрнәк.

Уйлаһаң, таң ҡалырлыҡ! Тирә-яҡ мөхиткә шундай аңлы, һаҡсыл мөнәсәбәт әле беҙ ғүмер иткән төйәктә дүрт мең йыл элек булған. Хәҙер иһә кеше үҙен ғаләмдең бер өлөшө икәнен төшөнһә лә, тыйыуҙарҙы һанға һуҡмай, тәбиғәтте үҙ мәнфәғәттәре өсөн генә файҙалана, эшмәкәрлеге тирә-яҡ мөхит ҡанундарын боҙа, тәбиғәтте яһилдарса һәләк итеп, үҙен дә һәләкәткә илтә. Әлеге рухи, әхлаҡи, экологик торғонлоҡ, бәлә-ҡаза нәҡ шул хаҡта һөйләй.

Боронғо риүәйәттәрҙә табу һалынған урындар, йәғни тауҙар, мәмерйәләр, күлдәр тураһында ла һөйләнелә. Грек мифологияһында аркад батшаһы Эпит Посейдондың әҙәмдәргә тыйылған мөҡәддәс урынына инә. Тиҙҙән Эпит һуҡырая һәм үлә.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Баҡса тукландырып ҡына ҡалмай, хеҙмәт мәктәбе лә, күңелгә ял, ҡәнәғәтлек тә бирә, тиһегеҙме?

***Рәйфә ВӘЛИЕВА, Өфө районы Шамонино ауылының Ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе:*** Кейәүгә сығып, үҙ йортобоҙ булғас та баҡса үҫтереү менән шөғөлләнә башланым. Балалар үҫтергәндә, яуаплы вазифаларҙа эшләп йөрөгәндә өлгөрә алмайыраҡ киткән саҡтар ҙа булды...

Хаҡлы ялға сығып, ваҡыт күбәйгәс, әлбиттә, баҡса үҫтереүгә ныҡлап тотондом. 2017 йылда Өфө районы Шамонино ауылына күсеп килдек. Элек йәшәгән Федоровка районы Бала Сытырман ауылында тупраҡ бик уңдырышлы ине. Нимә сәсһәң дә, күңел биреп ҡараһаң, бөтәһе лә ишелеп уңа ине. Ә бына Шамонинола тупраҡ әсе, уның, әлбиттә, ыңғай яғы ла, кире яғы ла бар. Ямғыр яуһа, үтеп керерлек түгел: йәбешеп торған батҡаҡҡа әйләнә; яумаһа инде, тупраҡ таш кеүек ҡата, ярыла башлай. Барыбер ошо ергә риза булып, яраҡлашып, баҡсаны тәрбиәләп үҫтерергә кәрәк. Ауылдағы йәш ғаиләләр ун сутый ерҙәрендә кемеһе еләк-емеш ағастары, кемеһе сәскәләр, ҡайһылары йәшелсә үҫтереп, өй яны участкаларын гөлт иттереп тоталар. Бер күршемдең ишек алды торғаны гөлбаҡсаһы инде, сәскәләр ярата. Ҡайһеһе килгән дә быларға, ризаһыҙлыҡ белдереп:"Ҡыш көнө ошо ҙур ғаиләң менән сәскә ашап ултырырһығыҙ микән..." - тигән . Оло һүҙен йыҡмай, күршем хәҙер бик үҫеп итеп йәшелсә-емеш тә үҫтерергә тотондо.

Шулай, барыбыҙ ҙа ерҙәребеҙҙе буш ятҡырмаҫҡа тырышабыҙ, ни тиһәң дә, баҡсасылыҡ өҫтәмә килем, экологик таҙа аҙыҡ-түлек бит. Шул уҡ ваҡытта баҡсаңа сыҡһаң, көндән-көн ҡояшҡа үрмәләп, һабаҡ биреүсе йәшелсәләр түтәләнә, емештәре төймәләнеп килгән алмағас, ҡарағат, сейә һәм башҡаһына ҡарап, күңел ҡыуана, хәләл көсөңдә үҫеп тырышлыныңдың һөҙөмтәһен күреү ҡәнәғәтлек бирә. Гел генә эш менән дә булышмайһың бит инде бында: рәхәтләнеп ял итергә лә, күләгәлә ултырып тәмләп сәйҙәр эсергә лә, баҡсаң емештәренән ауыҙ итергә, йырлай-йырлай еләк тирергә лә форсат тыуа. Теплицабыҙ бар: ҡыяр, помидор, борсо иртүк яҙҙан шунда йылыға сығарып ултыртабыҙ, ә инде ҡырау, көсле ел-ямғырға сыҙам кишер, сөгөлдөр, һуған, ҡабаҡ, картуф кеүек йәшелсәләрҙе асыҡ һауала үҫтерәбеҙ. Март баштарында һайлап ҡына, бындағы тупраҡта уныш бирерҙәй орлоҡтарҙы ғына һатып алабыҙ һәм сәсә лә башлайбыҙ. Ҡыярыбыҙ, мәҫәлән, күптән өлгөрҙө инде, ашауҙан артып ҡалғанын ҡышҡылыҡҡа тоҙлай башланым.

Хәҙер бит шуныһы рәхәт: социаль селтәрҙәрҙә баҡсасылыҡ, йәшелсә-емеш эшкәртеү буйынса файҙалы кәңәштәр, исулдарҙың ниндәйе генә юҡ, бына тигән килеп сыға! Шулай итеп, йылдың һигеҙ айы йүгермәләп йөрөп, эш менән үтеп тә китә. Был файҙаға ғына, тип уйлайым: олоғайыуҙы ла, ауырыу-сырхауҙарҙы ла онотоп торабыҙ. Халыҡ әйтмешләй, хәрәкәттә - бәрәкәт! Тик бына картуф үҫтереү генә йылдан-йыл ауырлаша бара: әрһеҙ колорадо ҡуңыҙы бөтөн төр ағыу-дарыуҙарға ла хатта әйрәнеп бөттө. Тормош юлдашым йәй буйы ана шул ҡортҡостар менән көрәшә, йәшелсәләрҙе тәрбиәләй, һыу һибә.

Күңел биреп эшләгәнгә күрә, шөкөр, баҡсабыҙ гөрләп үҫә. Әйтеүемсә, ҡышҡылыҡҡа күпләп банкалар ябам. Уныш мул булһа, күңел күтәрелеп китә. Баҡса уңышынан күрше-тирәгә, туғандарға һәм, әлбиттә, балаларға ла өлөш тейә. Айыуса сәскәләремде яратам. Улар менән сөкөрләшеп һөйләшә-һөйләшә, шатланып тәрбиәләйем. Тәбиғәттең был гүзәл мөғжизәләре үҙҙәрен яратҡанды һиҙә: күкрәп сәскәгә күмелә баҡсабыҙ. Фотоға төшөрөп, ҡыҙҙарыма ебәрәм.

Әйткәндәй, былтыр ауылыбыҙ ағинәйҙәре араһында "Кемдең баҡсаһы иң матуры?" тигән онлайн-конкурс иғлан иткәйнек. Был сара беҙҙә уғата дәртләндереп ебәрҙе: кәйефтәребеҙ күтәрелеп, тағы ла тырышыбыраҡ эшләй башланыҡ, йәм өҫтөнә - йәм, сәм өҫтөнә сәм өҫтәлде. Теләгем шул: йәш ғаиләләр ҙә өлкән баҡсасыларҙан ҡалышмай, балаларын хеҙмәткә өйрәтеп, донъяларын гөл баҡсаһы итеп йәшәһендәр ине!

***Гүзәл СИТДИҠОВА, Башҡортостандың халыҡ шағиры:*** Тәүге тапҡыр әсәйемә кишер утаашҡанда биш йәш кенә булғандыр, ахыры. Сүп үләне менән бергә кәрәклеһен дә ҡуша утағанмын икән. Әсәйемдең был эштән тыйып ҡуйғаны хәтеремдә. Шул уҡ йылды бәрәңге ултыртышып та йөрөнөм әле, бәләкәй генә биҙрәгә һалынған орлоҡтарҙы атайым ҡаҙыған соҡорҙарға ташлаған булдым. Маҡталдым. Ҙурая килә бурыс та арта барҙы. Бәрәңге ултыртыу, утау, күмеү, ҡаҙып алыу - ауыл балаһы өсөн ғәйре тәбиғи эштәр, шулай тейеш кеүек ҡабул иттек. Күп итеп ҡыяр, кәбестә ултыртыу, һуғарыуҙы яратҡан был үҫемлектәргә биҙрәбиҙрә һыу ташып һибеү... Ҡыҫҡаһы, ауыр булһа ла, ул ваҡытта былар мотлаҡ үтәлергә тейешле шөғөл итеп ҡаралған. Ҡайҙа ул баш тартыу! Ә тигеҙ итеп күмелгән бәрәңге сәскә ата башлаһа, үҙе бер ләззәт! Дүртенсе класстан бесән дә сабырға өйрәндем әле ул. Ҡыҫҡаһы, бала саҡтан эш белеп, көс түгеп, шунан ҡәнәғәтлек тойғоһо ла алып үҫелгән.

Тормошҡа сыҡҡас, ҡыҙыбыҙ бәләкәй генә сағында әле, Тирлән юлындағы баҡса йәмғиәтенең иң осондағы участканан үҙ иҫәбебеҙҙә кәртәләү шарты менән үңерҙәге сиҙәм ерҙән киҫенте бирҙеләр. Көрәк менән ҡаҙып, ҙур-ҙур таштарынан таҙартып алдыҡ. Ул саҡта матди яғын уйламаныҡ, магазиндарҙа кәштәләр шалтырап тора башлағайны инде. Эш хаҡыбыҙ ҙа ҙур түгел. Үҙебеҙ үҫтергән бәрәңге, емеш-еләк менән шул осорҙо үткәреп ебәрҙек. Эйе, еңел булманы. Машинабыҙ ҙа юҡ ине, автобусҡа эләкмәй ҡалһаң, йыйған уңышыңды ла, балаларыңды ла алмаштилмәш йөкмәп ҡайтаһың. Иҙел ярында ҡояшта ҡыҙынып аунашҡан кешеләргә аптырап ҡарай торғайным - көнө йыл туйҙырған ваҡыт бит, нисек бот күтәреп ятмаҡ кәрәк!

Ә бергә үҫтергән уңыш менән балаларыңды һыйлау ләззәте һуң! Һатып алған һарымһаҡ түгел инде. Тик балалар үҫеп еткәс, оҙаҡ ҡына ваҡыт баҡса эштәренә әйләнеп тә ҡарамаҫ булыныҡ. Мәгәр бала саҡта һалынған орлоҡ бер килеп емешен бирә икән - хәҙер мауығып китеп баҡса үҫтерергә тотондо ла киттеләр. Матди файҙа алыр өсөн түгел, ләззәт өсөн! Һуңғы йылдарға тиклем тиерлек ҡортона дарыу һипмәй генә бәрәңге сәстек.

Пенсияға китер алдынан үҙ йортобоҙҙо һалып сыҡтыҡ. Уныһы үҙе бер сәхифә. Тәүҙә урын таба алмай бер булдыҡ. Урынын тапҡас, һыу баҫты ла, төҙәлөшкә тотона алмай, йәй үтеп китә яҙҙы. Ә ер тапҡас, минең буш ятҡырғы килмәй бит инде, кул ҡысытып тора. Киләштә Яҙыусылар баҡсаһында мәкамыбыҙ бар ине былай, күңелдә баҫырға.

Эшһеҙ ятманым, әлбиттә. Тапалып бөтә, тип, яңы йорт янында хәләлем алты йыл буйы бер ни ҙә ултырттырманы. Нишләп алты йыл уҡ, тиһегеҙме? Һуң, ҙур процент менән ссуда алдыҡ та, теге Райкин әйтмешләй, аҡса еткерә алмай, "раствор бар - кирпич йоҡ, кирпич бар - раствор йоҡ" тигән ише хәлдән килгәненсә күтәрҙек инде. Аллаға шөкөр, ниһайәт, минең дә бүрем олор ваҡыт етте - тотондом етенсе йылына "сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе күтәрергә"...

Емеш-еләк үҫентеләрен Иглин районынан белгән кешенән барып алдыҡ. Рәхмәт төшкөрә, бик һәйбәт сорттар булып сыҡты, һөйөнөп бөтә алмайым. Тәүге йылы ер иркен ине бит әле, тултырып бәрәңге сәстек. Ул ваҡытта биҫтәбеҙҙә бер нисә генә хужа өй бөтөрөп сыҡҡайны. Бер күршебеҙ мыйыҡ аҫтынан ғына көлөп йөрөгәйне, беҙҙең мул уңыш йыйып алғанды күреп, киләһе йылына үҙе лә ултыртҡан. Тәүге йылдары танһыҡлап ниндәй генә бер йыллыҡ сәскә үҫтермәнем! Ҙурая барған урамыбыҙҙағы күршеләр килеп, ҡарап китә ине. Хәҙер, ағас-ҡыуаҡтар ҙурайып киткәс, йәшелсәне, бәрәңгене самалап ҡына сәсәбеҙ. Сәскәләрҙе лә һайлап ҡына үҫтерәм. Күп йыллыҡтарға өҫтөнлөк бирәм. Гортензия, сәскәһе уға оҡшап торған баҡса баланы, бер нисә төр рауза, баҙыян, рудбекия, пион (дөрдөр), топинамбур һәм башҡалар, ҡалғанын һанап тормайым инде. Ҡыр сәскәләрен дә яратып үҫтерәм. Яҙҙан тыуған яғымдан алып ҡайтып ултыртҡан миләүшәләр, һары умырзая, хатта бүрекбаштар күңелгә һөйөнөс бүләк итә, шунан наҙлы елбәгәй, ромашкалар ап-аҡ өйкөмдәр булып ҡалҡып сыға. Ҙур-ҙур түтәлләп ултыртмайым мин уларҙы, унда-бында бәләкәй генә һипкелдәр кеүек сәселеп үҫә. Ҡыҫҡаһы, иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем нимәләрҙер баҡсабыҙҙы йәмләп, нур өҫтәп ултыра. Иң һуңғы булып сәскә атҡан сентябринкалар ҡар яуғансыға тиклем ҡапҡа тышын балҡыта.

Эйе, емеш ағастары ҡыҫырыҡлай башлағас, байтаҡ сәскә ҡыуаҡтарын ҡапҡа тышына сығарып ултырттым. Унда муйыл, мышар, ҡырағай балан үҫә ине инде. Юлға тиклем мул ғына буш урын бар. Күпселек күршеләребеҙ уны машина ҡуйыу өсөн файҙалана. Мәрхүм ут күршебеҙ, оло йәштәге профессор бабай, һинә ихата эсендәге етмәйме ни, ҡайһылай ергә ҡомһоҙһоң, тигәйне. Алты сутый ер күпме ни инде! Әй ултыру бит әле уның эсендә. Ергенәбеҙҙең һәр ус тупрағы ла ҡәҙерле миңә. Көсөң барҙа нисек уны тәрбиәләмәй, буш яткырырға мөмкин! Хатта ҡапҡа тышында ла үткән-һүткәндәргә ҡыуаныс өҫтәп, әллә ҡайҙан балҡып ятһын әйҙә еркәйебеҙ...

✓ *Уау Вәхит атҡа менһә, артҡа ҡарап ултырып сабыр булған. Әммә ат ул ҡайҙа теләһә, шунда боролған. Атын ашарға ебәрер булһа, уны арт аяҡтарынан тышаған. Ат йыраҡ китә алмаған.*



АРҘАҠЛЫЛАРЫБЫҘ

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ РУХИ ШАҺЫ...

## Зәйнулла ишан тураһында бер кәлимә



Суфыйсылыҡ тәриҡәте бөгөнгө Учалы районы Аҙнаш ауылына ҡыуаҡан ырыуы кешеһе Аҙнасура ишан тарафынан Уралтау артынан, Әй буйынан тәүләп килтерелгән кеүек. Тарих ағышынан һәм ваҡиғалар теҙмәһенән Аҙнасура ишандың Вәхит күрәҙәсенән байтаҡҡа оло булыуы төсмөрләнә. Суфыйсылыҡ тәриҡәте традицион Исламдан үҙенең алымдары менән, ҡайһы бер урында йокмәткеһе менән дә айырмалы булған. Барындар тәүҙә уны ҡабул итмәгән. Бигерәк тә Ҡөрьән сүрәләрен уҡығанда ҡапыл тауыш тулҡындарын үҙгәртеп ебәреү, уларҙы йә күтәреп, йә ауазын соҡорҙан сығарған кеүек һәр төрлө хәрәкәттәр яһап башҡары тыңлаусыларҙы аптыратҡан. Мәҫәлән, Уау Вәхит дәрүиш, шул төбәктә йәшәгән халыҡ Күк бүре нәҫеленән булған, тип, уларҙың ҡайһы береһенә бүрегә эйәреп олоуҙы талап иткән. Үҙе лә һәр ваҡыт кистәрен бүре булып олоһа, Урал армыттары араһындағы Уй таштары тауындағы бүреләр Уау Вәхитте берҙәм күтәреп алған. Шуға ла уға "Уау" ҡушаматы тағылған да инде. Ә "диуана" ҡушаматына килгәндә, уның ҡылыҡ-ҡыланыштары ғәҙәти кешенекенә оҡшамаған булған. Әммә үҙе бик зирәк, үткер телле фекер эйәһе булып танылған. Мәҫәлән, ул кеше күрмәгән ерҙә таҡмаҡлап, бик ихласлап, төрлө хәрәкәттәр яһап, үҙ алдына бейегән. Тимәк, унда бейеү һәләте булған. Мейеһендә бейеү хәрәкәттәре яралмаһа, ул бейемәҫ ине. Тик үҙ-үҙенә ниндәй көй әйтте икән? Тыңлап тораһы ине лә бит... Тағы... Уау Вәхит атҡа менһә, артҡа ҡарап ултырып сабыр булған. Әммә ат ул ҡайҙа теләһә, шунда боролған. Атын ашарға ебәрер булһа, уны арт аяҡтарынан тышаған. Ат йыраҡ китә алмаған. Көҙ етеп, бүре көсөктәре үҫеп еткәс, халыҡ һыйыръарын киске үрешкә сығармаған. Сөнки бүре күп булған. Ә Уау Вәхит һыйырҙарының муйынына дегеткә манылған сей сирәмәт ҡайыш тағып сығарған. Һөҙөмтәлә бүреләр, һыйырҙарға йәбешеү түгел, уларға яҡын да килмәгән. Уау Вәхит ағас күнәктәр эшләү оҫтаһы була. Әммә ҡыҙҙарының һыу ташый торған күнәктәрен махсус тишекле итеп эшләй. Һөҙөмтәһе шул: ҡыҙҙары шишмәгә бер барыр урынға өс-дүрт тапҡыр барған. Сөнки ҙур ағас сапсыҡты тултырырға кәрәк булған. Йондоҙ йымылдағанда ташылған һыу шифалы ла, бәрәкәтле лә була, тип иҫәпләгән һәм ҡыҙҙарын һыуға кис, мәҙәк үткәс, йондоҙ ут алғас, ебәргән.

Зәйнулла ишандың атаһы яғынан туған был бабайы уларҙың шәжәрәләрендә юҡ, сөнки унда һәр атанан тик берәр генә бала күрһәтелгән. Һис шикһеҙ, Зәйнулла ишанды бала ваҡытынан уҡ Ер кендеге армыттары аҫтынан сыҡҡан Аҡ Иҙел, Яйыҡ, Әй, Уй, Мейәс йылғаларының һыуы һәм ере гүзәллеге рухи хазинаға ҡойондорған. Ә бабайы Уау Вәхит диндең төбәк өсөн яңы суфыйсылыҡ алымын ҡулланып, үрнәк күрһәткән. Уау Вәхит Зәйнулла тыумаҫ борон уҡ уның иннәһенә: "Килен, ҡорһағыңды һаҡла. Унда ишан булырҙай бала ята", - тип күрәҙәлек әйткән.

Инәһе яғынан бик уҡымышлы, Ислам тәғлимәтенең ҡануниәтен генә түгел, бөтә төрки донъяһының тарихын яҡшы белгән абруйлы, зиһенле, ғилемле һәм үҙ баһаһын белгән, тирә-йүнгә остаз булған Аҙнасура ишандың рухи һыны ла Зәйнулла күңеленә өлгө булып һеңгән була. Нәҡшбәндиә тәриҡәтен мауыгып өйрәнеүгә 1859-1860 йылдарҙа Силәбе ҡалаһы тирәһендәге Сарҙаҡлы ауылы шәйехе Ғәбделхәлим хәҙрәткә мөрит булып барғас һына ныҡлап тотонһа ла, был ғилемдең нигеҙе һәм башы үҙ тыуған ауылы Шәрип (Әүәҙә) һәм саҡырым ярым ерҙә ятҡан Аҙнасура ишандың Аҙнаш ауылына бәйле. Әлбиттә, Зәйнуллаға суфыйсылыҡ тураһындағы төп төшөнсәне атаинәһе, ауыл мөхите тарихы бирә.

Уау Вәхит диуананың ҡәбер ташы Шәрип-Әүәҙ ауылы зыяратында бөгөн дә бар.

Уның ысын иseме Мөхәммәт Вәхит булғанға оҡшай. Сөнки ҡәбер ташында Мөхәммәт тиғән һүҙ ҙә уҡылған кеүек. Яҙыуҙы быуаттар елъямғыры ярайһы уҡ тигеҙләгән. Ул осорҙа ташты тәрән итеп соҡорлоҡ ҡаты тимер ҙә һирәк булғандыр.

Аҙнаш ауылында ҙур мәсет булмаған. Уй йылғаһында өс тирмән торған. Икеһенең исеме билдәле: Хәлил тирмәне, Йосоп тирмәне. АҠШ тип йөрөтөлгән Аҙнаш, Ҡужай, Шәрип ауылы бер-береһенән ярты саҡырымда ята. Урталағы Барын-Табын ауылы Ҡужай мәсетенә һәм мәҙрәсәһенә лә йөрөгәндәр, тигән хәтирә ҡалған. Күрәһең, Аҙнасура ишан шул ике мәҙрәсәлә уҡытҡан. Шул мәҙрәсәләрҙең дауамы булып Ҡужай ете йыллыҡ мәктәбе 1960 йылдарҙан һуң да эшләне. Илебеҙгә ул мәктәп фән, хужалыҡ, мәғариф, сәнғәт өлкәһендә эшләүсе бик күп белгестәрҙе бирҙе. Улар араһында Мәскәүҙә СССР юстиция министрлығы хеҙмәткәре булып эшләгән Бижан Абдуллин, математика фәндәре докторы Хәйрулла Мортазин, федераль кимәлдә эшләүсе нефть сәнәғәте эшмәкәре Жәүҙәт Ғәлимов, яҙыусы Рәүеф Насиров һ.б. бар.

Зәйнулла Рәсүлевтың тормош көтөүҙәге ҡеүәте үҙе инанған тәғлимәтенә сикһеҙ ышаныуында. Уның зиһенендә, аңында. Кешеләрҙе ышандыра һәм үҙ артынан эйәртә алыуы тәбиғи булмышында ла. Ул рухи әҫке көстө тәбиғәттән алған. Төп Урал армытының итәгендә тыуғанғамылыр, ул тауҙар менән аралашмайынса, улар менән һөйләшмәйенсә, йылдың ике миҙгелен үткәрмәгән.

Көнсығыш табындар башҡа ырыу-ҡәбиләләр менән үҙ мәнфәғәттәрен яҡлап һәм һаҡлап бик күп яуҙар үткәргән. Ошо яуҙарҙан һуң ырыу етәкселәре, дошманға ҡалмаһын, тип, Урал тауҙары араһындағы ҡая мәмерйәләргә иҫке китаптар, бик күп уҡ, һөңгө баштары, эйәр, әпсен-төпсөндәре, ҡылыс, ҡалҡан-хәнйәрҙәр йәшергән. Әммә ул ерҙәрҙе һаналы ғына кешеләр белгән. Сер беләктән ҡан ағыҙып, Ҡөрьән тотоп ант итеү менән ныҡытылған. Сер эйәләре бөрәм-берәм баҡыйлыҡҡа китеп бөткәс, серҙе белеүсе һуңғы кеше, ант ғөрәфөн үтәтеп, бер улына ғына серҙе сисергә тейеш булған. Мәмерйә ауыҙын таш емереп бикләгәндәр. Инсандар мәмерйә ауыҙының теүәллеген күҙәтеп торған. Зәйнуллаға ошо сер мираҫ булып ҡалған да инде. Әммә ул сер Зәйнулла Рәсүлев 1917 йылда баҡыйлыҡҡа киткәс тә сиселмәгән була әле. Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә ул ғәмәлдең дауамын моронлата биреп ҡуя. Әммә төп нәсхәһен яҙмай. Сөнки яҙырға ярамай. Хатта бер-ике кешенең ҡайһы ауылдыҡы икәнен дә яҙа. Әммә ул тарихты белмәгән кешеләр был серҙең әтнәкәһенә әле лә төшөнмәйҙәр. Ул серҙең ҡоршауын, күрәһең, бер ҡасан да сисергә ярамайҙыр. Ул сер тураһында һөйләшкән өс бабай, күрәһең, мине һәм иптәшемде бала тип иҫәпләгәндәрҙер. Беҙҙең, 12 йәшлек малайҙарҙың, һаҡҡолаҡ булыуыбыҙҙы уйламағандарҙыр. Тик беҙ икебеҙ ҙә уны ишеттек, нәмә тураһында һүҙ алып барғандарын да белдек. Тик сер урынын аңлай алмаҕыҡ. Беҙгә ул сер булып ҡалды. Һәм әле лә сер.

Зәйнулла ишан Өстамаҡ-Троицкиҙан йыл һайын бер тапҡыр булһа ла тыуған яҡтарына ҡайтып булған. Ҡайтҡас, атын менеп, берәүҙе лә үҙе менән алмай, тауҙар араһына киткән. Хатта бер-ике төн үткәреп ҡайтыр булған. Уның был холҡона халыҡ бер ни тиклем аптыраһа ла, аҙаҡ йыл һайын ҡабатланған хәлгә иғтибар итеүҙән туктаған.

Ана шулай, Зәйнулла ишан тормошонда серҙәр ифрат та күп була. Уның артынан эйәреп, аңдып барып та ҡарағандар. Үҙенә генә билдәле ерҙәрҙә ул бик оҙаҡ итеп үҙ тәриҡәтен үтәгән. Һәм шуның менән үҙен ваҡытлыса был фани донъянан йөнәш донъяға күсергән, тиҙәр. Суфыйсылыҡтың төп билдәһе, алымы - ул күңелендә фани тормош тутынан таҙартыу, үҙенә Аллаһ исемен генә түгел, уның рухын, бәлки, үҙен дә һеңдереү, һәр саҡ Аллаһ менән бергә булырға тырышыу, тип аңлау яҙыҡ булмаҫ.

Аят сүрәләрен матур буяуҙар менән ҙур туҙға, эшкәртелгән бәрәс, быҙау йә ҡолонсаҡ тиреһенә, әгәр табылһа, ҡалын ҡағыҙға яҙып, стеналарға элеп ҡуйыу ҙа суфыйсылыҡ тәриҡәте билдәһе. Кешеләрҙең холҡо тәбиғәттә төрлө-төрлө һыҙатҡа эйә. Һәм суфыйсылыҡ тәриҡәтенә килгән ҡайһы кеше үҙ-үҙен дәрүишлек көнитмешенә бағышлай. Үҙендә сабырлыҡ, түҙемлек, йыуашлыҡ тәрбиәләй. Әммә уларҙа уйлаған уйҙы кисекмәҫтән тормошҡа ашырыу һыҙаты көслө. Уның булмышына хатта дыуамаллыҡ та хас. Зәйнулла кеүек ҙур зиһенлеләр, әлбиттә, дыуамал аҙымдарын йүгәнләй белгән. Шуның менән бергә уларға кеше ҡылыҡтарын, уйламай эшләгән эштәрен кисерә белеү хас. Төрлө кешелә суфыйсылыҡ тәриҡәте төрлө сифат тәрбиәләгән. Мәҫәлән, ҡәтғилеҡ холҡо. Ҡәтғи инаныу. Ул үҙ инаныуынан бер ваҡытта ла сигенмәгән. Эске ҡәтғилек Ҡырҡа маҡсат та тыуҙырған. Ҡырҡа маҡсат ҡыҙыулыҡҡа килтерһә лә инанған тәриҡәте сабырлыҡҡа, түҙемлеккә өндәгәс, ул уға буйһонорға мәжбүр.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

**(Дауамы. Башы 29-сы һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттарҙың көнкүрешендә йәнлек аулауҙан ҡала әһәмиәтле урында ҡошсолоҡ торған. Ҡош аулауға хоҡуҡ шулай уҡ XVII-XVIII быуаттарҙың документтарында телгә алына. Әгәр йәнлектәргә һунар сауҙа-тауар мөнәсәбәттәре маҡсатында алып барылһа, ҡош аулау нигеҙҙә шәхси ҡулланыуҙы күҙаллаған. Башҡорттар ҡорға, һуйырға, селгә, ағунаға, ҡыр ҡаҙҙарына һәм аҡҡоштарға һунар иткән. Ҡыр ҡаҙҙарының һәм ҡыр өйрәктәренең, төрлө сарлаҡтарҙың йомортҡаларын йыйыуҙы мин күпләп Урал аръяғы күлдәрендә генә күҙәтә алдым. Башҡортостандың башҡа райондарында был эш менән бары тик балалар ғына шөғөлләнә ине.

Урманлы райондарҙа һуйырға һунар үҙенең ябайлығы менән айырылып тора. Көҙгөһөн, имән сәтләүеге ҡойолғас, имән урмандарында һуйырҙар бер урынға күпләп йыйыла. Тәүге ҡар төшөү менән башҡорттар төнөн һуйырҙарҙың йоҡлаған сағында уларҙы аулар ине. Һунарсыларҙың береһе оҙон күсәк менән ҡоралланa, икенсеһе, ҡайын йәки ылыҫлы сыраларҙан сыраҡ яндырып, уларҙы тотоп йөрөй. Сыраҡ яҡтыһында ҡар өҫтөндә йоҡлап ятыусы һуйырҙар әллә ҡайҙан күренә. Улар ҡаты йоҡлай һәм был һунарсыға уларға яҡын килеп, күсәк менән һуғып алыу мөмкинлеген бирә. Ҡайһы бер урындарҙа уларҙы оҙон һайғауҙарға беркетелгән һөҙгөс ярҙамында аулайҙар. Һуйырҙарға һунар ҡыҫҡа ғына ваҡыт барһа ла, табыш күп була: ике һунарсы төн эсендә тиҫтәләгән һуйыр алып ҡайтҡан. Шундай уҡ ысул менән ҡорға һунар иткәндәр.

Ҡоштарҙы тоҙаҡ менән аулау киң тарала. Улар түбәндәгесә эшләнә: һалабаш ебенә 2-3 метр оҙонлоҡта бер уҡ алыҫлыҡта 9-ҙан 16-ға тиклем ат ялынан үрелгән элмәк яһала. Ындый элмәктәр ярҙамында ҡорҙарҙы уларҙың яҙғы уйыны ваҡытында тоталар. Уйын урынында төрлө урындарҙа ағас араларында һәм ергә ҡағылған ҡаҙыҡтар араһында ерҙән 20 сантиметр бейеклектә урынлаштырыла һәм уйын ваҡытында уларға бик күп ҡош эләгә.

Башҡорттар, ҡорҙарҙан тыш, шундай уҡ элмәктәр менән ҡамыш араһында өйрәктәрҙе, ҡоштар йөрөгән һуҡмаҡтарға, имән урмандарына ҡуйып, һуйырҙарҙы аулағандар. Әгәр тотолған ҡош һатыуға тәғәйенләнгән икән, элмәк ҡыҫылып, ҡоштоң башы һығылған; әгәр шәхсән ҡулланыу өсөн тотолһа, һунарсы килгәнгә тиклем уның тере ҡалыуы шарт булған. Сөнки башҡорттарға һуйылмаған ҡош итен ҡулланыу харам һаналған. Шуға күрә, ҡош элмәккә эләккәс, унан сығам тип муйыны һығылмаһын өсөн, элмәктә махсус төйөндәр эшләнгән һәм улар билдәле бер ҡулса барлыҡҡа килтергән, ҡоштоң муйынын ныҡ һыҡмаған.

Һоро ағуна һәм ҡор аулау өсөн япма йәки әүен ҡулланғандар. Баҫыуҙарҙа, эҫкерттәр һәм иген һоҫландары эргәһендә конус формаһында нигеҙен өҫкә ҡаратып ҡаҙыҡтар ултырталар. Япма әүендән бары тик икенсеһенең уртаһына ҡаҙыҡ ҡағылыу менән генә айырылған. Тоҙаҡ өҫтөнә ҡуналҡа эшләнелә, уға иген башаҡтары йәки балан емештәре ҡуйыла. Ҡайны берҙә аҙыҡтарҙы әүендең уртаһындағы ҡаҙыҡҡа бәйләп ҡуялар.

**(Дауамы бар).**

✓ *Фольклорҙа йәшеренгән нәмәләр күп бит ул. Унда әллә нисәмә ҡатлам ята, уларҙың бөтәһе лә асыҡланмаған, өйрәнелмәгән, яҡтыртылмаған. Миҫалға, Самрау батшаны ғына алайыҡ. Ябай ғына итеп ҡарағанда, ул ҡоштар батшаһы.*

# ҺОМАЙ НИСЕК AҠҠОШҠA ӘЙЛӘНГӘН?

## Ошондай мәлдәрҙе һүрәткә төшөргө килә.

**Нәркәс - ҡулына әле генә икенсе дипломын алған бик тә һәләтле, егәрле йәш рәсссамдарыбыҙҙың береһе. Ул М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының роман-герман факультетын тамамлағандан һуң, Мәскәү Юғары иҡтисад мәктәбе университетының дизайн курсында иллюстрациялар эшләү буйынса оҫталығын камиллаштыра. Башҡортостан Яҙыусылар союзының яңыртылған бинаһына ингән кеше уның иң элек художестволы биҙәлешенә иғтибар итә. Бина эсендәге һүрәттәр, яҙыуҙар - бөтәһе лә камил, бөтәһе лә үҙ урынында. Бөтәһе лә ижади һәм заманса. Был эштәрҙең авторы, йән өрөүсеһе йәш рәссам Нәркәс МЫРҘАҒОЛОВАның әле М. Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейында бай күргәҙмәһе эшләй. Ошо уңайҙан йәш рәссамға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**Яҙыусылар бинаһының биҙәлеше заман рухын сағылдыра һәм, бер үк ваҡытта, унда тарих биттәре лә асыла. Ошондай ижади мөнәсәбәт һөкланыу уятмай ҡалмай. Һынлы сәнғәт менән күптән мауығаһыңмы?**

- Башҡортостан Яҙыусылар союзы бинаһында тарихты ла, бөгөнгөнө лә берҙәй сағыу итеп бирергә тырыштыҡ. Йылы фекерҙәр ишетеү мине ҡыуандыра. Сәсәндәр, яҙыусылар һүрәттәре, текстар биҙәлеше - барыһы ла минең эштәр. Әлбиттә, рухи донъябыҙҙа ҙур урын тотҡан "Урал батыр" тематикаһы ла ситтә ҡалманы.

Фольклорға һөйөү миңә ғаиләнән һалынған. Һынлы сәнғәткә килгәндә, мин бәләкәйҙән рәсем төшөрөү менән мауыҡтым. Тик быны ул саҡта, нисектер, етди шөғөл тип күрмәнем шикелле. Мин 91-се лингвистик гимназияла уҡыным, сит телдәрҙе өйрәндем. Юғары класҡа барып еткәс, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына күстем. Сит телдәрҙе өйрәнергә яратһам да, башҡорт фольклоры, әҙәбиәте менән ныҡ ҡыҙыҡһына инем. Башҡорт мәҙәниәтен нығыраҡ белгем, өйрәнгем, шуның эсендә йәшәгем килде - гимназия-интернатҡа күсеүемдең сәбәбен шуның менән аңлатам. Унда башҡорт телен, әҙәбиәтен дә тәрәндән өйрәнеү мөмкинлеге бар, ә миңә тап шул етмәй ине.

Шулай уҡ һынлы сәнғәттән дә айырылманым. Буш ваҡыт булдымы, уны һүрәт төшөрөүгә арнаным. Роман-герман факультетында уҡыған саҡта тап һынлы сәнғәт мине нығыраҡ тартҡанын аңланым. Шуға ла университетты тамамлау менән Мәскәү Юғары иҡтисад мәктәбе университетына уҡырға индем. Минең бәхеттән, дизайн факультетының иллюстрация курсына махсус мәктәптә уҡымағандарҙы ла ҡабул итәләр ине. Мин бит һынлы сәнғәт мәктәбендә уҡымағайным. Шулай ҙа был белемгә эйә инем, сөнки профессионал рәссамға дәрескә йөрөгәйнем. Дизайн курсында уҡыуы миңә ҡыҙыҡ булды, композиция, иллюстрация, иғтибарҙы йәлеп итеү төрҙәре, төҫтәр теорияһы - бөтәһен дә ятап уҡыным. Төп фән өсәү булды, тип әйтә алам - артпрактика, ижади проектлау һәм дизайн технологияһы. Артпрактикала төрлө материалдарҙан һүрәт төшөрҙөк, монотепия, диатипия, пастель техникаларын өйрәндек. Дизайн технологияһында планшетта графика, фотошоп һымаҡ программаларҙа мөхәррирләү эшенә өйрәндек. Һәр семестрҙа үҙебеҙҙең ижади проектты тәҡдим итә инек. Йәнәһе, беҙ заказ биреүсенең заказын үтәйбеҙ. Заказды нулдән башлайһың, һыҙмалар яһайһың, артабан иллюстрацияларға күсәһең. Йәғни, ниндәй ҙә булһа брендҡа иллюстрациялар эшләргә тейешбеҙ. Брендты һайлап алаһың йәки брендты үҙең уйлап сығараһың. Мин, мәҫәлән, үҙем уйлап сығарған бренд буйынса эшләнем - өҫтәл уйыны өсөн иллюстрациялар тәҡдим иттем. Эскиздар яһаным, персонаждарҙы үҙем уйлап сығарҙым. Һәр семестр аҙағында ошондай проекттарыбыҙҙы комиссия алдында яҡлай торғайныҡ. Бына шулай ижади эшләү өсөн бер ниндәй ҙә сик булманы. Яҙыусылар союзы бинаһын биҙәгәндә лә ошо тәжрибәм нығ ярҙам итте.

**Һин - Өфө ҡыҙы. Башҡорт әҙәбиәтенә, уның фольклорына мөкиббән киткәнһең, үҙаллы ла өйрәнәһең. Быныӊ сере нимәлә?**

- Эйе, мәктәптә лә, юғары уҡыу йортонда ла яратҡан фәнем әҙәбиәт булды. Үҙем иҫ белгәндән алып һүҙ сәнғәте - минең илһам сығанағым. Дөрөҫөрәге, әҙәбиәт һәм һынлы сәнғәт - минең тормошомда икеһе бергә йәнәш баралар. Миңә айырыуса сюжетлы иллюстрациялар тыуҙырыу оҡшай. Әҙәбиәттәге сюжеттар һүрәттәремдә лә сюжеттар булып сағылыш алалар. Улар аша ҙур ваҡиғаларҙы бәйән итәм. Һүрәт эшләү мине илһамландыра, яңы кисерештәр менән байыта, күңелемде тулыландыра һәм энергия бирә.

**Ижадыңда фольклорға ҙур урын бирелгәс, халыҡ ижадына һөйөүҙе кем тәрбиәләне, тигән һорауҙы биреү урынлы булыр.**

- Минең әсәйем башҡорт әҙәбиәте, фольклоры уҡытыусыһы. Шуға ла илһамландырыусым әсәйем булды, тип әйтә алам. Ул мине бәләкәйҙән әҙәбиәт донъяһына алып инде, китапты бергәләп уҡыйбыҙ, образдарҙы, сюжеттарҙы тикшерәбеҙ, ундағы кинәйәне эҙләйбеҙ, төп идеяны табабыҙ. Беҙ, тием, сөнки минең игеҙәгем бар. Һүҙ эсендә ниндәй метафоралар бар, уларға ниндәй мәғәнә һалынған, был образ нимәне аса - бына шулай тикшерергә ярата инек. Башҡорт фольклоры донъяһына ишекте тап әсәйем асты.

Университетта уҡығанда ла сит ил фольклорын шулай ныҡлап тикшерә торғайным, был миңә оҡшай ине. Фольклорҙа йәшеренгән нәмәләр күп бит ул. Унда әллә нисәмә ҡатлам ята, уларҙың бөтәһе лә асыҡланмаған, өйрәнелмәгән, яҡтыртылмаған. Миҫалға, Самрау батшаны ғына алайыҡ. Ябай ғына итеп ҡарағанда, ул ҡоштар батшаһы. Икенсе яҡтан, ул бит күп нәмәне символлаштыра, әйтәйек, ике ҡатыны - Ҡояш һәм Ай - бар. Ҡояш Самрауҙың яҡты яғы булһа, Ай - күләгәле яғы. Самрау яҡтылыҡ һәм ҡараңғылыҡты бергә тоташтырған образ булып килеп сыға һәм шул рәүешле ул тормош тигеҙлеген тәьмин итә.

"Урал батыр"ҙы өйрәнә башлаһаҡ, бик тәрәнгә төшөп китәсәкбеҙ. Әҙләнергә, әллә нимәләрҙе табырға, аңларға була. Әҫәр ҡатмарлы, ләкин ныҡ ҡыҙыҡ. Шуға ла мин иллюстрацияларымды "Урал батыр"-













✓ ***Фекерҙе төйнәп әйтһәк, физик тәнебеҙҙе түгел, ә аңыбыҙҙы яңы сифаттағы, юғары тирбәлештәге йышлыҡҡа көйләргә, үҙгәртергә, йәмғиәттә йәшәйештең яңы нигеҙен ҡороуҙа туранан-тура ҡатнашыу зарурлығын белеү кәрәк.***



ҙан башланым. Мине эпик күренештәр үҙенә тарта, һәр төрлө алыш-көрәш, ундағы хәрәкәтте бирергә тырышам. Урал батырҙың Зәрҡум менән көрәшен төшөрҙөм. Зәрҡумға ярҙам иткән йыландар менән дә алышын эшләнем. Миңә Урал батырҙың аждаһа менән көрәше айырыуса оҡшай. Тағы бер идеям күңелдә йөрөй: төп геройҙың Һомай менән тәү осрашҡан мәлен төшөргөм килә. Яҙыусылар союзы бинаһы өсөн эшләнгән иллюстрацияла Урал батыр арыҫланы менән бергә тора. Һомай эргәһендә - Аҡбуҙат.

**Урал батыр эпосында Аҡбуҙат "ҡанатлы" тип тасуирланмай. Был турала мәшһүр эпосты өйрәнеүгә ғүмерен бағышлаған Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева ла яҙып сыҡты. Һинең Аҡбуҙатың ниндәй?**

- Беҙ бәләкәй саҡтағы "Сәңгелдәк" сығарылышында Аҡбуҙатты ҡанатлы итеп эшләгәйнеләр. Ни өсөндөр, тап ошо образ күңелгә ныҡ итеп һеңеп ҡалған. Шуғалыр ҙа мин Аҡбуҙатты ҡанатлы итеп төшөрҙөм. Төп нөсхәлә ул ҡанатһыҙ булһа ла, минең ижадымда ҡанатлы булып күҙалланды. Бында мин художестволы гиперболизация ысулын ҡулландым, тип кенә әйтә алам. Шундай образды төшөрөү миңә ҡыҙыҡлыраҡ тойола. Ләкин алдыма "төп нөсхәлә нисек бар, шулай төшөрөргә" тигән бурыс ҡуялар икән, мин быны ихлас эшләйем. Тимәк, эпоста һүрәтләнгән Аҡбуҙатты ла яһай алам.

Үҙемдең ижад йүнәлешенә килгәндә инде, мин ниндәйҙер есем, йәки портрет эшләгән саҡта, ул "туп-тура күсермә булырға, ысынбарлыҡҡа тура килергә тейеш", тип ҡарамайым. Реаллеккә тура килгән портрет ҙур көс, хеҙмәт талап итә. Миңә үҙем аша, күңелем аша үткәреү, үҙем нимәгә иғтибарҙы йүнәлтәм, шуны асығыраҡ, нығыраҡ итеп сағылдырыуым мөһим. Рәсем эшләүҙә үҙ стилем бар. Төп нөсхәгә оҡшаған хәлдә лә, кешеләрем уның тулы сағылышы түгел, реаллектән улар барыбер айырыла. Кешенең ниндәйҙер айырым һыҙатын, ҡиәфәтендәге үҙенсәлеген күрәм икән, мин уға диҡҡәт бирәм, уны нығыраҡ, баҙыраҡ итеп күрһәтергә тырышам. Стилләштереүҙең үҙенсәлеге лә шунда.

Башҡа эпостар буйынса ла иллюстрациялар яһау теләгем бар. Заятүләк менән Һыуһылыу образдары миңә тынғылыҡ бирмәй. Шулай уҡ эпостарҙағы, риүәйәттәрҙәге ҡыҙҙарҙың ҡоштарға әүерелеүҙәрен, мәҫәлән, Һомайҙың нисек аҡҡошҡа әйләнгәнен төшөргөм килә. Оҡшай шул күренеш. Әлеге мәлдә башҡорт халыҡ әкиәттәренә һүрәттәр төшөрәм. Балаларға бүләк итерлек матур декорациялар менән сағыу, балҡышлы иллюстрациялар булыуын теләйем. Ундай китаптарҙы балалар ҡыҙыҡһынып ҡараясаҡ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ӘРЛӘШЕҮҘӘРҺЕҘ ЙӘШӘЙЕК!



**Һуңғы ваҡытта бер юлы бик күп халыҡтың асыулы йөрөүе күҙгә салына. Ундайҙарҙың кәйефенең яҙма рәүештә социаль селтәрҙәрҙә иркенләп күбәйтелеүе, таралыуы бигерәк тә ҡурҡыныс күренешкә әйләнде. Бер кешегә йәки төркөмгә, йә берәй ваҡиғаға ҡарата кемдер башлап кире баһа биреп ебәрҙеме, уға шундуҡ башҡалар ҡушыла. Бензинға шырпы һыҙып ырғытҡандай, асыу уты гөлтләп ҡабына һәм китә һыу буйы һәм оҙайлы ваҡытҡа әр-ҡарғыш-һүгенеү һүҙҙәре теҙеп өҫтәү!**

## Асыу - ағыу

Йыһандағы емереүсе көстәргә хеҙмәт итеүсе ҡолға әйләнгәнен уйламай ҙа был ваҡытта бәндә. Шуны хәтерҙә тотайыҡ: ғаләмде барлыҡҡа килтереүсе Илаһи көстөң Яралтыусы тигән дә исеме бар. Юҡҡамы ни туған телебеҙҙә яралыу, яралтыу, яратыу һүҙҙәре бер тамырҙан! Тимәк, Аллаһ Тәғәлә менән беҙҙе тик яратыу, мөхәббәт тойғоһо бәйләп тора. Үҙ сиратында был төшөнсә һәр беребеҙҙә үҙ-ара ихтирам, бер-берендә ҡәҙерләү, ярҙамсыллыҡ сифаттарын хасил итә: "Алланан һеҙгә нур һәм асыҡ китап барҙы. Шуның менән Алла Унын ризалығын алырға теләгән кешеләрҙе татыулыҡ юлынан алып барып, Үҙ рөхсәте менән ҡараңғынан яҡтыға алып сыға, хаҡ юлға төшөрә" *[Ҡөрьән Кәрим: "Әл-Маидә" (Аш табыны) сүрәһе, 5:15,16].*

Ошо хәҡиҡәткә инанған Аҡмуллабыҙ ҙа хикмәтле васыят ҡалдырған түгелме беҙгә:

*Аҡ тунынды яманлап,*
*атлас ҡайҙан табырһың,*
*Түрәләрҙе яманлап,*
*ғәҙел ҡайҙан табырһың?*

Асыуланып, әр менән әйткән һүҙҙең әһәмиәте тураһында ҡат-ҡат уйланайыҡ әле. Кешенең нимәнәндер ризаһыҙлыҡтан эсендәге асыуын, һарыуы ҡайнауын тышҡа сығарыуы тураһында, уҫаллыҡ менән бәйле холоҡ-фиғелгә ҡарата мәҡәл-әйтемдәр, кисәтеүҙәр күп кенә халыҡ ижадында:

*Асыу - ағыу, йотһаң - дарыу.*
*Асыу - бысаҡ, аҡыл - таяҡ.*
*Асыу алдан, аҡыл - арттан.*
*Асыуың айғыр булһа, аҡылыңды теҙген ит.*
*Аҡайған күҙҙә аҡыл аҙ.*
*Артҡы аҡылға кем дә бай.*
*Ҡыҙыу кеше тиҙ ҡартайыр.*
*Тиле асыуы - яман асыу.*
*Тиле тилерһә, тирәк йыҡҡан.*

Ислам ҡанундары аша ла, кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләү маҡсатынан, ошондай уҡ йөкмәткеле аяттар бар. Мәҫәлән: "Бер кешенән үс алырға теләгән саҡтарҙа ла насарлыҡты ул кеше үҙе эшләгән тиклем генә эшләгеҙ, бер һуҡҡанға ике тапҡыр һуҡмағыҙ. Әгәр инде сабырлыҡ күрһәтеп, үс алмай ҡалһағыҙ, был бигерәк тә яҡшы" *[Ҡөрьән Кәрим: "Әл-Нәхл"(Бал ҡорттары) сүрәһе, 16:126].*

Тағы ла бер тапҡыр фекеремде һыҙыҡ өҫтөнә алғым килә:

*Халыҡ аҡылы -*
*ҡойон, ҡаршы тороуы ҡыйын.*
*Халыҡты хан да еңмәҫ.*
*Халыҡ көсө таш яра.*

Ошондай мәҡәлдәрҙәгесә, татыу-берҙәмойошҡан халыҡ булараҡ дан алайыҡ! Уға өлгәшер өсөн түбәндәге хикмәтле һүҙҙәрҙе лә иҫтә тотайыҡ:

*Халыҡ барҙа хаҡлыҡ бар.*
*Халыҡ әйтһә, хата әйтмәҫ, хаҡ әйтер.*
*Беләкле берҙе йығыр, йөрәкле меңде йығыр.*
*Буй үҫтермә, аҡыл үҫтер.*

## Берләшә алыу һәләте

Ниндәй генә ойошма, берләшмә, төркөм, халыҡ булмаһын, ул фәҡәт дөйөм, уртаҡ бер идея тирәләй ойоша ала. Ошо урында фекеремде икенсерәк йүнәлешкә бороп алып китмәксемен. Интернет селтәрҙәрендә Циолковский ҡалдырған бер мәғлүмәткә юлыҡтым: "Алтын быуатҡа тик берләшә, ойоша алыу һәләтенә эйә булғандар ғына барып етәсәк. Ойошоуҙың үҙенең ҡануны бар: 2 аура, әгәр ошо икәү фекерҙәштәр икән, йәғни уларҙың маҡсаттары бер йүнәлештә, бер тулҡында булһа, бер-берһенә 7 тапҡырға көсәйтә ала. 3 кеше берләшһә - эштең һөҙөмтәһе 2-се дәрәжәләге 7, йәғни 49 тапҡыр ҡеүәтлерәк буласаҡ. 4 кеше ҡушылһа - дөйөм ҡеүәт өсөнсө дәрәжәләге 7-гә, тимәк, 343 тапҡырға арта икән! Шуға күрә төркөмдә кеше һаны арткан һайын яҡшыраҡ, йәғни төркөмдөң уртаҡ көсө күп тапҡырға арта бара икән! Коллектив - бөйөк көс!" Бына ни өсөн сафтарҙы аҙымлап, берәмләп булһа ла арттыра барыу фарыз беҙгә!

Хәл белешеп, ҡайғы-шатлыҡты уртаҡлашып, бер-берәңә терәк булып йәшәү әлмисаҡтан беҙҙең халыҡтың булмышына хас сифат. Ире яуҙа ҡалған ҡатындар, етем балалар, ҡараусыһыҙ ҡалған ҡарттар общинала һәм дин ҡанундарына яраҡлашып йәшәгән замандарҙа бер ваҡытта ла ҡурсауһыҙ булмаған. Бындай йәмғиәт тураһында "Урал батыр" ҡобайырында мәғлүмәт бар. Был илдә йолалар бөтөнләй башҡа ҡуйылған һәм мотлаҡ шулай үтәлгән:

*Беҙҙең илдә йолала*
*Барыһы ла туғандай,*
*Бер әсәнән тыуғандай...*
*Илдә талап йөремәҫкә,*
*Илдә ҡан да ҡоймаҫҡа;*
*Артыҡ ҡалта (кеҫә!) текмәҫкә*
*Ил әнйәһен йәшереп,*
*Ерга күмеп ҡуймаҫҡа;*
*Тапҡан-таянған бары*
*Һис айырым булмаҫҡа;*
*Көсләнеңкә - байман, тип,*
*Еҫерҙе (етемде) сит күрмәҫкә;*
*Ҡыҙға әсә булғанды*
*Хур әсә, тип, кәмһетеп,*
*Балаһыны һыуға атып,*
*Андай йола ҡылмаҫҡа,*
*Тигән илдең анты бар.*

Бындай шарттарҙа халыҡ бер бөтөн булып, уҡмашып көн күрә һәм ошоноң менән үҙенүҙе һаҡлай килә. Ере лә, теле лә, үҙе лә имен булған халыҡ вәкилдәренең хис-тойғолары бер кимәлдә тотола, сәләмәтлеге һаҡлана, ғүмере оҙон була. Быны фәнни яҡтан да иҫбатлап була.

## Күңел торошо үлсәме

Кешенең күңел торошо күҙгә күренмәгән донъя булһа ла, уны ла үлсәү берәмеге - вибрация (бер секунд эсендәге тирбәлеш) дәүмәле бар:

- ***рәхмәт әйтә белеү*** (благодарность, спасибо) - 45 Гц;
- ***хуш күңеллелек*** (великодушие) - 95 Гц;
- ***ысын йөрәктән рәхмәтле булыу*** - 140 Гц;
- ***үҙеңде башҡалар менән бер бөтөн итеп тойоу*** - 144 Гц;
- ***миһырбанлылыҡ*** (сострадание )- 150 Гц һәм юғарыраҡ (йәлләү- 3 Гц!);
- ***яратыу*** (кеше аҡылы менән яратыуҙың яҡшы хис һәм ҙур көс икәнен аңлай, әммә йөрәгә аша кисерергә әҙер түгел)- 50 Гц;
- ***һөйөү*** (барса кешеләрҙе һәм йән эйәләрен тиң ҡабул итеү, хәстәрләү, йөрәк менән яратыу ) - 150 Гц һәм юғары;
- ***мөхәббәт*** (изге һөйөү, бер ниндәй шартһарһыҙ, кем өсөндөр үҙ-үҙеңде ҡорбан итеү кимәлендә, йыһан киңлегендә яратыу) - 205 Гц -тан артыҡ.

Ошоноң киреһе булып, тарҡау йәшәгән һәм бер-берһен хәстәрләмәгән халыҡта кире хис-тойғолар барлыҡҡа килә, һәм уларҙың йәшәү кимәле түбән төшә:

- ***ҡайғы*** - 0,1 - 2 Гц;
- ***ҡурҡыу*** - 0,2 - 2,2 Гц;
- ***үпкә, рәнйеш*** - 0,6 - 3,3 Гц;
- ***асыу ҡабарыу, ризаһыҙлыҡ тойоу*** (раздражение)- 0,9 - 3,8 Гц;
- ***асыу килеү һәм ризаһыҙлыҡ белдереү*** (возмущение) - 0,6 - 1,9 Гц;
- ***асыуҙан ҡыҙып китеү*** (вспыльчивость) - 0,9 Гц;
- ***асыу килеүҙән тоҡанып китеү*** (вспышки ярости) - 0,5 Гц;
- ***ярһыу***- 1,4 Гц;
- ***һауалылыҡ, тәкәбберлек*** - 0,8 Гц;
- ***кәмһетеп, түбәнһетеп ҡарау*** (пренебрежение) - 1,5 Гц;
- ***өҫтөнлөк күрһәтеү*** (превосходство) - 1,9 Гц;
- ***эрелек, маһайыусанлыҡ*** (гордость, мания величия) - 3,1 Гц;

"Ошондай кире тойғолар менән йәшәүселәр эргәбеҙҙә бармы?" тигән һорауҙы ҡуйыйыҡ әле үҙебеҙгә. Донъябыҙ алға китһен, йәшәйешебеҙ матур, көйлө булһын өсөн иң тәүҙә ошондай кире сифаттарҙан арыныу кәрәк.

Ер планетаһы вибрацияһының йышлығы (бер секунд эсендәге тирбәлеше) меңйыллыҡтар дауамында 7,6 Гц булып тора, физиктар был дәүмәлде Шуман йышлығы тип йөрөтә һәм шул күрһәткескә ҡарата приборҙарын көйләй. Кеше ошо шарттарҙа үҙен тыныс һәм көйлә тота, сөнки уның үҙен уратып алған энергетик биополеһының параметрҙары ла 7,6 - 7,8 Гц икән. Әммә һуңғы йылдарҙа Шуман йышлығының ныҡлы күтәрелә барыуы күҙәтелә, имеш:

ғинуар, 1995 - 7,80 Гц,
ғинуар, 2000 - 9,30 Гц,
ғинуар, 2007 - 9,80 Гц,
ғинуар, 2012 - 11,10 Гц,
ғинуар, 2013 - 13,74 Гц,
ғинуар, 2014 - 14,86 Гц,
февраль, 2014 - 14,99 Гц,
март, 2014 - 15,07 Гц,
апрель, 2014 - 15,15 Гц .
июнь, 2017 -18,6 Гц.

Артабанғы йылдарҙа был күрһәткестәр нисек үҫә барғанын фекерләп тә тойор әҙәм балаһы. Ошо күренеште фән күҙлегенән генә ҡараһаң да, аңлашыла: кеше үҙенең тирбәлешен күтәрелеү яғына үҙгәртмәһә, иртәмеһунмы Ер тормошон ҡалдырырға мәжбүр буласаҡ. Был осраҡта уға юғары вазифала эшләүе лә, йыйған матди байлығы ла ярҙам итмәҫ. Фекерҙе төйнәп әйтһәк, һәр ҡайһыбыҙға булмышыбыҙҙы: физик тәнебеҙҙе түгел, ә аңыбыҙҙы яңы сифаттағы, юғары тирбәлештәге йышлыҡҡа көйләргә, үҙгәртергә, йәмғиәттә йәшәйештең яңы нигеҙен ҡороуҙа туранан-тура ҡатнашыу зарурлығын белеү кәрәк. "Мин был кешене нисек отам, унан ни файҙа алам?" - тип түгел, "Эргәмдәгеләргә мин ни бирә алам, ниндәй файҙа килтерә алам, нимәгә өйрәтә алам? - тигән маҡсат менән йәшәргә тейеш бөгөнгө Кеше.

Ғайса Бәйғәмбәр "Возлюби ближнего своего!" тигән васыят ҡалдырһа, "Яуабына ҙурҙы теләп изгелек күрһәтмә!" тип әйтәсәк был турала Ҡөрьән-Кәрим *[Әл-Мудәҫҫир (Кейемәнә бөркәнгән) сүрәһе, 6-сы аят].* Шул осраҡта ғына кешелек ысын үҫеш юлына төшәсәк! Ер йөҙөндәге тормошто ожмахҡа тиң итеү өсөн тәүҙә бары тик үҙең өсөн түгел, ә үҙеңдән башҡалар өсөн яҡшылыҡ эшләүгә ынтылыш булдыр!

*Донъяны матур төҙөгән,*
*Бағты мәңге биҙәгән -*
*Ул да булһа яҡшылыҡ.*
*Һыуға ла батмаҫ - яҡшылыҡ,*
*Утҡа ла янмаҫ - яҡшылыҡ,*
*Ҡуҡҡа лә осор - яҡшылыҡ*
*Телдән төшмәҫ - яҡшылыҡ.*
*Бары эшкә баш булыр...*

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

*✓ Һуңғы ваҡыт ҡарсығы ауыҙ асып бер һүҙ өндәшмәй. Рәжәп ҡарттың өндәшеүенә лә, тиҙ генә ҡолағынан теге әкәмәттәрен алып тыңлап ала ла, арлы-бирле яуап биреп, ҡолаҡсындарын кире тығыр булып китте.*



Рәжәп ҡарттың ҡарсығы, етенсе тиҫтәне уҙып китеүенә ҡарамаҫтан, һис кенә лә йәштәрҙән ҡалышырға уйламай. Донъяһы ла, баҡсаһы ла, тәҙрә төбөндәге бихисап гөлдәре лә ялт итеп тора, ашһыуы йәштәрҙекенән артыҡ булмаһа, кәм түгел. Ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләгәнгәлер, зиһене лә теүәл, үҙенә кәрәк нәмәне бик тиҙ отоп ала. Кеҫә телефоны ла уның - иң модалыһы. Кис булдымы, ҡарты телевизор алдына ҡырын ятһа, ул, ноутбугы артына ҡунып, интернетта ултыра. Ҡамасауламаҫ өсөн ҡолаҡсындарын тығып ала ла, донъяһын онота. Ҡартына бернисә тапҡыр: "Аш бүлмәһенә телевизор алайыҡ", - тип, инәлеп ҡараны, уныһы тыңламағас, бошоноп тормай, андроидлы телефон алып ебәрҙе. Киноһын да шунан ҡарай, аш йүнәткән арала, ҡолағына тығып, "Юлдаш"ты ла тыңлай. Йә көлөп ебәрә, йә алып барыусылар менән һөйләшә башлай...

Рәжәп ҡартҡа был оҡшап етмәй, әлбиттә. Әүәлерәк әбейе уның янына хет телевизор ҡарарға тип, килеп ултыра торғайны. Ә ул әбейенә "Көт мине" менән "Мөғжизәләр яланы"н күрһәтмәй, эре генә футбол йә булмаһа хоккей ҡарай. Пульт өсөн дә талаш уның мөнфәғәтенә яҙа торғайны. Һәм был уның үҙенә күрә бәсен күтәреп ебәрер ине. Һуңғы ваҡыт ҡарсығы ауыҙ асып бер һүҙ өндәшмәй. Рәжәп ҡарттың өндәшеүенә лә, тиҙ генә ҡолағынан теге әкәмәттәрен алып тыңлап ала ла, арлы-бирле яуап биреп, ҡолаҡсындарын кире тығыр булып китте. "Шуға нимә тип әйтәһең инде. Бик эреләнде әле был!" - үҙаллы һөйләнеп алды ла, елкәһен ҡашып, уйға талды Рәжәп ҡарт.

Ҡаланан улым ҡайтһа, һөйләшеп ҡарайым, ҡарсыҡтыҡы кеүек телефонды мин дә ҡуллана алмайыммы ни, тип уйланы.

...Ҡарт улының ялға ҡайтҡанын көтөп алды. Аҡсаһын тотторғас, улы күп һөйләнеп торманы:

- Була ул, атай! Афарин, донъянан артта ҡалырға ярамай! - тип хуплап ебәрҙе.

Был һүҙҙәр ҡарсығына мәрәй ҡайтарғандай тәьҫир итте Рәжәп ҡартҡа. Ул иркен һулап ҡуйҙы. Хәҙер улының килеһе ялын көтөргә ҡала инде.

Ҡартының өр-яңы телефонлы булыуы Ғәйниә ҡарсыҡҡа ҡайғы булды, мәшәҡәт өҫтәне:

- Әбей, кил әле, хәҙер ҡайҙа баҫайым? Үҙендеке һымаҡ минә лә шуны эшләп бир әле! Ҡара әле, әллә нимә килеп сыҡты? Хәҙер нимә эшләтәйем?

- Ә һин ни эшләп белмәгән еренә баҫаһың һуң? Алйыттың бит! Мине әллә һакер тип беләһеңме?

- Йә-йә, бызылдамай ғына тағы күрһәтеп бир ҙә...

- Кил, бына ҡарап тор. Онотма, бутама.

Сөкөрләй-сөкөрләй ҡарсыҡ ҡартына телефон буйынса ликбез үткәрә. Бер аҙналай ҡарт, ҡолағынан төшөрмәй, "Юлдаш"ты тыңлап йөрөнө. Эш менән булһа ла, тәмәке тартһа ла, хатта ... телефонынан айырылманы, ҡәртә эсендәге эштәре лә ырап киткәндәй тойолдо.

...Бер көн кис ҡарт ҡарсығына әкрен генә яҡынлашты ла, мөрәжәғәт итте. Уның радио тыңлап йөрөү менән генә сикләнгеһе килмәй ине, үҙе яратҡан йырҙарҙан исемлек төҙөп, шуларҙы айырым тыңлап буламы икәнлеген һорашты. Икәүләп төн уртаһына тиклем йырҙар һайланылар. Ҡартының балалар кеүек шатланыуы ҡарсығына ла күсте. Ҙур эш башҡарғандай, арып-талып бик ҡәнәғәт йоҡларға яттылар.

Иртәнге сәй күңелле генә үтте. Ни тиһәң дә, ҡарттың да, ҡарсыҡтың да бөгөнгә пландары ҙур ине. Ғәйниә ҡарсыҡ әхирәтенә ҡышҡылыҡҡа салат ябырға барырға йыйынһа, Рәжәп ҡарт әле бер кемгә лә әйтмәгән хыялын тормошҡа ашырырға маҡсат ҡылды. Ул да булһа, ҡапҡа төбөнә семәрләп-семәрләп өр-яңы эскәмйә яһап ултыртыу. Иҫкеһе сереп бөткән инде.

Ҡарсығы сығып китеү менән байтаҡ ҡына ваҡыт тәмәкеһен көйрәтеп, эшләнәһе эскәмйәне күҙ алдына килтереп, тегендә-бында ятҡан таҡталарын, оҫталыҡ ҡоралдарын барланы. Верстагы янына ут һуҙҙы. Үлсәмдәр алып, киҫеп тә сыҡты. Шул ерҙә уның телефоны иҫенә төштө. Ни өсөн ул кисә ҡарсығы менән төнө буйы көйҙәр һайлап ултырҙы һуң әле?

- Хәҙер беҙ уны! - Быҫҡан таҡтаһына ҡарап күҙ ҡыҫты ла, телефонын алып, көй ебәрҙе. Ҡолаҡсынһыҙ ғына тыңларға булды. Шундай күңелле, дәртле йыр кәртә эсенә тулды. Боронғо йыр түгел, яңы, заманса. - Үҙебеҙҙең заман йырҙарына етмәһә лә, ҡай саҡ йәштәр ҙә йырлай белә шул, - тип, ҡарт ләззәтләнеп тыңлай-тыңлай эшен дауам итте.

Дүртенсе көй дүрт өҫтәй инде: ҡартыбыҙ ҙа көй ыңғайына ғына хәрәкәт итә. Көй туҡтаны. Рәжәп ҡарт оҫталыҡҡа мөкиббән тотондо. Икенсе көйҙөң аҙағында ғына ул тәүге көйҙөң ҡабатланғанын һиҙеп ҡалды. Шулай ҙа әһәмиәт бирмәне, ҡарсығы бер көйҙө ике тапҡыр яҙҙырғандыр, тип уйланы. Өсөнсө тапҡыр ҙа шул уҡ йыр башланды. Ярай, йырлаһын инде тағы берҙе, матур йыр бит, тип эшен туҡтатманы ҡарт. Дүртенсе ҡатҡа шул уҡ йырҙың яңынан башланғанын һиҙмәй ҙә ҡалды оҫта.




Ҡушымтаһын отоп алып, ҡушылып һупалап та ебәрҙе хатта:

*- Һин - минең осор ҡанат ул,*
*Мин - һинең осор ҡанат.*
*Пар ҡанаттар булып икәү,*
*Осорбыҙ алға ҡарап.*

Көйҙөң бөткәнен көтмәне, эш ҡоралдарын ситкә ҡуйҙы, бирсәткәләрен систе, телефонын ҡулға алды, блокты асырға маташты, ләкин... өлгөрмәне, теге йыр яңынан "эшен" башланы. Рәжәп ҡарт йөн-яғына ҡаранып алды, күрше-күләң күҙәтеп тормаһын, йәнәһе. Әһә, тапты! Телефонын икенсе йырға күсерҙе. Моғайын, ҡалған йырҙарҙы сират буйынса тыңлар... Тәмәке тартырға ла туҡтамай, эшенә тотондо. Башлаған эш ырамлы ғына бара, тип ҡыуанды. Тик, һуңғы ҡуйған йыр бөтҡәс тә, теге тәүге йыр тағы башланды бит:

- Иңләп тормоштоң күктәрен,
Осорбоҙ алға ҡарап...

Рәжәп ҡарт бер килке телефоны яғына ҡарап торҙо, унан ҡул һелтәне, йырлаһын, йәнәһе, бында эш мөһимерәк. Шулай ҙа сираттағы йырҙың башланыуын түҙемле генә көттө. Ләкин өмөтө аҡланманы, тағы теге йыр...

Йорт хужаһы ҡулындағы таҡтаһын ҡосаҡлап, верстагы янындағы ултырғыс ролен башҡарған түмәргә ултырҙы. Ике күҙе телефонында. Нимәһен көйләй белмәйем икән мин быны, хәйерһеҙ, ни ҡарсыҡ өйҙә юҡ, тип һуҡрана-һуҡрана баш ватты. Теләр-теләмәҫ кенә таҡтаһын ҡуймаға һөйәне, бирсәткәләрен систе, телефонын блоктан сискәнсе биҙҙерер хәлгә еткән йыр инде нисәнсегә яңырай... Ҡарт һуңғы түҙемлеген төйнәп, тағы ла кисә йыйған йырҙарҙың исемлегенә баҫты.

Исемлектең ҡап уртаһынан башларға булды. Әсәйҙәр тураһында моңло ғына йыр ағылды. Күңеленә шундай ятышлы йыр табыуы ҡартты бөтөнләй тиерлек тынысландырҙы. Хатта үткән быуатта ятып ҡалған бала сағын, атай-әсәйен иҫенә төшөрөп, тәмәкеһен ҡабыҙҙы. Был йырҙы тағы тыңлағыһы килде, яңынан шул йырға баҫты. Тороп таҡталары янына килде. Әллә нисә тапҡыр игтибарын ситкә йүнәлтеүе арҡаһында ҡайһы таҡтаны ҡайҙа ҡуйырға икәнлекте онотоп буталды. Асыуы килде. Уның ҡарауы, моңло йырҙан һуң, әлеге лә баяғы, ни сәбәптәндер, тағы ла тәүге йыр үҙ нәүбәтендә "пар ҡанатланып осто":

- Осорбоҙ алға ҡара-а-ап.
Осорбоҙ алға ҡара-а-ап...

Рәжәп ҡарттың һарыуы ҡайнаны. Ҡайһынының ҡайҙа ҡуйырға белмәй торған таҡталарын алып һелтәне, ҡалтыранған тауыш менән:

- Хә-ә-әҙер осаһың, мөртәт! Алғааа ҡара-а-ап! - тине лә, асыуынан ҡалтыранған ҡулдары менән телефонын баҡса яғына осорҙо. Телефон өйөрөлөп-өйөрөлөп алыҫҡа барып төшөүгә, ҡарт тертләп ҡуйҙы. - Әрәм иттем, шәйт! - тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе лә һәйкәл кеүек ҡатып ҡалды.

Ташҡа төшмәһә ярар ине, тигән уй мейеһен телеп үтте. Күп тә үтмәй, баҡсалағы түтәл араһынан теге йырҙың дауамы ишетелде. Рәжәп ҡарт ҡатып торған еренән терелеп китте. Тирә-яғына алан-йолан ҡаранды ла баҡсаға инеп китте. Быуылып илап ятҡан сабыйҙы йыуатып ҡулына алғандай:

- Әү-әү! Остоңмо? Осҡоң килгәнгә остоң инде. Онталмаһаң ярар ине? - Үсәгәндәй һөйләнеп, ҡарт өлтөрәп барып телефонын ҡулын алды. Телефонының төшкән ере ҡуйы кишер түтәленә тура килгән, сыйылмаған да хатта. Әйләндереп алдын-артын ҡарап сыҡҡас: - Малади-и-ис, телефон! Ана шулай хужаң кеүек бул, бирешмә, - тип телефонын маҡтап-маҡтап һүндереп, ҡәҙерләп кенә кеҫәһенә һалып ҡуйҙы ла үҙенә үҙе өндәште:

- Әйҙә, Рәжәп, юҡ-бар менән башыңды бутама, башлаған эшеңде бөтөр.

Ҡарсығы ҡайтыуға йорт хужаһы иҫке эскәмйәне саҡ алыштырып өлгөрҙө. Яңы эскәмйәһенә ултырып, Ғәйниәһен ҡаршы алды ул.

- Әйҙә, әбей, ултыр яныма. - Рәжәп ҡарттың йөҙө май ҡояшындай балҡыны. Эскәмйәнең яңырғанын күреп, Ғәйниә ҡарсыҡ та ихлас ҡыуанды. Ҙур кинәнес менән ҡарты янына ҡунаҡланы. Яңы йышылған ап-аҡ ҡына, ҡарағай еҫе аңҡып торған таҡталарҙы ҡулы менән һыйпауҙан рәхәтлек тойҙо.

- Ну, бабай, эшләһәң ҡулыңдан килмәгән эш юҡ та инде, - тип ҡырҡ биш йыл бергә ғүмер иткән ҡартын маҡтап та алды. Унан ҡартына әйләнде:

- Тамағыңа ашаныңмы, исмаһам, өйгә инеп? Әҙерләп киткәйнем бит?

Һиҙмәй буламы һуң Ғәйниә, һиҙҙе, ҡартының күҙҙәре хатта майланып киткәндәй ҙәһә.

- Әллә эстеңме, бабай? Берәйһе килеп киттеме?

- Ю-у-уҡ! Һин нимә? - Рәжәп ҡарттың күҙҙәре йоп-йоморо булды.

- Әтеү, нимә булды? Ай-һай, нимәнелер әйтеп еткермәйһең.

- Бына яңы эскәмйәгә шатланып ултырам, етмәһә, телефондағы йырҙар нисек һуң әле... "Осорбоҙ алға ҡарап", тип йырлайҙар, әбей!

Бер ни аңламаған әбейен иңенән ҡосаҡланы. Сыҙаманы, үҙе шарҡылдап көлөп ебәрҙе.

- Бар инде, бар өйгә ин, ашыңды әҙерлә. Хәҙер инәм.

Ҡарт, аулаҡлап, ике ҡулын ике яҡҡа эскәмйәһенең һөйәнгесенә һуҙып һалды ла тирә-яҡты күҙәтте. Йәнәһе, күрегеҙ, ауылдаштар, Рәжәп ҡарттың оҫталығын - бирешмәй әле ул! Шул уйҙарына тағы ла мәрәкәле, серле мутлыҡ менән, "Осабыҙ алға ҡарап", тип өҫтәп ҡуйҙы ла, әбейенең ашҡа саҡырыуын көтә-көтә йылмайып ултырыуын дауам итте.

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК ӨЛГӨҺӨ

**Баймаҡ районы йәштәре һуғыш йылдары йырҙарына клип төшөргән.**

Баймаҡ музыканттары үҙҙәренең сығышын Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына һәм Ватанды һаҡлаусылар йылына арнаған. Музыкаль клипты төшөрөүҙә Түбә ауылынан МХО яугиры Илшат Мәҡсүтов (әле яҡташыбыҙ яраланғандан һуң реабилитация үтә) һәм музыкант, Бөтә Рәсәй баянсы-аккомпаниаторҙар конкурстары лауреаты Илшат Абдрахманов ҡатнашҡан, тип хәбәр итә "Баймаҡ хәбәрҙәре" гәзите. "Шул тиклем күңел һалып һәм оҫталыҡ менән башҡарылған сығыш. Миненсә, ул илһөйәрлек өлгөһө һәм хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусыларҙың барыһына ла ихтирам билдәһе булып тора. Афарин һеҙгә! Киләсәктә ижади уңыштар, яңы ҡаҙаныштар юлдаш булһын!" - тип Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Азамат Иҙрисовтың һүҙҙәрен килтерә гәзит.

# ЙӘНҺҮРӘТТӘ - "ӘЛИФБА"

**Башҡортостанда рәсми рәүештә "Әлифба: һандар һәм ваҡыт" анимация белем биреү-күңел асыу йәнһүрәтенең икенсе миҙгеле башланды. Башҡортостан Башлығы Гранттар фонды сиктәрендә тормошҡа ашырылған проект 3 - 7 йәшкә тиклемге балаларға башҡорт теленең нигеҙҙәрен үҙләштереүҙә ярҙам итәсәк тип күҙаллана.**



Әкиәт сабыйҙарын туған теленә өйрәтеүсе ата-әсәләргә һәм шулай уҡ балалар баҡсаларында һәм мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында ҡулланыу өсөн эшләнгән. Ул һандар һәм ваҡыт темаларына арналған бер минутлыҡ 60 сериянан тора. Һәр серия өҫтөндә, сценарист һәм рәссамдарҙан тыш, балалар психологтары, музыканттар һәм башҡорт теле уҡытыусылары эшләгән.

- Республика етәкселеге төбәктә креатив индустрияны үҫтереүгә ҙур иғтибар бүлә. 2030 йылға тиклем Ижади индустрияларҙың илдең эске тулайым продуктына (ВВП) индергән өлөшө, кәм тигәндә, 6 процент тәшкил итергә тейеш. "Әлифба" кеүек проекттарҙың был ҡарарҙың дөрөҫ булыуын күрһәтә. Был сифатлы белем биреү контенты ғына түгел, шулай уҡ ул яҡшы йәнһүрәт, уны өлкәндәр ҙә, балалар ҙа рәхәтләнеп ҡараясаҡ, - тип билдәләне республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары - Башҡортостандың Иҡтисади үҫеш һәм төбәктең инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов.

Йәнһүрәт "Муха" студияһы тарафынан, рәссам-карикатурист Камил Буҙыҡаев һәм Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы ҡатнашлығында эшләнгән. "Әлифба: һандар һәм ваҡыт" проектының ижади төркөмө ярты йыл дауамында оригиналь сценарий, хикәйә һәм аниматиктар ижад итә. Әлеге ваҡытта тағы ла 4 серия әҙер, улар яҡын арала проекттың рәсми төркөмөндә ҡуйыласаҡ.

Проект өҫтөндә эшләүселәр икенсе миҙгелдең хәрефтәргә арналған өлөшө беренсеһенә ҡарағанда ижади йәһәттән ҡатмарлыраҡ та, байыраҡ та, тип билдәләй. "Балалар өсөн донъя ҡатмарлаша бара. Хәрефтәрҙән һүҙҙәр төҙөлә, һүҙҙәрҙән һөйләмдәр барлыҡҡа килә. Шуға күрә хәрефтәрҙән ҡатмарлыраҡ төшөнсәләргә күсергә кәрәк. Сюжет линияһы ла ҡатмарлаша һәм байый - йыл миҙгелдәре, ваҡыт үҙгәрә, урындар ҙа киңәйтелә. Темалар киңәйтелгәс, йәнһүрәт үҙе лә шуға ярашлы буласаҡ, - тип белдерә "Муха" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте директоры Артур Абдрахманов.

Әйткәндәй, "Әлифба" проектының беренсе миҙгеле 2023 йылда Башҡортостан Башлығы гранттарының кинематография өлкәһендәге проекттарға ярҙам итеү өлкәһендә беренсе конкурс еңеүсеһе булды. Сюжет буйынса аҡыллы һәм шуҡ малай Айтуған тыйнаҡ ҡыҙ Айгөлгә башҡорт алфавитын өйрәтә, шул уҡ ваҡытта улар алфавиттың билдәле бер хәрефенә тап килгән мауыҡтырғыс мажараларға эләгәләр. Йәнһүрәттең элекке һәм яңы серияларын "Әлифба" күңел асыу проектының VK селтәрендә vk.com/multalifba ссылкаһы аша ҡарарға мөмкин.

# ҠУРАЙ ТОРАТАУҒА САҠЫРА!

**7-9 августа Башҡортостанда, Ишембай районы биләмәһендәге Торатау итәгендә, республиканың һәм Рәсәйҙең мәҙәни тормошонда ваҡиға булырҙай "Ел моңо" музыка һәм бейеү фестивале үтәсәк.**



Асыҡ һауалағы был йәйге байрам ҡурайҙа уйнау традицияһын һаҡлаусы йәш музыканттарҙы һәм аҡһаҡалдарҙы, шулай уҡ этномузыка һөйөүселәрҙе берләштерәсәк. Алтайҙан, Силәбе өлкәһенән, шулай уҡ илебеҙҙең башҡа төбәктәренән музыканттар килеүе көтөлә.

Тәүге тапҡыр ошо йылдың февраль башында Өфөлә булып үткән "Ел моңо" фестивале Рәсәй һәм Башҡортостандың халыҡ моңо һәм милли музыка ҡоралдарының үҙенсәлекле мәҙәни этник-ара биҙәктәр булып хәтерҙә ҡалғайны. Халыҡ традицияларына нигеҙләнгән был байрам музыка һәм бейеү һөйөүселәргә ысын мәғәнәһендә бүләк булды. Өс көнлөк ижади форумдың гала-концертында сараны ойоштороусы ҡурайсы, продюсер, Башҡортостандың халыҡ артисы, Ш.Бабич исемендәге Йәштәр дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры, бик күп халыҡ-ара конкурстар лауреаты Роберт Юлдашев "Ел моңо" фестиваленең Өфөлә традицион байрамға әйләнәсәге һәм киләһе фестивалдең ошо йылдың йәйендә буласағы хаҡында хәбәр иткәйне. Һәм бына ярты йылдан һуң августа республикабыҙ халҡы өсөн изге булған Торатау янында "Ел моңо" тағы ла яңғыраясаҡ.

- Ер йөҙөндә күпме милләт халыҡтары бар, уларҙың мәҙәниәте һәм туған теле - беҙгә Аллаһ бүләге ул. Һәр телдең үҙ яңғырашы һәм моңо булған кеүек, халыҡтарҙың рухи хазина символы - музыка ҡоралдары ла бар. Беҙҙең бурыс - тыңлаусы күңеленә ана шул моңдо еткереү, кешеләрҙә музыка аша ата-бабаларыбыҙ хәтерен уятыу, уларҙы изгелеккә, яҡтылыҡҡа, ижадҡа көйләү, - ти Роберт Юлдашев.

Мәғлүм булыуынса, ҡурай моңонoң кеше организмына файҙалы тәьҫир бар, ул мөхитебеҙҙе таҙарта, рухыбыҙҙы күтәрә. Ул музыка ҡоралы ғына түгел, кеше менән тәбиғәт араһындағы күпер ҙә. Байрамға йыйыласаҡ музыканттар Урал тауҙары итәгендә генә үҫә торған тәбиғи ҡурайҙа уйнаясаҡ - был фестивалдең төп үҙенсәлеге булып торасаҡ.

Байрамдың тәүге көнө, 7 август, йыйылыу көнө булып, ул тәбиғәт менән аралашыуҙың онотолмаҫ мәленә әйләнәсәк. Йәғни, ҡырға сәйәхәт ҡылыусылар ҡурайсының үҫеп ултырған ҡурайҙы ҡырҡып алыуына шаһит булыр. Кис усаҡ янында аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу, ҡурайҙы уйнарға әҙерләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре көтөлә.

7-һенән 8 августҡа ҡарай таң менән фестивалдә ҡатнашыусылар ҡояш ҡаршылап, тыныслыҡ гимнын башҡарыу өсөн Торатауға күтәреләсәк.

8 август - фестиваль көнө. Тамашасыларҙы ҙур концерт программаһы көтә: унда боронғо халыҡ музыка ҡоралдары - ҡурай, балалайка, думбыра, ҡылҡумыҙ, перкуссия һәм тере тауыш моңдары яңғыраясаҡ. Бында шулай уҡ халҡыбыҙҙың боронғо оҙон көйҙәре, рус халыҡ йырҙары башҡарыласаҡ.

Кис ҡурай көйөнә "Ритайым" бейеүҙәре, усаҡ янында гитараға ҡушылып йырлауҙар...

Һәм, ниһайәт, 9 август байрамға килеүселәрҙе сағыу тамаша - гала-концерт көтә. Роберт Юлдашев етәкселегендәге "Ҡурайсы" этно-төркөмөнөң сығышы фестивалдең төп биҙәге буласаҡ.

# ҠУРСАҠ ТЕАТРҘАРЫ ЙЫЙЫЛА

**24-28 сентябрҙә Өфөлә "Ҡурсак-фест" халыҡ-ара ҡурсаҡ театрҙары фестивале үтә. Ул Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры сәхнәһенә Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм сит илдәрҙән сағыу 10 спектаклде йыя.**

Ҡатнашыусылар араһында Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, ҡурше Татарстан, Сыуашстан, Марий Эл республикалары, Владимир һәм Ырымбур өлкәләре, Донецк Халыҡ Республикаһы коллективтары бар. Фестивалдең тематикаһы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына арнала. Сергей Образцов исемендәге Дәүләт академия үҙәк ҡурсаҡ театры коллективы сараға почетлы ҡунаҡ булараҡ саҡырылған. Театр ябыу тантанаһында Борис Константинов ҡуйған "Ленинградка" спектаклен күрһәтә. Фестиваль программаһында оҫталыҡ дәрестәре, киң мәғлүмәт саралары ҡатнашлығында түңәрәк ҡорҙар, экскурсиялар һәм аралашыу барышында тәжрибә уртаҡлашыу ҡаралған. Проект сиктәрендә театр блогерҙары Лабораторияһы үтә. "Беҙҙең хәҙер бик шәп базабыҙ бар. Театрыбыҙҙы күргән һәр кем, бөгөнгө көндә был илебеҙҙәге иң яҡшы театр, тиғән баһа бирә", - ти республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.

Фестивалде РФ Президенты мәҙәни башланғыстар фонды булышлығында Башҡортостан ҡурсаҡ театры менән берлектә "Беҙҙең киләсәк" хәйриә фонды ойоштора. Проект 4 миллион һумдан ашыу ярҙам алған.

# ЯУГИР ЯҘЫУСЫЛАРҘЫ ИҪЛӘП...

**Башҡортостандың Милли әҙәбиәт музейы фронтовик-яҙыусылар - драматург Низам Кәриптең тыуыуына 120 йыл тулыуға һәм күренекле шағир, публицист Хәниф Кәримдең тыуыуына 115 йыл тулыуға арналған "Ҡәләмдең тере хәтере" тип исемләнгән күргәҙмә ойоштороҙо.**

Экспозиция ике авторҙың да башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте үҫешенә индергән өлөшөн һәм ижади юлын сағылдырыусы уникаль экспонаттар тәҡдим итә. Күргәҙмәгә яҙыусыларҙың шәхси әйберҙәре, әҫәрҙәренең ҡулъяҙмалары, фотоһүрәттәре, таныштары һәм башҡа БР Милли әҙәбиәт музейы фонды ҡомартҡылары ҡуйылған. XX быуаттың милли драматургияһы һәм шиғриәте формалашыуында Н.Кәрип һәм Х.Кәрим ижадының ролен сағылдырған материалдарға айырыуса иғтибар бүленгән. Низам Кәрип һәм Хәниф Кәрим яҡташтар һәм дуҫтар була, бер-береһе менән аралашып йәшәй. Тик аяуһыҙ һуғыш уларҙың яҙмыштарын айыра. Береһе мәңгелеккә яу яланында ятып ҡала, икенсеһе иҫән ҡайтып, башҡорт әҙәбиәтенә хеҙмәт итеүен дауам итә. Әйткәндәй, шағирҙарҙың тормош юлы, ижады менән яҡындан танышырға теләгәндәр Башҡортостан Милли әҙәбиәт музейында асылған был күргәҙмәне барып ҡарай ала.

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠОЯШ НУРЫ ЕТЕШМӘҺӘ...

■ Кембридж университеты ғалимдары билдәләүенсә, ҡояш нуры етешмәгән кешелә йөрәк һәм яман шеш ауырыуҙары барлыҡҡа килеү хәүефе арта. D витамины етешмәһә, һөйәктәр мыртҡа әйләнә, диабет, йөрәк сирҙәре, яман шеш аҙа. Көнө буйы ябыҡ бинала ултырып эшләүселәрҙең һәр унынсыһы хәүеф аҫтында, ти ғалимдар. D витамины күп кенә химик реакцияларҙа ҡатнаша. Был витаминдың төп сығанағы булып ҡояш нурҙары тора. Йәйен ҡояш аҫтында 20 минут йөрөү ҙә етә, әммә ҡышын организмды D витамины менән тулыландырыу өсөн туҡланыуға ла иғтибар арттырығыҙ. Балыҡтың майлы сорттары ашау файҙалы. D витамины тулыһынса үҙләштерелһен өсөн кальций кәрәк, шуға ла һөт аҙыҡтары ла өҫтәлегеҙҙә гел булһын.

■ Бөйөк Британия ғалимдары йәйәү йөрөүҙең психик торошҡа яҡшы тәьҫир итеүен асыҡлаған. 18 мең кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, эш урынына йәйәү, йә булмаһа, велосипедта килеүселәр физик йәһәттән генә түгел, психик яҡтан да үҙен яҡшыраҡ тоя. Улары үҙҙәрен тыныс тота, стресҡа бирешеп бармай, эшкә һәләтлелектәре лә юғары һәм, иң мөһиме, үҙҙәрен күпкә бәхетлерәк тоя! Шәхси автомобиль менән йөмәгәт транспорты араһында ла айырма бар икән. Уларҙың икенсеһендә йөрөү файҙалыраҡ, ти ғалимдар. Сөнки руль артында кеше көсөргәнеш кисерергә мәжбүр, ә йәмәғәт транспортында бер нәмә тураһында уйламай ғына китап уҡып, йәки һөйләшеп барырға була.

■ Вена университеты ғалимдары ҡыҙыҡлы тәжрибә үткәргән. Улар 42 студент ҡыҙҙы фотоға төшөрөп, тауышын яҙмаға яҙҙырған. Был материалдарҙы ир-егеттәр төркөмө ҡарап, иң матур тауышлы һәм иң сибәр ҡыҙҙы билдәләргә тейеш булған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, матур тауыш башлыса сибәр ҡыҙҙарҙыҡы булып сыҡҡан. Бактиһәң, тауыштың матурлығы тауыш ярыларының дөрөҫ урынлашыуы, танау менән иркен тын ала белеү, тамаҡтың тәбиғи формаларының дөрөҫ булыуы менән бәйле. Был билдәләр йөҙҙөң симметрияһы тураһында һөйләй. Шулай уҡ матур тауышлы ҡатын-ҡыҙҙар, ғәҙәттә, ҡалын иренле, уларҙың бит һөйәге юғары урынлашҡан була. Былар барыһы ла генетик аппарат эшмәкәрлегенең яҡшы эшләүен күрһәтеп тора. Шуға ла ир-егеттәр инстинктив рәүештә бындай ҡатын-ҡыҙҙарҙы сибәр тип иҫәпләй.

■ Клиник психолог Рамани Дурвасула әйтеүенсә, ҡәһүәнең ниндәй төрөнә өҫтөнлөк биреүенә ҡарап, кешенең холҡон билдәләргә була. Мәҫәлән, классик ҡәһүә яратыусылар үтә дөрөҫ йәшәүсе, талапсан булып ҡыланыусылар рәтенән. Улар киҫкен, түҙемһеҙ була, үҙгәрештәрҙе яратмай. Латтеға өҫтөнлөк биргәндәр ярҙамсыл иҫәпләнә. Ниндәй һорау менән мөрәжәғәт итһәң дә, уларҙан гел ярҙам көтә алаһығыҙ. Әммә был кешеләрҙең юҡҡа көйөп барыу кеүек сифаты ла бар. Артыҡ талапсандар капучино ярата. Улар хис-тойғоға бай, бар нәмәне контролдә тоторға тырыша, үҙҙәренең сәләмәтлеген дә яҡшы һаҡлай. Ирей торған ҡәһүә енел холоҡ, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе аҙаҡҡа ҡалдырырға яратыусы кеше тураһында һөйләй. Ә һалҡын татлы ҡәһүәне социаль яҡтан ҡыйыуҙар эсә. Улар, ғәҙәттә, күп нәмәне уйламайынса хәл итә.

ОНОТОЛМАҪ МӘЛ

**Әрмелә хеҙмәт иткән элекке һалдаттарҙың барыһы ла хеҙмәттәштәре менән осрашырға ынтылып йәшәй. Нимә генә тимә, һалдат дуҫлығынан да ныҡыраҡ дуҫлыҡ юҡтыр донъяла. Күрәһең, һалдат хеҙмәтенең ауырлығы ҡырҡ ата балаларын берҙәм итәлер. Утты-һыуҙы кискәндә тыуған дуҫлыҡ та шулай һыналалыр. Әлеге ваҡытта Өфө ҡалаһында коммунал хеҙмәттә эшләүсе Әбйәлил районының Ярлыкап ауылында тыуып, Тал-Ҡусҡарҙа үҫкән ир-уҙаман Азамат Рәфил улы БАҺАУВ та бынан ҡырҡ йыл ярым элек әрмелә хеҙмәт иткән. Быйыл июль айында ул оло тәүәккәллек күрһәтеп, алдан иҫкәртмәйенсә, еңел машина менән Дағстандың Левашин районына ҡараған Кулибухна ауылында йәшәүсе хеҙмәттәше, даргин милләтле Магомедкамил Арслановҡа ҡунаҡҡа барған. Ошо хаҡта ишеткәс тә, Азамат менән бәйләнешкә инеп, әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

# ҠЫРҠ ЙЫЛДАН ҺУҢ...

## әрме дуҫым менән осраштым







**➔ Азамат, һин ниндәй хәрби часта, ҡайҙа хеҙмәт иттең, Магомедкамил менән нисек дуҫлашып киттегеҙ?**

- Украинала учебка үткәс, Литвала десант дивизияһында хеҙмәт иттек. Унда ике часть торҙо. Беҙҙеке эскадрильяны хеҙмәтләндереүсе хәрби часть ине. Беҙ авиация инженерия хеҙмәтенә индек. Магомедкамилдан тыш, беҙҙең менән бер ҡаҙаҡ, бер таджик, бер үзбәк, бер татар егете хеҙмәт итте, ҡалған состав рустарҙан һәм украиндарҙан торҙо. Ауырлыҡ килеп тыуғанда кемдең нисек икәне шундуҡ күренә, беҙҙе Магомедкамил менән һалдат тормошо ауырлығы дуҫлаштырҙы. Ул әрме хеҙмәтенең тәүге ярты йылын Өфөлә Гоголь урамында урынлашҡан хәрби часта хеҙмәт иткән икән, шуға күрә лә беҙ бер-беребеҙҙе яҡташ һымаҡ та күрҙек.

**➔ Моғайын, ул йәшәгән республикаға, районға, ауылына тота килеп сығып китмәгәнһеңдер. Был хәл осраҡлы булдымы, әллә хеҙмәттәшеңә сюрприз эшләргә теләгәйнеңме?**

- Беҙ 1984 йылда әрменән ҡайттыҡ. Магомедкамил минә 1986 йылда хат яҙғайны. Хатында кәсеп менән шөғөлләнергә лә тәҡдим яһаны: "Хәҙер кооперативтар асырға рөхсәт иттеләр. Мин бүректәр текһәм, һин һатырға ярҙамлашһаң, аҡса ла туплар инек", - тип тәҡдим яһаны. Ул ваҡытта мин уҡырға индем, өйләнеп тә йөрөй инем, шунлыҡтан, яуап яҙырға ваҡыт тапманым. Йыл да, яҙамҙаҙам, тип йөрөп, ҡырҡ йыл ярым ваҡыт үтеп китте.

Ә уға барыу ниәте миндә һәр ваҡыт булды. Хат яҙғансы, барып күрәм, сюрприз да булыр, тип уйланым. Өҫтәүенә, Кавказды ла күргәнем юҡ ине. Тере микән, юҡмы икән, иҫән булһа, ҡайҙа йәшәгәнен дә белмәйем бит инде. Ошо хаҡта анализ яһап, өс йыл буйы әҙерләнеп, ҡатынымды иптәш кенә күндерҙем. Машина ла алдым, ауылына барғас, ҡалғанын күҙ күрер, тип уйланым. Әрмелә булған дуҫтарҙы интернет селтәре аша эҙләп ҡараным, береһен дә таба алманым. Беҙ десант ғәскәрендә хеҙмәт иткәс, 90-сы йылдар сыуалыштарында күбеһе иҫән дә ҡалмағандыр инде. Шуға күрә ауылына барып инмәйенсә, үҙенең тере икәнлеген дә белмәй инем.

**➔ Ярар, һеҙ осраштығыҙ, ул һине танынымы? Ниндәй тойғолар кисерҙегеҙ?**

- Тауҙар араһындағы ауылына барып инғәс, бер йорт янына туҡтап, һорашырға булдыҡ. Ҡатыным, тағы ла арыраҡ үтеп һорашайыҡ, ти. Арыраҡ үттек тә, һорашһаҡ, тәүге туҡтаған йорт ата-әсәһенеке, әле туҡтағаныбыҙ үҙенеке булып сыҡты. Шундуҡ таныны инде. Йыл ярым буйы иңгә-иң терәп йөрөгән хеҙмәттәшем, дуҫым бит инде. Мин дә уны тауышынан уҡ таныным. Ҡунаҡ ҡайғыһы булманы, икәүләшеп һөйләшеүҙән бушаманыҡ. Биш көн буйына туҡтаһыҙ аралаштыҡ.

**➔ Туғандары, ғаиләһе һеҙҙе нисек ҡабул итте? Ҡунаҡ иттеләрме?**

- Магомедкамилдың өс ҡыҙы бар, өсөһө лә кейәүгә сыҡҡан, ете ейәне, бер ейәнсәре үҫә. Ейәндәре бик итәғәтлеләр, ейәнсәренә бер йәш тә тулмаған. Ейәндәре барыһы ла өлкәндәр ыңғайына намаҙ уҡыйҙар. Дағстанда дин бик көслө.

Үҙенең йортонда ҡунаҡ итте инде. Туғандарын йыйып, табын ҡороп ултырыу икебеҙҙең башҡа ла инеп сыҡманы. Башҡорттар ҡапыл килеп төшкән ҡунаҡты нисек һыйлайҙар, шулай, нимәләре бар, шуның менән ҡунаҡ иттеләр инде. Артабан Дағстан буйлап сәйәхәткә сығып киттек. Магодедкамил да беҙҙең менән йөрөнө. Ҡайны ваҡыт һиҙмәй ҡалһаҡ, ул беҙ йәшәгән ҡунаҡханалар, туҡланған ашханалар өсөн, машинаға бензин хаҡын да үҙе түләп өлгөрә ине. Быны һиҙеп ҡалып, артабан инде барыһы өсөн дә үҙебеҙ түләнек. Кеше елкәһендә йәшәп өйрәнмәгәнбеҙ бит. Дәүгә белдергәйнем: "Һин бында минең ҡунаҡ, барыһын да мин түләргә тейешмен", - тине дуҫым көләмһерәп. Биш көн бергә йөрөнөк, аҙаҡтан:"Ҡатының һине һағынғандыр инде. Өйҙә эштәрең күптер", - тип, ҡыуып тиерлек ҡайтарып ебәрҙем.

Ҡыҙҙары беҙҙе күрмәһәләр ҙә, шылтыратып, рәхмәт әйттеләр. Беҙ көтмәгәндә килеп төшөп, уларҙың ата-әсәһен ныҡ ҡыуандырғанбыҙ икән. Беҙҙең килеүебеҙ хаҡында күптәр ишеткән булып сыҡты. Машинабыҙҙың бер проблемаһы килеп сыҡҡайны, автосервиста ла бушҡа ремонтлап бирҙеләр.

**➔ Башҡорт күстәнәсһеҙ йөрөмәй, күстәнәскә нимә алып барҙығыҙ?**

- Күстәнәскә башҡорт балы алып барҙым. Минең унда китеремде ишеткәс, мин эшләгән коллективтың етәксеһе, директорыбыҙ атаһынан бал алып килде, магазиндарға ла инеп бал алдыҡ. Бынан тыш, милли ризыҡтарыбыҙҙы ла күстәнәскә алдыҡ.

**➔ Әгәр ҙә хеҙмәттәшең, һинең һымаҡ алдан иҫкәртмәйенсә, ҡапыл килеп төшһә, уны нисек ҡунаҡ итер инең, ҡайҙа алып барыр инең?**

- Беҙгә килеп төшһәме, иң тәүҙә Урал тауҙарын, Шүлгәнташты алып барып күрһәтер инем, Бөрйән урмандарына, Әбйәлил күлдәренә мотлаҡ һуғылыр инек. Өфөлә лә күрһәтә торған урындар күп. Беҙ ҡайҙа ғына ҡасан ғына осрашһаҡ та, барыбер ҙә күбергән икәүҙән-икәү һөйләшер, аралашыр инек. Йәш саҡты иҫкә төшөргәндә кеше үҙе лә йәшәреп китә бит инде.

Минең әрмелә төшкән фотолар һыу баҫыу ваҡытында әрәм булғайны. Алай ҙа улар Магомедкамилда һаҡланған. Мин уларҙы үҙемә төшөрөп алып ҡайттым.

**➔ Ҡайтып китер алдынан нимә тип әйтештегеҙ, нисек хушлаштығыҙ?**

- Ҡатын-ҡыҙ булһаҡ, илашыр инек. Осрашҡанда ла илай яҙҙыҡ. Хәҙер ҙә шылтыратышып һөйләшеп торабыҙ. Ҡырҡ йыл ярым ваҡыт эсендә бер-беребеҙҙе ныҡ һағынғанбыҙ, сәғәттәр буйы һөйләшә лә ҡуябыҙ. Ҡунаҡ ашы ҡара ҡаршы, тиҙәр халыҡта. Барыбер ҙә алдағы йылдарҙа хеҙмәттәшемде үҙебеҙгә ҡунаҡҡа саҡырырмын тием. Беҙҙең әле һөйләшеп һүҙебеҙ бөтмәне, аралашып танһығыбыҙ ҡанманы...

**➔ Ҡыҙыҡлы әңгәмәң өсөн оло рәхмәт, Азамат Рәфил улы!**

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ



# ЯРҘАМ ИТЕҮ ТУҠТАМАЙ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәрби хеҙмәткәрҙәргә һәм уларҙың туғандарына ярҙам саралары хаҡында иҫкә төшөрҙө. Махсус операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам күрһәтеү туҡтамай, тип өҫтәне ул.**

Башҡортостан Махсус хәрби операция биләмәһенән ҡайтҡан яугирҙарға ҙур иғтибар бүлә. Республика уларға, шулай уҡ ғаиләләренә һәр яҡлап дәүләт ярҙамы күрһәтә, был эш туҡтамай. Радий Хәбиров ошо һүҙҙәрҙе йыш әйтә. Башҡортостан Башлығы билдәләүенсә, МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә 54 төбәк ярҙам сараһы ғәмәлдә (мәғариф, медицина ярҙамы, социаль яҡлау, эшкә урынлашыу, көнкүреш проблемаларын хәл итеү һәм башҡалар). "Беҙ уларға һаулыҡты нығытыу, ҡайтанан уҡыу, күнелемә оҡшаған шөғөл табыу мөмкинлеген бирәбеҙ. Махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары тураһында хәстәрлек күрергә тырышабыҙ. Атайҙары, кемдәндер әсәйҙәре Тыуған илебеҙ һағында булғанда, улар бер нимәгә лә мохтажлыҡ кисерергә тейеш түгел. Мин һәр ваҡыт муниципалитет башлыҡтарынан, республиканың власть органдары етәкселәренән Махсус операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам мәсьәләләренә мөмкин тиклем яуаплы ҡарауҙарын, был эште исем өсөн генә башҡармауҙарын һорайым. Бөгөн МХО-ға, яугирҙарға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеүҙән дә мөһимерәк бурыс юҡ", - тине Радий Хәбиров.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

● Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләре өҫтөнлөклө тәртиптә торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн социаль түләүҙәр алырға мөмкин. Тейешле документҡа Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Әлеге ваҡытта өс һәм унан күберәк балаһы булған йәш ғаиләләр, шулай уҡ 2005 йылдың 1 мартына тиклем торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн иҫәпкә баҫҡан йәш ғаиләләр ошондай түләүҙәр алыу өсөн өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә. Хәҙер Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың йәш ғаиләләре лә бындай хоҡуҡтан файҙаланырға мөмкин. Торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн социаль түләү йәше 35-кә етмәгән ғаиләләргә тапшырыла. Балаларҙың булыуы мотлаҡ түгел. Бынан тыш, бер йәки унан күберәк бала тәрбиәләгән, 35 йәше тулмаған яңғыҙ атай йә иһә әсәй ҙә дәүләт ярҙамына хоҡуҡлы. Төп талап - ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж булырға тейеш. Түләүҙең күләме торлаҡ хаҡынан 30-35 процент тәшкил итә. Аҡсаны өй, яңы һалынған йорт-та фатир алыу, шәхси торлаҡ төҙөү, шулай уҡ тәүге иғәнә йәки ипотеканы ҡаплау өсөн тотонорға була.

● 2025 йылда хәрби хәрәкәттәр зонаһында яраланған МХО ветерандарына спорт залдарында һәм секцияларҙа бушлай шөғөлләнеү өсөн 10 мең һумлыҡ сертификаттар биреләсәк. Ярҙам сараһы физик тәрбиә һәм һаулыҡ һаҡлау хеҙмәттәре буйынса социаль заказға индереләсәк. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһендә белдерҙе. Республика етәксеһе Спорт министрлығына ярҙам сараһын булдырыу буйынса документтар әҙерләргә ҡушты. "Беҙ адаптив спортҡа, Махсус хәрби хәрәкәттәр ветерандарын спорт аша реабилитациялауға айырым иғтибар бүләбеҙ. "Батырлыҡ" проектына ярашлы төҙөлгән республика йыйылма командаһы МХО ветерандарының "Беҙҙең заман геройҙары" төбәк-ара ярыштарында уңышлы сығыш яһаны. Беҙҙең команда Ватанды һаҡлаусылар кубогында ла ҡатнашты. Рәсми булмаған миҙалдар турнирында Башҡортостан командаһы Волга буйы һәм Урал федераль округтарының МХО ветерандары араһында беренсе урын яуланы", - тине Радий Хәбиров.

● Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында мәшғүллек бюроһында теркәлгән МХО-ла ҡатнашыусыларға эшһеҙлек буйынса максималь пособие тәғәйенләргә тәҡдим иттеләр. Республика парламенты депутаттары "Рәсәй Федерацияһында халыҡ мәшғүллегенә булышлыҡ итеү тураһында" Федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектына тейешле үҙгәрештәр индерергә планлаштыра. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, закон проекты Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға социаль гарантияларҙы көсәйтеүгә йүнәлтелгән. Махсус операцияла ҡатнашыусылар тыныс тормошҡа ҡайтҡандан һуң эшһеҙлек буйынса пособие юллағанда проблемалар менән осраша, тип билдәләне спикер. Константин Толкачёв әйтеүенсә, эшһеҙлек буйынса пособиены иҫәпләп сығарыу өсөн өйөнә ҡайтҡан хәрби хеҙмәткәрҙәргә килем тураһында белешмә тапшырырға кәрәк. Был документты Оборона министрлығы бирә. Оборона министрлығына мөрәжәғәттәр күп килә, шуға белешмәләр тултырыу өсөн ваҡыт талап ителә. Һөҙөмтәлә проблема килеп тыуа. Белешмә юллағансы, яугир аҡсаһыҙ ҡала, эшһеҙлек буйынса минималь пособие ала. "Беҙ граждандарҙың ошо категорияһы өсөн пособие юллау тәртибен ябайлаштырырға һәм уларға эшһеҙлек буйынса максималь пособие алыу хоҡуғын бирергә тәҡдим итәбеҙ. Бынан тыш, тейешле аҡса түләнгән ваҡытты 6 айҙан 12 айға тиклем арттырырға кәрәк", - тине Константин Толкачёв. Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, закон проекты МХО-ла ҡатнашыусыларҙың барыһына ла (мобилизацияланғандарға, добровольцтарға һәм контракт-сыларға) ҡағыла.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАЛА ТАБЫУҒА БӘЙЛЕ ИМ-ТОМ

***Кендек ҡырҡыу.*** Кендекте кендек инәһе бысаҡ йәки бәке менән таҡтала, изге китапта, итек үксәһендә оҙон итеп ҡисҡан. Ҡисҡан кендеккә ҡорот йә сөрөк һипкәндәр. Кендекте кеше аяғы баҫмаған ергә күмеү йолаһы ла бар.

***Аҡ биләүгә биләү.*** Яңы тыуған баланы аҡ биләүгә биләп, аҡ бәхеттәр теләп, әсә янына һалалар. Был ырым әле лә йәшәй.

***Иҫке күлдәккә урау.*** Борон баланы атаһының йәки әсәһенең иҫке күлдәгенә урау киң таралған булған. Урағанда: "Атайың кеүек көслө, тәүфиҡлы бул", - тигәндәр. Әсә күлдәгенә төрөп: "Әсәйең кеүек матур, илтифатлы бул", - тигәндәр. Ышаныуҙар буйынса, ата күлдәгенә төрөлгән бала - атаһына, әсә күлдәгенә төрөлгәне әсәһенә яҡын була икән. Олатаһы, өләсәһе кеүек ғүмерле булһын, тип, ололар күлдәгенә урау йолаһы ла булған. Өләсәйҙең иҫке аҡ яулығы, аҡ бәхеттәр, оҙон ғүмер теләп, яңы тыуған сабыйҙың башына ябылған, йүргәк итеп уралған.

***Бала ауыҙландырыу.*** Бала тыуғас та "ауыҙландырыу" тигән йола үткәрелгән. Ул йола буйынса, әле генә тыуған балаға "Бисмилла" әйтеп, ауыҙына бал һәм май тейҙереп алалар йәки ҡаптыралар. Ауыҙландырған ваҡытта: "Ата-инәңә шәфҡәтле бул, ошо май кеүек йомшаҡ, бал кеүек тәмле телле бул", - тиҙәр. Ауыҙландырыу өсөн аҡ май, һары май, күбек майы ҡулланылған. Ҡайһы бер яҡтарҙа балаға бәхетле киләсәк, бай, ырыҫ тормош теләп: "Бер ҡулың майҙа, бер ҡулың балда булһын", - тип ауыҙландырғандар. Белорет, Бөрйән яҡтарында ауыҙландырғанда баланың битенә, маңлайына, ҡашына, ирененә бал һәм май һөртөп: "Ике ҡулың май булһын, ауыҙың тулы бал булһын", - тип һамаҡлағандар.

***Тәүге имеҙеү.*** Ауыҙландырғас, балаға имсәк биргәндәр. Иң тәүҙә уң яҡ имсәк "Бисмилла" тип бирелә, шунан һул яғын биргәндәр. Тәүге имеҙгәндә аҡ бәхеттәр теләп, күкрәк һөтөн баланың битенә, маңлайына, күҙенә һөрткәндәр.

***Бәпес мунсаһы.*** Бәпес тыуғас, уға махсус мунса әҙерләнә. Иң элек ул бик яҡшы итеп йыуыла. Бала йыуындырыла торған мунсаға башҡалар инмәй. Бала мунсаһы - бала өсөн генә.

Баланы, ғәҙәттә, кендек әбейе йыуындыра. Ул тәүҙә баланы әсә алдына һалып, бала миндеге менән рәхәтләндереп саба. Шунан әпсендәр әйтеп йыуа.

Мунса инмәгән бала ауырыуҙарға бирешә, тигәндәр. Ауырыуҙарға бирешмәһен өсөн, баланы сапҡанда, төрлө әпсендәр әйткәндәр:

*Атаң ҡисҡән утын түгел,*
*Әсәң яҡҡан мунса түгел,*
*Бүрәнә башы, бүре теше, у-у-у...*

Урта Урал башҡорттары бәпес мунсаһын нәнәй мунсаһы тиҙәр.

**Фирҙәүес Хисамитдинованың "Башҡорттарҙың им-том китабы"нан.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Һупайҙы, һупылдаҡ ябалаҡ

**(Мохноногий сыч)**



Ваҡ урман ябалағы, саҡ ҡына турғайҙан ҙурыраҡ, тик йөнө ҡабарып тороу сәбәпле, эрерәк күренә. Ҡойроғо ҡыҫҡа, башы ҙур, бармаҡтары йөн менән ҡапланған. "Ҡолағы" юҡ, "бите" аҡ, аҫтан ҡара төҫ менән ҡаймаланған. Күҙҙәренең өҫкө яғы аҡ таптар төшкән һарыуғусҡыл төҫтә, аҫҡы яғы аҡһыл. Тауышы - шәп, түбән, тамсы тамғанды хәтерләтеп тә ҡуя.

Тумыртҡаның ылыҫлы урмандарҙағы ағасты соҡоп яһаған ҡыуышлыҡтарға оя ҡора. Кешегә һирәк күренә. Урал тауҙарында, уның алғы һәм арҡты өлөшөндә осрай. Ырымбур өлкәһендә ҡышлай.

Төп ризығы - сысҡандар. Ҡышын ваҡ ҡоштарға ла һунар итә.

## Байғош, байғош ябалаҡ

**(Домовый сыч)**



Турғайҙан ҙурыраҡ. Башы ҙур, ялпаҡ, "йөҙө" - муйыны һәм түшенә йәбештереп ҡуйылған кеүек, аҡһыл төҫтә. Ултырған сағында ҡойроғон елпеп ултыра. Көндөҙ бағана һәм сымдарға ултыра. Тауышы - эт олоған кеүек.

Беҙҙең төбәктә йыш осрай торған төр, иҫке ауылдарҙы ярата. Үҙ территорияһында йыл әйләнәһенә йәшәй, парына тоғро. Февраль-март айҙарында йырлай башлай, апрелдә ҡош туйҙарының иң ҡыҙған мәле.

Беҙ байғош ябалаҡты Баймаҡ районы Юлыҡ ауылында, Саҡмағош районы Резәп ауылында ғына күрҙек, улар йышыраҡ һалам башлы ҡыйыҡтарҙа ултыра, ә төнгә ҡысҡырыуҙарынан балалар ҡурҡа ине. 1962 йылда Асылыкүл эргәһендә лә осраттыҡ. 2008 йылда "Талкаҫ" санаторийы территорияһында байғош ябалаҡ балаһын ашата ине: балаһы телевизор антеннаһына ҡунған һәм инәһенән аҙыҡ таптырып тауышлана.

Ояһын төҙөлөш барған ерҙәрҙә, һарайҙарҙа, төрлө тишектәрҙә ҡора.

Төп ризығы - йорт сысҡандары һәм ҡомаҡтар. Йыртҡыс ҡоштар араһында иң ҡыйыуы. Беҙгә билдәле булыуынса, 9 йәшлек байғош ябалағы әлегә иң олоһо иҫәпләнә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**



### 4 АВГУСТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.50, 11.25, 0.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 "Время героев". [16+]
13.00, 14.15 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-4". [12+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Старушки в бегах. Крымские каникулы". [12+]
23.40 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.00 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.52 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]
11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Специальный репортаж. [12+]
12.15 Квадратные метры. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 Асыш. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Башкорттар. [6+]
16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
17.45 Профессионалы. [12+]
18.00 Защитники Отечества. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 О чем молчат Памятники. [12+]
20.45 Д/с "Герои". [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 Т/с "Безопасность". [16+]
0.45 Спектакль "Асылъяр". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

### 5 АВГУСТА
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-4". [12+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Старушки в бегах. Крымские каникулы". [12+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.00 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.51 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]
11.00 "Из жизни доктора". [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 16.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Д/с "Большой скачок". [12+]
19.00, 4.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 "Занимательная биология". [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 Т/с "Безопасность". [16+]
0.45 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

### 6 АВГУСТА
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-4". [12+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Старушки в бегах. Крымские каникулы". [12+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.00 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.51 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]
11.00 "Дорога к храму". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 "Экологично". [6+]
15.30 "Атайсал". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
17.45 Генералы Башкортостана. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Защитники Отечества. [12+]
21.00 "Асыш". [6+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 Т/с "Безопасность". [16+]
0.45 Спектакль "Белый пароход". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

### 7 АВГУСТА
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Старушки в бегах. Крымские каникулы". [12+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.00 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.51 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]
11.00, 2.00 Автограф. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
12.15 Профессионалы. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 Сулпылар. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Дознание. [16+]
17.00 Д/с "Большой скачок". [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 "Йома". [6+]
19.00, 4.00 Телецентр.
19.45 "Мама". [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Бизнес-обзор. [12+]
21.00 Д/ф "Тихая моя Родина". [12+]
22.00, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 Т/с "Безопасность". [16+]
0.45 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

### 8 АВГУСТА
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 17.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Т/с "Ищейка-7". [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" [16+]
22.55 Т/с Премьера. "Шерлок и дочь". [16+]
0.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе! Народный кастинг". [12+]
23.40 Х/ф "Счастливая жизнь Ксении". [12+]
3.20 Х/ф "Чужое лицо". [12+]
4.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]
11.00 "Йома". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 "Асыш". [6+]
15.15 Тирмәкәй. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Хазина. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]
18.00 Башкорттар. [6+]
19.00 Честно говоря. [12+]
19.45 История одного села. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 "Башкорт йыры-2025". [12+]
22.00 Своих не бросаем. [12+]
22.15 Бизнес-обзор. [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 Т/с "Безопасность". [16+]
0.45 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]
4.00 Телецентр.
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

### 9 АВГУСТА
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Юрий Соломин. "Видишь ли, Юрий..." [12+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.10 Премьера. "Они выбрали - Родину". [16+]
13.45 Т/с "Убойная сила". [16+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Церемония вручения премии "Шансон года". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Д/ф "Двое. Рассказ жены Шостаковича". Памяти Дмитрия Шостаковича". [12+]
1.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Горько-солёное море любви". [12+]
0.40 Х/ф "Заклятые подруги". [12+]
4.08 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз). [12+]
7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
8.30 Хазина. [12+]
9.00 "Весело живем!" [12+]
9.15 "Курай даны". [12+]
9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
9.45 Своих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Әкиәтсе. [6+]
10.45 Зерно. [6+]
11.15 "Ат уйнатып". [6+]
12.00 "Елкән". [6+]
12.30, 23.15, 3.45 "Ете егет". [12+]
13.30 Башкорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Х/ф "Лабиринт иллюзий". [12+]
18.00 Д/ф "Тихая моя Родина". [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00, 20.15 Квадратные метры. [12+]
19.15, 3.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 "Байык-2025". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
0.00 Караоке по-башкирски. [12+]
0.30 Т/с "Безопасность". [16+]
1.30 Спектакль "Крах и отчаяние". [12+]
4.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
5.15 Письма солдатам. [12+]
5.30 "Простые истории: жить, работать, любить". [12+]

### 10 АВГУСТА
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.40 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Чемодан из Хиросимы". К 80-й годовщине американской ядерной бомбардировки японских городов". [12+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.20 Д/с "MONEYпуляторы. "От звонка до звонка". [16+]
15.30 Д/ф "Николай Еременко. На разрыв сердца". [16+]
16.25 Х/ф "Пираты XX века". К 45-летию фильма". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Перепой звезду". [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Триггер". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 2.50 Х/ф "Заезжий молодец". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
22.30 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05 Х/ф "Земля Эльзы". [12+]
4.31 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз). [12+]
7.45 Династия чести. [12+]
8.15 "Легенды Урала". [12+]
8.30 Күстәнәс. [12+]
9.00 "Весело живем!" [12+]
9.15 "Мама". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.45 Тирмәкәй. [6+]
11.00 Городок АЮЯ. [6+]
11.15 "Беседка". [6+]
11.30 "Сулпылар". [6+]
12.00 "Атайсал. Беҙҙекеләр! Знай наших!" [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз).
13.15 "Занимательная биология". [12+]
14.00 Дорога к храму. [6+]
14.30 Квадратные метры. [12+]
15.00 Честно говоря. [12+]
15.45 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]
17.15 Д/ф "Башкирский мед". [12+]
17.45 Х/ф "Лабиринт иллюзий". [12+]
18.45, 20.15 Бизнес-обзор. [12+]
19.15 Әлләсе. [12+]
20.00 Патриот РФ. [12+]
20.30 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30 Новости недели (на рус.яз.).
22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 "Аркаим". [12+]
0.30 Т/с "Безопасность". [16+]
2.30 Спектакль "Дама без камелий". [12+]
4.30 Письма солдатам. [12+]
4.45 Башкирские каникулы. [12+]
6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Август (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (10) дүшәмбе | 3:09 | 5:32 | 13:30 | 18:41 | 21:12 | 22:42 |
| 5 (11) шишәмбе | 3:09 | 5:33 | 13:30 | 18:40 | 21:10 | 22:40 |
| 6 (12) шаршамбы | 3:10 | 5:35 | 13:30 | 18:39 | 21:08 | 22:38 |
| 7 (13) кесе йома | 3:11 | 5:37 | 13:30 | 18:37 | 21:06 | 22:36 |
| 8 (14) йома | 3:12 | 5:39 | 13:30 | 18:36 | 21:04 | 22:34 |
| 9 (15) шәмбе | 3:13 | 5:41 | 13:30 | 18:35 | 21:02 | 22:29 |
| 10 (16) йәкшәмбе | 3:14 | 5:43 | 13:30 | 18:33 | 21:00 | 22:28 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҺАРЫҠТЫҢ ИРКӘГЕ НИСЕК АТАЛА?




**29-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Себен. Салауат. Мамыҡ. Пенни. Һарыҡ. Халҡыма. Ҡолғона. Ҡарар. Тамаша. Мутон. Кит. Уҡлау. Анар. Азат. Мишәр. Ант. Сама. Аладдин. Нанду. Пантера. Спартак.

**Вертикаль буйынса:** Ҡырмыҫҡа. Палестина. Оран. Ата. Саян. Лампас. Ихата. Сәләм. Катод. Дуҫтар. Муҡса. Такси. Анчар. Нотоҡ. Һаҡ. Урман. Арыҡ. Арба. Ҡор. Утрау.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ХӘҘИСТӘР БИРГӘН ҺАБАҠТАР



**Ғибәҙәткә һәм йолаларға ғына бирелеп киткән күптәр бөгөн диндең хикмәтле хөкөмдәренә ҡолаҡ һалып бармай, тормошта уларҙы йүнәлеш итеп тә ала белмәй. Ә бит диндең нигеҙе - әҙәп менән күркәм холоҡ.**

"Бер генә ата ла үҙ балаһына күркәм холоҡтан да ҡиммәтерәк бүләк бирә алмаҫ", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһи үәс-сәләм.

"Яҡшылыҡты үҙегеҙ эшләй алмаһағыҙ ҙа, яҡшылыҡҡа башҡаларҙы өйрәтеүҙән баш тартмағыҙ. Яманлыҡтан үҙегеҙ тыйыла белмәһәгеҙ, башҡаларҙы унан тыя белегеҙ".

"Яҡшылыҡҡа өйрәтеүселәрҙән һәр кем, хатта диңгеҙҙәге балыҡтар ҙа гонаһтарынан ярлыҡауҙы һорар".

"Мөъмин кеше бер ҡатлы, изге була. Боҙоҡ кеше генә мәкерҙән һәм кешеләрҙе хурлап йөрөүҙән арына алмай".

"Әҙәпкә мине Аллаһы Тәғәлә үҙе өйрәтте, күркәм холоҡло итеп Ул тәрбиәләне", - тиелә хәҙистәрҙә.

"Минең өммәтем өсөн йәннәткә инеүҙең иң яҡшы юлы - тәҡүәлек менән күркәм холоҡ".

"Ата-әсәнең шатлығы Аллаһҡа ла һөйөнөс, ата-әсәнең асыуын килтергән нәмә Аллаһты ла асыуландыра".

"Ауырыуҙарығыҙҙы дауалау өсөн ярҙам итеп кенә тороғоҙ. Хәйриә эштәре бәндәләрҙе бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалай, сырхауҙарҙы ҡыуып тора. Улар һеҙҙең ғүмерҙе оҙайта, игелектәрегеҙҙе ишәйтә".

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ТАЛЫ БӨГӨЛӨП ТОРА...



**Аҡ тал (өйәңке, ива белая) менән бер рәттә талдың башҡа төрҙәре лә халыҡ дауаһында ҡулланылыш таба. Өйәңкенең ҡабығы, япрағы, сәскәләре ярҙамында ла дауаланалар. Һутҡа тулышҡан осорҙа талдың 3-4 йыллыҡ ботаҡтарынан ҡабығын һыҙырып алалар. Әммә шуны иҫтә тоторға кәрәк: һыу ситендә үҫеп ултырған талдың ҡабығын ҡырҡып, һыҙырып алырға ярамай. Сөнки был ағастың тамырҙары һыу булған ҡатламға тиклем китеп үҫә һәм талды ҡаты яралаһаң, һыу ҡаса.**

Өйәңкене төрлө невроздар, невралгия, ревматизм, подагра, һалҡын тейеүҙән барлыҡҡа килгән ауырыуҙарҙан, биҙгәк, гастрит, эсәктәрҙең елһенеүе, һары ауырыуы, бауыр һәм талаҡ ауырыуҙары, бәүел бүлеп сығарыу юлдары ауырыуҙарын дауалау маҡсатында ҡулланалар. Тал ҡабығынан әҙерләнгән сәй плеврит, хроник колит менән сирләүселәргә ыңғай тәьҫир итә, ә киптерелгән сәскәләренән төнәтмә тахикардия, экстрасистола булғанда дауа. Өйәңке ҡабығы онтағынан эшләнгән мазь яра, язваларҙы йүнәлтә. Ангина, ауыҙ ҡыуышлығы һәм теш ҡаҙнаһының стоматит, гингивит, пародонтоз кеүек сирҙәренән өйәңке ҡабығының төнәтмәһе менән сайҡау ярҙам итә, ә сәс ҡойолғанда дегәнәк япрағын өҫтәп баш йыуалар. Веналарҙың варикозлы киңәйеүен ҡабыҡтан ванналар эшләү ярҙамында дауаларға була.

***Тромбофлебит, веналарҙың варикозлы киңәйеүе.*** 1 күнәк һыуға 250 грамм тал ҡабығын һалып, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм талғын утта тағы 15 минут тоторға. Шунан 37 градусҡа тиклем һыуытып, ярты сәғәт дауамында аяҡтарҙы шул һыуға тығып ултырырға. Аҙаҡтан аяҡтарҙы ял иттерергә, ҡалын йәки резина ойоҡтар кейергә кәрәк. Ауырыуҙың хәле тотороҡланғанға тиклем ошо рәүешле дауаланыу яҡшы.

***Тахикардия, аритмия.*** Һары талдың (ива пурпурная) 100 грамм тирәһе аталыҡ сәскәлегенә ярты литр араҡы ҡойорға. Бер ай төнәтеп, һөҙөргә. Көн һайын бер ҡалаҡ һыуға 30-35-әр тамсы төнәтмә тамыҙып, ашарҙан алда көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

***Гинекологик ауырыуҙар, ҡан ағыуҙар.*** 1 ҡалаҡ онтаҡланған ҡабыҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, термоста 5-6 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң ярты сәғәт үткәс 1-әр ҡалаҡ эсергә. Аналыҡтан ҡан күп килгәндә көнөнә 6-7 тапҡыр, шулай уҡ 1-әр ҡалаҡ эсергә кәрәк.

***Ҡул ойоғанда, муйын тапҡыры һыҙлағанда, радикулит булғанда.*** 1 балғалаҡ ваҡлап туралған тал ҡабығына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һауыттың ауыҙын ябып, һыуынғансы төнәтергә. Көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

***Гипотония - ҡан баҫымының түбәнәйеүе.*** 1 ҡалаҡ ҡабыҡҡа 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, термоста 6 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне 3 өлөшкә бүлеп, тонусҡа килтереүсе сара булараҡ, ашарҙан 20-30 минут алда эсергә.

***Иҫкәрмә:*** *Тал сәскәләре бөтә йөрәк сирҙәренән дә шифалы түгел. Мәҫәлән, брадикардия булғанда уны ҡулланыу ҡәтғи тыйыла. Тал төнәтмәһе эсте тағы ла нығыраҡ ҡатыра. Уны ашҡаҙандың юғары кислоталылығына бәйле гастрит менән сирләгән осраҡта ғына түгел, ашҡаҙан һәм һуҡыр эсәк язваһы булғанда ла эсергә ярамай. Тағы бер мөһим иҫкәртеү: 16 йәше тулмаған балаларға аҡ тал препараттарын һыуыҡ тейгәндә, грипп һәм башҡа вируслы инфекцияларҙан бирергә ярамай, сөнки тал салицилат матдәләренә бай һәм был үҙ сиратында Рейе синдромы тигән үлемесле сиргә сәбәп була ала. Талды аспирин менән бер ваҡытта ҡулланырға ярамай. Шулай уҡ талдан әҙерләнгән дауаларҙы ҡулланғанда организмдан С витамины күп йыуылыуын иҫтә тоторға кәрәк.*

ӨС ДӘЛИЛ: АБВ

# ҠАРАҒАТҠА АҒАҢ МЕНӘН БАР!



**"Айыуға барһаң, ағаң менән бар" тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр икән. Ә беҙ, Әкрәм ағай Ҡәйепҡолов менән айыуға түгел, Баймаҡ районының Икенсе Этҡол ауылынан 5-6 саҡрым алыҫлыҡтағы Саҡмағош йылғаһы буйына ҡарағатҡа барып, айыуға тәл булдыҡ.**

Әкрәм ағай бала, үҫмер сағында йылға буйында ғаиләһе менән бесән сапҡан. Тап шул мәлдә ҡарағатҡа мулҡынғандар, ағай тәғәйен урынын да яҡшы белгәс, мине тура шунда алып барырға булды. Йәнәһе, эҙләнеп йөрөмәйбеҙ, барабыҙ ҙа һауыттарға ҡойоп ҡына алабыҙ. Алдың ти, алмай ҙа...

Йылға буйында элек Ҡуяндар ауылы ултырған, хәҙер унда ике йорт ҡына һаҡланған. Беҙ уң яҡ яр буйлап, йылғаның үр яғына табан йүнәлеп, машина үтә алған ергә тиклем барып, артабан йәйәү атларға булдыҡ.

Әкрәм ағай машинанан төшкән ыңғайы урманға инеп китте, мин багажниктан балта, бысаҡ, ҡарағат йыйырға һауыт алғансы, юлдашым апаруҡ ара үтеп өлгөргән. Мин унан йөҙ аҙым самаһы артта килөм. Уң ҡулымда һәрпәгем, һулында - бысаҡ, биләгемдә - силәгем. Күңелдә теге йыр: "Өфө, Силәбе, бешә ҡурай еләге..."

Бына ағай тәғәйен урынға барып етте лә, уң яҡҡа, ҡабырый урындан һаҙға боролоп төштө. Ул күҙҙән юғалыуы булды, һаҙ эсендә айыу сәүкелдәп үкерергә тотонмаһынмы, малайын. Сәүкелдәүе сәүек эттеке кеүек, ә бына үкереүенә ҡарағанда ағай һиҙмәҫтән уның ҡойроғона баҫҡанға оҡшаған.

Ағай һаҙҙан боролоп сыҡты ла, олимпия тыныслығы һаҡлап, "гестапо коридоры буйлап ышанысылы баҫып атлап килгән Штирлиц һымаҡ" минең яҡҡа ыңғайланы. Үҙәк эсендә айыуҙың һырты күренде. Уртаса ҙурлыҡтағы һоро йыртҡыс. Мин туктап ҡалдым. Ағай миңә табан атлай. Кадр артында шундай текст: "Штирлиц идет по нашему коридору..." Артабан ни булғанын Әкрәм ағай тик үҙенә генә хас стилдә интернет селтәрендә шулай яҙҙы: "Әхмәр арты менән сигенеп йүгереп бара. Үргә йәйләп сыҡтым да, икәүләп машина янына барҙыҡ. Ҡуҙғалып киттек, ә Әхмәр һаман арты менән бара. Бәхетиһән, айыу баҫтыра ҡалһа, видеоға төшөрмәк булған икән..."

Хәҙерге көн күҙлегенән барыһы ла мәрәкә генә тойолһа ла, ул саҡта бер ҙә генә көлкә килмәй ине. "Мин айыуҙан ҡурҡманым, әгәр ҙә ҡурҡһам, ул баҫтырыр ине. Элек Барҙымсала ҡыуыштап бесән сабып ятҡанда ла улар менән күҙгә-күҙ осрашҡан булды. Ул саҡта ла ҡурҡмай торғайным, киреһенсә, уларға: "Һаумы, бажа!" - тип өндәшһәм, һаулығымды алып китеп барырҙар ине..." - тип көлдөрҙө Әкрәм ағай ауылға етеп барғанда.

Емеш-еләге лә, бәшмәге лә, дарыу үләндәре лә, миндеге лә кәрәк. Шуға күрә, урманға бармайынса ла тора алмайбыҙ. Алдыбыҙға ҡапыл айыу килеп сыҡҡанда нимә эшләргә һуң? Мәсьәләгә өс юҫыҡта ҡарау лазым:

**А** Һуңғы йылдарҙа айыу-бүренең, ғөмүмән, йыртҡыс хайуандарҙың ауылдарға яҡынлауы күҙәтелә. Уларҙың кешеләргә ташланыу осрағы быйылғы йәйҙә лә булды. Айыуға ғына түгел, ҡарағатҡа ла, еләккә лә, муйылға ла, бәшмәк йыйырға ла кәмендә ағаң менән бар. Сит кеше һине ҡурҡыныс аҫтында ҡалдырып китеүе бар, ә ҡан уртаҡлығы булған ағайың, туғаның һине ташламаясаҡ. Әкрәм ағайҙың баҡый донъялағы Мәфтүхә өләсәһе Үтәбаева беҙҙең берҙәмлекте күреп ҡыуаналыр әле.

**Б** Урманда йырлап йә ҡысҡырып йөрөргә кәңәш итәләр. Сөнки ҡапыл өҫтөнә барып сыҡҡан айыу, һиҫкәнеп, өҫтөнә ташланыуы бар. Әкрәм ағай шым ғына шырлыҡҡа барып инеп, айыуҙың ҡойроғона баҫҡас, һаҙ хужаһы уны ҡыуып сығарҙы.

**В** Һунарсылар айыу менән йөҙгә-йөҙ ҡалғанда уның күҙҙәренә ҡарамаҫҡа, йүгереп ҡасмаҫҡа, ҡулына таяҡ алып, уны юғары күтәрергә кәңәш итә. Ул осраҡта айыу үҙенән дә бейегерәк, көслөрәк дәғүәсеһен тойоп, артҡа сигенә, имеш.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

САХИФӘНӘН

# ТОРМОШОБОҘҘАН...

## ҡыҙыҡлы сағыштырыуҙар

- Элек бәҙрәфтә гәзит уҡый инек, хәҙер бәҙрәфтә телефонда ултырабыҙ.
- Элек кистән балалар йоҡламаһа "бабай алып китә" ине, хәҙер күршеләр стена шаҡый.
- Элек мәктәпкә бара торған балаларыбыҙға августа ғына кейем ала инек, хәҙер көн һайын алырға тура килә.
- Элек ата-әсәләр кейемде ике-өс размерға ҙурҙы, биш йылға етерлек итеп алһалар, илағы килә ине, хәҙер балалар "оверзайс" (капсыҡ кеүек кейемдәр) кейгәнгә илағылар килә.
- Элек күршенең баҡсаһынан алма, ҡыяр, помидор урлай инек, хәҙер күршенең вай-файын сәлдерәбеҙ.
- Элек ике генә алмаш кейем әллә нисә йылға етә ине, хәҙер ете шкаф кейемебеҙ бар, ләкин "кейергә кейем юҡ".
- Элек йәй буйы ҡулдар себешләй ине, хәҙер телефонға күп баҫҡылап, ҡулдар сөйләлә́й.
- Элек ҡар яуғансы баҫыуҙа мәктәп ашханаһы өсөн кишер, сөгөлдөр сығарҙыҡ, хәҙер мәктәптә иҙән йыуҙырһалар, ҡар көрәтһәләр, эш судка барып етә...
- Элек тәҙрәләргә буран һүрәт төшөрөп китә ине, хәҙер пластик тәҙрәләргә бурандың һүрәте төшмәй.
- Элек йәй буйы йылғала малайҙар ҡыҙҙарҙы һыуға батыра торғайны, хәҙер балалар йөҙә лә белмәй.
- Элек ауылдарҙа ут һүнһә, ҙур шатлыҡ, тау шыуабыҙ, сәкән уйнай инек, хәҙер ут һүнһә, Хабировҡа ялыу яҙабыҙ.

**Шулай итеп, йәгеҙ, кемдә тағы ниндәй ҡыҙыҡлы сағыштырыуҙар бар, яҙышайыҡ әле.**

**Альбина МУЛЛАҒОЛ.**

ТЕЛЬӨЙӘР

# ШАҘЫРТ ЮЛДЫ ҺАЙЛАМА

**Бөгөн дә һүҙлегебеҙгә бер нисә миҫал шайланған. Ә һәр осрашыуға шайланғанда, туған телебеҙҙең ни саҡлы бай булыуына тағы бер инанаһың. Ошо "шайлау" тигән һүҙҙе ҡулланғанығыҙ бармы икән?**

**Шайлау** "һайлау" тигән һүҙҙе хәтерләтә, ләкин мәғәнәһе бүтән. *"Шайлау" - икенсе төрлө әйткәндә "әҙерләү" була. Баланы мәктәпкә шайлау. Бәйгегә иң яҡшы аттарҙы шайлайҙар.*

**Шағарлаҡ.** Күңел асыу, уйын-көлкө тураһында һөйләгәндә ҡулланылған һүҙ. *Ҡул буйында йәштәр шағарлаҡ ойоштора. Усаҡ яғып, бейешеү, таҡмаҡ әйтешеү үҙе бер шағарлаҡ булған.*

**Шағыр.** Телебеҙҙә "аҡһыл" тигән мәғәнәлә йөрөгән һүҙ. *Шағыр күҙ. Күкте шағыр болоттар ялмаған. Ҡарлы ямғырҙан һуң ялан шағыр төҫкә инде.*

**Шаҙырт.** Юлдар боҙолған мәлдә ҡайһы бер һөйләштә шулай атайҙар. *Көҙгө шаҙыртта урманға барыусылар булмай. Яҙғы шаҙыртта ла яҡын араға ғына йөрөйҙәр.*

**Шайлы.** "Бик яҡшы", тиер урынға "шайлы" тип тә әйтә алабыҙ. *Шайлы китап уҡыу. Күршеләребеҙ шайлы беҙҙең.*

**Шулай итеп, тормошобоҙ гелән генә шайлы барһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯМАН КЕШЕ...

## дәрәжәне күтәрә алмаҫ

Дәртһеҙ кеше - күсәк, йәрһеҙ кеше - ишәк.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күҙҙәр берҙе һөйләп, тел икенсене һөйләгәндә, тәжрибәле кеше уларҙың тәүгеһенә ышана.

**(Ралф Эмерсон).**

Ҡайһы саҡта тын һыуҙа ҙур балыҡ әләгеүе лә бар.

**(Халыҡ мәҡәле).**

Йыш ҡына милләтте бер кеше ҡотҡара; йыш ҡына милләтте бер кеше харап итә.

**(П. Буаст).**

Әгәр ҙә һәр беренсе осраған кеше тарафынан көс ҡулланыуға, мыҫҡыллаҡаныуға дусар ителә ала икән, ул милләткә аҡланыу юҡ.

**(Карл Маркс).**

Бел, ҡулдарының йөрәктәре Уға ни тиклем яҡын булһа, Аллаһы Тәғәлә шул тиклем ҡулдарының йөрәктәренә яҡынлай. Йөрәгеңә нимә яҡын - шуға иғтибар ит.

**(Ал-Джунайд).**

Һуғыштар әсәләр тарафынан ҡарғышҡа дусар булған.

**(Гораций Флакк).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер йылан арбаусы ир иң ағыулы йылан менән дуҫлашып алып, уның менән бер ҡасан да айырылмаған һәм муйынына уратып алып йөрөгән. Ул үҙе кешеләр менән аралашырға, уларға төрлө ҡыҙыҡ хәлдәр тураһында һөйләргә яратҡан. Әммә кешеләр уны оҙаҡ тыңлап тормаған, гелән генә уның эргәһенән тиҙерәк китеү яғын ҡараған. "Мине бер кем дә яратмай һәм аңламай, шуға мине тыңларға ла теләмәйҙәр. Кешеләрсә түгел был!" - тип зарланған йылан арбаусы. Үҙенең зарын ул кешеләргә лә һөйләй алмаған, ә муйынына уралып йөрөгән йыланға һөйләгән.**

**Бер саҡ йылан аулаусының, йыланын ҡулына алып, уға хәбәр һөйләп ултырғанын сит бер кеше ишетеп торған. Ул йыраҡтан тороп ҡына йылан хужаһына былай тип ҡысҡырған: "Әй һин, ҡулыңдағы йыланыңды ситкә быраҡтыр, ул саҡта һинән берәү ҙә ҡасмаҫ. Тап ошо ҡылыҡ һинең яҡтан кешеләрсә булыр. Шул саҡта һинең бәләңдә кешеләр ғәйепле түгел икәнен дә аңларһың..."**

**Үҙеңдең алама ҡылыҡтарыңдан ҡасһаң, Бәхеткә лә, Аллаға ла, кешеләргә лә яҡын булырһың, тигәнгә ишара был..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
31 июль 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -**
31 июль 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2707
Заказ - 1437